ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

14-20 октябрь (ҡарасай)

2017

№41 (771)

15 йыл

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Унда Салауатты ҙурлайҙар,**
унда Салауат рухы менән йәшәйҙәр!



7,11

**Шәхес азатлығы тураһында һүҙ,**
йәки Имәнде нисек бөгәләр?



8-9

**Ҡырғыҙстанда ҡунаҡта**



12

**Шәриғәт ҡанундары ла...**
мөхәббәтле ғаилә яғында



13

**ТВ-программа** 14

*"Уҡыусы уҡытыусыһынан һорай, ти: "Бәхеттең аҡсала булмауын нисек иҫбатларға?" Уҡытыусы, яйлап ҡына фекер туплап, ошолай яуап биргән: "Быны иҫбатлау бик еңел. Аҡсаға түшәк һатып алып булһа ла, түшәк өҫтөндә күргән төштө һатып алып булмай, йәки дарыу һатып алыу менән һаулыҡ килмәй... Өйҙө һатып алып була, өй йылыһын һатып алып булмай, белем алып, уҡып ҡына шулай уҡ аҡыллы булып китмәҫкә лә мөмкин. Бындай миҫалдар иҡһеҙ-сикһеҙ..."*

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ауыл ҡатын-ҡыҙҙары бөгөн ни эштәр бөтөрә, ниндәй уйҙар һәм пландар менән яна?

***Таңһылыу ВӘЛИЕВА, Баймаҡ районы Байым ауылы әҙинәйе, хаҡлы ялдағы уҡытыусы:*** Ауыл ҡатыны булыу - бер уҡыу йортонда ла уҡып өйрәнә торған һөнәр түгел, ул тыумыштан ҡаныңа, йәнеңә һеңгән һәләт. Ауыл ҡатыны була белергә, ауылда йәшәй белергә кәрәк. Ә ауылда йәшәү өсөн ҡалын ғына елкә, ҡеүәтле беләк һәм дарман-теләк кәрәк.

Бөгөнгө ауыл ҡатыны ниндәй, ул ниндәй уй-ниәттәр менән йәшәй? Мин был һорауға яуапты өҫтәл артында ғына ултырып эҙләмәҫкә булдым, гәрсә уларҙың хәлдәрен, йәшәйешен, көнкүрешен яҡшы белһәм дә. Еңгәйҙәр, килендәр, әхирәттәр менән әңгәмәләшеп алдым. Уларҙы тыңлап, һүҙемде, уйҙарымды барлап, ошондай фекер тупланым.

Ауылда йәшәү, ауыл ҡатыны булыу ҙур яуаплылыҡ талап итә, үҙенде фиҙа ҡылыуға ниғеҙләнә. Ауыл үҙе лә элек-электән үҙе өсөн генә йәшәмәгән кеүек, ауыл кешеһе лә, ауыл ҡатыны ла шундай уҡ. Бала уҡыта, тәрбиәләй, эшкә өйрәтә, тормошҡа әҙерләй. Иренә терәк, ярҙамсы, кәңәшсе. Донъя йөгөн тартҡанда мисәүгә ирҙәр егелгән, тиһәләр ҙә, йөктөң көндәлеге ҡатын иңендә.

Һыйлы көнөң - һыйырҙа, тип, һыйырҙың ағын аш итеү өсөн ниндәй генә ризыҡтар эшләмәй ул? Хәҙер ҡош-ҡорт алып, тәрбиәләп үҫтереү ҙә еңел түгел, элекке шикелле инәлектәр баҫып сығарып, үҙҙәренә эйәртеп ебәрмәйһең бит, баланы ҡараған һымаҡ ҡарайһың.

Баҡса эштәре бил яҙырға ваҡыт ҡалдырмай. Йәшелсәнең ниндәйен генә үҫтермәй, мәҫәлән, беҙҙең Байым ҡатындары! Үҫтереү генә етмәй, уларҙы ла аш итергә, эш итергә кәрәк. Көҙ айҙарында муллыҡҡа шатлыҡ менән ҡуша эше лә эйәрә. Ауыл ҡатыныһың ҡулында орсоҡ йә бәйләм энәләре лә ошо мәлдә күренә башлай. Нигеҙ һылап ағартыу, һарай-ҡураны йылытып әҙерләү... Эшләгәнен, әҙерләгән итенме, май йә ҡоротонмо, башҡаһынмы - өскә бүлеп өйрәнгән ауыл ҡатыны: үҙҙәренә, балаларына, килем-китемгә, күстәнәскә. Ауылдыҡы - уртаҡ. Ауылда йәшәп тә, йоморҡаны, һөт-ҡатыҡты магазиндан алыусылар ҙа юҡ түгел. Ауылдың үҙҙәре менән бергә ологая барыуына борсола ҡатындар. Быйыл Байым мәктәбе яңынан туғыҙ йыллыҡ мәктәп статусын алды - шуға күмәкләп ҡыуандыҡ. Аяттар уҡып йөрөйһө урынға, хәмерһыра һемерергә өйрәнгән өсдүрт ҡатындың ауыл исемен һатып йөрөүенә бошонабыҙ. Балалар аҡсаһына кәйеф-сафа ҡороп, балалары урынына эскеселәр йыйып ултырыусы өс ғаилә әйткәнде ҡолаҡтарына ла элмәй - был да яҡшы түгел. Буш торған өйҙәрҙе һатып алып, ремонт эшләп, төҙөкләндереп, биш йәш ғаилә ауылда төпләнде - быныһы беҙҙең өсөн оло ҡыуаныс. Сибайҙан килеп, ауыл кешеһенә кейәүгә сығып, ире менән бик ихластан, ауыл тормошона күнеп йәшәп алып киткән Зәкиәнең: "Миңә ауыл тормошо оҡшай. Дүртенсе ҡаттан ҡарамайым донъяға, иртәнсәк сығам да ергә, тупраҡҡа баҫам, саф һауа һулайым, быҙаубәрәстәрем менән мәж киләм", - тигәненә шатланабыҙ.

"Ауылдан башҡа тормошобоҙҙо күҙ алдына ла килтермәйбеҙ", тиҙәр Зөһрә, Зөлфиә, Зилә, Венера һылыуҙар ҙа. Урманға барып утын әҙерләгән кейәүе менән ҡыҙына бензин бысҡыһы менән ботаҡ боташҡан ауыл ҡатынына ни әйтерһең! Шундай ажар ҡатындар йәшәй беҙҙең Байымда!

**(Дауамы 2-се биттә).**

ҺӨЙӨНСӨ!

# ИЗГЕ ЭШ ЭШЛӘНДЕ!

**Республика көнө алдынан баш ҡаланың Дим районында яңы белем усағы - 161-се лицей асылды. Йыйылыусыларҙы оло ваҡиға айҡанлы Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Хәмитов ҡотланы.**



- Һеҙ бассейны, спорт залдары булған, иркен класлы, иркен коридорлы һоҡланғыс мәктәпле булдығыҙ. Унда шаярырға, йүгерергә була. Бер һүҙ менән әйткәндә, хөрмәтле уҡыусылар, һеҙ матур бүләк алдығыҙ, - тине төбәк етәксеһе, уҡыусыларға мөрәжәғәт итеп. - Мәктәп төҙөлөшө - иң изге эш. Вәғәҙәләрендә торған төҙөүселәргә рәхмәт, уларҙың тырышлығы арҡаһында быйыл мәктәп үҙ ишектәрен асты, бик мөһим һәм яҡшы эш башҡарылды.

Һуңғы йылдарҙа Дим районы әүҙем үҫә. "Көмөш шишмә", "Яркий", "Йылы йорт", "Уңайлы" биҫтәләрендә яңы йорттар төҙөлә. Был торлаҡ комплекстарына йәшәргә күсенеүселәрҙең күбәйеүе һөҙөмтәһендә районда йыл һайын мәктәп йәшендәге балалар һаны уртаса 500 кешегә арта. Ә Димдә 1992 йылдан алып яңы мәктәп төҙөлмәгән булған. Яҡын-тирәләге дөйөм белем биреү уҡыу йорттарында кластарҙың тулы булыуына һәм граждандарҙың күпләп мөрәжәғәт итеүенә бәйле, Республика Башлығы "Көмөш шишмә" биҫтәһендә заманса талаптарға тап килгән яңы мәктәп төҙөү тураһында ҡарар ҡабул итә.

**(Дауамы 4-се биттә).**

12+

✓ *Бар шулай ҙа бер сара - ул да булһа, ижад донъяң, шиғриәт. Ә бына ул һинән, ваҡытың бармы, тип һорап тормай, әйтер һүҙең эсеңә һыймай башлаһа, хатта һыйыр һауып ултырғанда ла илһам килә лә ҡуя.*



*ИҒТИБАР!*

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының иң ҡыҙыу мәле. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана.**

● **Һәр ваҡыттағыса, уҡыусыны ылыҡтырыр вәғәҙәләребеҙ етерлек.** Берҙән, күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, ниндәйҙер ауырлыҡтарға юлыҡҡанда уларҙы еңер сара, борсолоуҙар мәлендә - йән тыныслығы, күңел төшөнкөлөгө булғанда - рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле баҫма аласаҡһығыҙ ҡулдарығыҙға. Бының өсөн һеҙгә почта бүлексәһенә инеп, йә почтальонға мөрәжәғәт итеп, 50665 индекслы "Киске Өфө"гә - **554 һум 82 тингә**, 50673 индекслыһына (ойошмалар) - **584 һум 82 тингә** яҙылырға ғына ҡала. Ә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары, I һәм II группа инвалидтары беҙҙең гәзиткә **499 һум 08 тингә** генә яҙыла ала.



● Уҡыусыларыбыҙ гәзитебеҙҙе, үҙе бүләк ул, тип ҡабул итһә лә, даими рәүештә дәртләндереү, бүләкләү саралары ла тәҡдим итеп тороуыбыҙҙы беләһегеҙ. Август, сентябрҙә 2018 йылдың беренсе яртыһы өсөн гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙҙан:

Баймаҡ районы Шүлкә ауылынан Юламан Раев - **Варис Ғүмәровтың "Тыуған яҡтың шифалы үҫемлектәре"** китабына;

Белорет районы Сосновка ауылынан Фәнилә Мусина - **Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың "Әҫәрҙәр. Хеҙмәттәр"** китабына;

Стәрлетамаҡ районы Мәҡсүт ауылынан Б. Ишембаев - **Илгизәр Диҡҡәттең "Башҡорт көсө"** китабына;

Сибай ҡалаһынан Р. Йәрмөхәмәтова - **Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан"** китабына;

Учалы районы Бәләкәй Ҡаҙаҡкол ауылынан Р. Ишбулдина - **Риф Әхмәҙиевтың "Хәтер мәле"** китабына;

Өфө районынан Фәриҙә Шәрипова - **Хисмәт Юлдашевтың "Һуҡмаҡ"** китабына;

Иглин районы Иглин ауылынан Мәҙинә Мөьминова - **Тамара Ғәниеваның "Ғүмер кисеүҙәре"** китабына;

Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылынан Зәкиә Йосопова - **Әнисә Таһированың "Киске шәфәҡ йыры"** китабына лайыҡ булды.

● **Октябрҙә 2018 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән уҡыусыларыбыҙҙы шулай уҡ бүләк-китаптар көтә.** Ул китаптар араһында "Ҡөрьән-Кәрим сүрәләренә шиғри аңлатма", Т. Кусимованың "Башҡорт исемдәре", "Башҡорт халыҡ эпосы "Урал-батыр", Варис Ғүмәровтың "Тыуған яҡтың шифалы үҫемлектәре", Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың "Әҫәрҙәр. Хеҙмәттәр", Илгизәр Диҡҡәттең "Башҡорт көсө", Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан", Риф Әхмәҙиевтың "Хәтер мәле", Хисмәт Юлдашевтың "Һуҡмаҡ", Тамара Ғәниеваның "Ғүмер кисеүҙәре", Әнисә Таһированың "Киске шәфәҡ йыры" һәм башҡа китаптар бар.

**Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!**

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

● Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru. Беҙҙең электрон почта: kiskeufa@mail.ru

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Ауыл ҡатын-ҡыҙҙары бөгөн ни эштәр бөтөрә, ниндәй уйҙар һәм пландар менән яна?



**(Башы 1-се биттә).**

Ауыл ниндәй аҡсаға йәшәй һуң? Килем сығанағы ошолар - пенсия аҡсаһы, баҙар аҡсаһы, балалар аҡсаһы һәм, һуңғы сиратта - эш хаҡы, кәсеп аҡсаһы.

Ана шулай берҙе биш итеп, еткереп-арттырып йәшәргә тырыша ауылдыҡылар. Матур-матур саралар үткәрәбеҙ ағинәйҙәр ярҙамында. Ниғәмәт ауыл биләмәһенә ҡараған ауыл ағинәйҙәре бергәләп саралар ойошторабыҙ. Беҙ "Яҡшы күрше - ярты ырыҫ" тигән сара тәҡдим иттек. Йәштәр менән, мәктәп менән бәйләнештәрҙе тағы ла нығытырға ниәтләйбеҙ. Ситтән, күктән "Шулайтығыҙ, былайтығыҙ", тигәнде көтөп тормайбыҙ. Тәүәккәл, эшһөйәр ул ауыл ҡатыны. Донъяны улар тартып алып бара, донъяны улар ҡотҡарасаҡ та!

***Зөлфирә ҠАРАҒУЖИНА, Әбйәлил районы Ташбулат мәҙәниәт йорто мөдире, шағирә, БР Яҙыусылар берлеге ағзаһы:***
Йыл календарында Ауыл ҡатын-ҡыҙҙарына көн бағышлап, дөрөҫ эшләгәндәр: улар бындай иғтибарға бик тә лайыҡ. Ауыл ҡатын-ҡыҙҙарының тормошо - ысын мәғәнәһендә фиҙаҡәрлек өлгөһө ул, сөнки ауыл шарттарында үҙең өсөн йә ижад хаҡына ғына йәшәү мөмкин түгел. Аҙмы-күпме яҙышырға ынтылышы булған кешегә ауыл идиллияһы, тәбиғәт илаһилығы менән генә ләззәтләнеп йәшәү тәтемәй ҙә әле ул. Көнкүреш прозаһының ҡотолғоһоҙ теҙмәһе ыңғайына ла төшөп китәлә, тупаҫ ысынбарлыҡ күренештәре менән дә йыш осрашырға тура килә. Бер һүҙ менән әйткәндә, йәшәйешең ерлегенән юғарыраҡ булыу мөмкинлеге юҡ, тип әйтер инем. Бар шулай ҙа бер сара - ул да булһа, ижад донъяң, шиғриәт. Ә бына ул һинән, ваҡытың бармы, тип һорап тормай, әйтер һүҙең эсеңә һыймай башлаһа, хатта һыйыр һауып ултырғанда ла илһам килә лә ҡуя. Был турала үҙем яҙған шиғыр юлдары иҫкә төшә:

*Һыйыр һауам, һөт*
*айырам - бушамайым.*
*Илһам килгән - ихлас*
*эшкә ҡушалмайым.*
*Тауыҡтарым ем һалыуҙы*
*көтөп тора,*
*Сабыйҙарым тамаҡ*
*һорап өтөп бара.*
*Илһам килгән - ихлас*
*эшкә ҡушалмайым...*

Ауылда йәшәп тә, бәғзе берәүҙәр кеүек, унын мәшәҡәттәренән ҡурҡып, мал, ҡош-ҡорт көтмәһәң, оят булыр. Ауыл тормошоноң йәме лә, тәме лә ана шул мал-тыуарҙан үҙең етештергән һыйлы ризығында бит. Унан, мал тотоу кешенең көн режимын көйләй, тәртипкә өйрәтә, юғиһә, ялҡаулыҡ тигән нәмә хәҙер генә елкәгә атланырға тора. Үкенескә, ауылдарҙа хәҙер бындай "иркенлеккә" сығып, үҙҙәренсә, "рәхәт" йәшәгәндәр күбәйә бара түгелме? Ундайҙар мал аҙығы, бесән хәстәрләү ауырлығына һылтаныусан. Эйе, ялҡаулыҡ һылтауын табып ҡына тора. Бына шулай, эш араһында ғына яҙыла инде ул шиғырҙар - әлегесә, илһам уты өтөп, көйҙөрөп алып барған саҡтарҙа ғына. Теләгән мәлеңдә иркенләп, махсус ултырып яҙһаң, китап артынан китап сығарырға булыр ине. Ләкин беҙҙең өсөн, ауылда йәшәп ижад иткәндәр өсөн, шиғыр яҙыу, китап сығарыу үҙмаҡсат түгел. Ижад итеү - шәхсән үҙемдең күңел торошо ул. Ғаиләнде бағыу, балалар хәстәрҙәре, хужалыҡ мәшәҡәттәре менән бер рәттән, башҡарған вазифаң - эшеңде лә ситкә тибәреп булмай, киреһенсә, намыҫың ҡушҡанса, бөтөн күңелеңде, йөрәк ялҡынынды биреп эшләге килә. Ошо хаҡта ла һөйләп китәйем, булмаһа. Ә уларҙың осона сығырлыҡ та түгел! Ете ауылды берләштергән Ташбулат ауылы биләмәһендә ҡатын-ҡыҙҙар үҙҙәренең төп бурысы - ғаилә, шәхси хужалыҡ эштәрен лайыҡлы алып барыуҙан тыш, ауылдың дөйөм торошон, төрлө мәсьәләләрҙе хәл иткәндә төп көстө тәшкил итә. Был ҡатын-ҡыҙҙарҙың һан яғынан күплеге менән дә, ҡатын-ҡыҙҙарҙы бергә туплаған йәмәғәт ойошмаларының да (ҡатын-ҡыҙҙар советы, ағинәйҙәр ҡоро) күберәк, әүҙемерәк эшләүе менән дә аңлатылалыр. Әммә ҡатын-ҡыҙҙар алып барған төрлө йүнәлештәге эштәрҙең береһе лә ир-егеттәрҙең ҡатнашлығынан тыш үтмәй, киреһенсә, уларҙы мөмкин тиклем төрлө сараларға йәлеп итергә тырышыла, сөнки йәмғиәттә, ғаиләлә ир-аттың абруйын күтәреү зарурлығы бөгөнгө көнүҙәк мәсьәлә. Икенсе яҡтан, Аллаһы Тәғәлә беҙгә "әсәй" тигән оло вазифаны йөкмәткән, бәлки, шуға беҙ, ҡатын-ҡыҙҙар, бер нәмәгә лә битараф була алмайбыҙҙыр.

Биләмәнең үҙәге Ташбулатта һуңғы осорҙа ағинәйҙәр ҡоро әүҙемләште, сафы ла тулылана бара. Ташбулат мәҙәниәт йорто эргәһендә эшләп килгән "Гөлнәзирә" халыҡ фольклор ансамбле сафын да нигеҙҙә ағинәйҙәр тәшкил итә, Сибайҙа үткән 5-се төбәк-ара мөнәжәт һөйләүселәр конкурсында тап улар 1-се урынға лайыҡ булды. Тиҙҙән үҙебеҙҙең мәҙәниәт йортонда район ҡумыҙсылар конкурсын үткәрергә әҙерләнәбеҙ. Һүҙемде йомғаҡлап, шуны әйткем килә: әгәр ҙә үҙебеҙҙең йәшәйешебеҙгә, эргә-тирәләге ваҡ һымаҡ тойолған мәсьәләләргә лә битарафлыҡ күрһәтмәһәк, донъябыҙ ҙа теүәлерәк һәм мәғәнәлерәк булыр ине, тигән уйҙамын.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Республика көнөнә арналған тантаналы йыйылышта сығыш яһаны. Сара Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында уҙҙы. Барлыҡ Башҡортостан халҡын Республика көнө менән ҡотлап, быйылғы байрамдың Башҡортостандың Рәсәй дәүләтенә үҙ ирке менән ҡушылыуының 460 йыллығына тура килеүен дә билдәләне төбәк Башлығы.

✓Әлеге йыйылышта йыл аҙағына тиклем республикала тағы ете яңы балалар баҡсаһы төҙөләсәге тураһында ла әйтте республика Башлығы. Билдәләнеүенсә, яҡын көндәрҙә уларҙың икәүһе - Красноусол һәм Үрге Тәтешлелә төҙөлгәндәре сафҡа инәсәк. Йыл аҙағына тиклем Баймаҡ, Бүздәк, Дәүләкән, Учалы, Яңауыл райондарында төҙөлгән балалар баҡсалары файҙаланыуға тапшырыласаҡ.

✓2018 йылдан етем балаларҙы ғаиләләренә аҫрауға алғандар өсөн айлыҡ түләү 16, 3 процентҡа арттырыласаҡ. Һуңғы ваҡытта был айлыҡ түләүҙе индексациялау 2015 йылда атҡарылған булған. Әле өс йәшкә тиклемге етем баланы аҫраған өсөн бындай ғаиләләр 7750 һум, өс йәштән өлкәнерәктәр өсөн 6460 һум ала.

✓Байрам алдынан Өфөнөң Спорт һарайы алдындағы майҙанда Республика көнөнә арналған митинг-концерт булды. Уны "Берҙәм Рәсәй" партияһының төбәк бүлексәһе һәм БР Халыҡтары ассамблеяһы ойошторҙо. Сарала республика Башлығы Рөстәм Хәмитов, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев сығыш яһаны һәм халыҡты Республика көнө менән ҡотланы.

✓Башҡорт телендә дебаттар буйынса "Аҫылташ" республика чемпионатына ғаризалар ҡабул ителә башланы. Башҡорт телен яҡшы белгән һәм дебаттар алып барыу сәнғәтендә үҙҙәренең һәләтен күрһәтергә теләгәндәр саҡырыла. Дебаттар барышында ҡатнашыусылар үҙҙәрен премьер-министр, вице-премьер, оппозиция лидеры, хөкүмәт секретары һәм башҡа ролдәрҙә һынап ҡарай ала. Ҡатнашыу өсөн ике кешенән команда тупларға һәм 02mir.ru сайтында теркәлергә кәрәк. Ғаризалар 2017 йылдың 18 октябренә тиклем ҡабул ителә. Чемпионатты ойоштороусы - "Башҡортостандың Йәш гвардияһы".

МИН БАШҠОРТСА ҺӨЙЛӘШӘМ!

# ТЕЛ - ТЕРЕ ШИШМӘ, ҮЛМӘГӘН, БӨГӨНГӘ ЕТКӘН...

*Уҡ юғалыр, ҡылыс һыныр,*
*Тимер һабан тутығыр.*
*Телде тере тел һаҡлаһа,*
*Һүҙҙе сабый ҡабатлаһа,*
*Бәләнән тел ҡотолор.*
*Телдән төшкән тел юҡ булыр,*
*Телдәге тел ныҡ торор.*

***Рауил Бикбаев.***



Минең исемем Рәмил, Фамилиям Зиннәтов. Ҡарт олатайымдың исеме Зиннәт булған. Әсәйем - татар, ә атайым - башҡорт. Атайым яғынан ҡатай ырыуы балаһы булам. Минә килгәндә, һәр бала үҙенең ата-бабаларының шәжәрәһен, үҙенең ырыуын белергә тейеш. Шуның өсөн әсәйем менән атайым гел телебеҙҙе өйрәнергә өндәй. Мәктәбебеҙ урыҫ балалары өсөн булғанға, минең туған телемде әкрен генә икенсе тел баҫып бара икәнен тояп, мин уны хатта үҙем дә аңламай ҡалам, сөнки аралашыу мөхитем - урыҫса.

"Тел - тере шишмә, үлмәгән, бөгөнгә еткән", тибеҙ. Ысынлап та, башҡорт телебеҙ беҙҙең быуын балаларында ла юҡҡа сыҡмаҫҡа тейеш. Мин әле 9-сы класта уҡыйым һәм үҙ телемдә яҙма эштәрҙе тел менән һөйләүгә ҡарағанда яҡшыраҡ эшләйем, яҙам. Тик бына минән бәләкәстәр, бөгөнгө икенсе класс балалары, үҙҙәренең ҡайһы милләттән икәнлеген дә белеп бөтмәй. Был ҡыҙғаныс. Минең ҡустым үҙ ырыуын, үҙ телен, ата-бабаларҙың эшләгән эштәрен, яулаған ҡаҙаныштарын белмәһә, ни булыр? Әлеге ваҡытта уҡытыусыларыбыҙҙың беҙгә тырышыптырышып туған телемде белеүҙең мөһимлеген аңлатыуы бушҡа китмәсме? Әлбиттә, атай-әсәйем дә ата-бабаларҙан килгән телде белеүҙең мөһимлеген аңлата. Әммә системаға ҡаршы бер аҙым эшләүе лә ауыр бит. Өйҙә күп булһа 3-4 сәғәт бергә булабыҙҙыр һәм шул ваҡытта ғына үҙ телебеҙҙә аралашабыҙ. Мәктәптә көнө буйы урыҫ телендә һөйләшәбеҙ, магазинда - урыҫса, түңәрәктәрҙә - тағы ла урыҫ теле. Ҡайны саҡта ҡолаҡты ҡаплап ҡысҡырғы килә.

Туған тел беҙҙең олатайҙарҙан ҡалған иң ҡәҙерле байлыҡ, рухи мираҫ. Уны һаҡлап ҡалыр өсөн аралашыу мөхите булдырырға кәрәк, сөнки телем булмаһа, халҡым да булмаясаҡ. Нисек мин буласаҡ балаларыма "Беҙ - башҡорттар" тип әйтермен, нисек аңлатырмын?..

Әлеге ваҡытта өс: башҡорт, татар, урыҫ телдәрендә һөйләшәм. Инглиз телен дә ситнәтмәйем, уңышлы ғына өлгәшеп барам. Миңә мираҫ булып ҡалған тел бер нисек тә башҡа фәндәрҙән өлгәшергә ҡамасауламай. Киреһенсә, фекерләү даирәһе киңәйә. Мәктәптә булған бер олимпиаданан да ҡалғаным юҡ. Һәр олимпиадала ун биш уҡыусы ҡатнашты, ти, шуларҙың ни бары өс, дүрте генә урыҫ. Ә ҡалғандары бер нисә тел белгән уҡыусылар. Был беҙҙең, үҙ туған телен һәм рус телен белгәндәрҙең, рус телендә генә һөйләшеүселәрҙән өҫтөнлөгөн раҫлай бит.

Беҙҙең матур, гүзәл, йомшаҡ башҡорт телебеҙ минә шул тиклем оҡшай. Мин - башҡорт. Шуның өсөн көнелем менән үҙемдең башҡорт яугиры икәнлегемде һиҙәм. Шул тойғо минә киләсәктә лә телебеҙҙең йәшәренә өмөт бирә. Ниндәй генә ауырлыҡтар менән осрашһаҡ та, телебеҙҙе һис шикһеҙ һаҡлап ҡалырға тейешбеҙ. Мәңге йәшә, башҡорт ерем! Мәңге йәшә, башҡорт телем!

**Рәмил ЗИННӘТОВ.**
**Өфө ҡалаһы 80-се мәктәптең 9-сы синыф уҡыусыһы.**

ИЛҺӨЙӘРЛЕК

# ЗАМАНҒА ҠУЛАЙЛАШЫП...



**Тел һәм әҙәбиәт буйынса белемде бала саҡтан бирә башларға кәрәк, тип иҫәпләйем. Шуға күрә, һис шикһеҙ, беҙ Башҡортостанда һәм башҡорт халҡы йәшәгән төбәктәрҙә, Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалаларында ла, башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыу программаларын киңәйтеүгә көс һаласаҡбыҙ.**

Бик күп йылдар белем биреү аныҡ ике төргә бүлеп ҡаралды: милли телдә белем алыу һәм рус телендә белем алыу. Үкенескә күрә, рус телендә белем алыусы башҡорттар күпселекте тәшкил итте һәм уларҙа башҡорт теленә һәм әҙәбиәтенә ҡыҙыҡһыныу булманы. Шуға күрә, беҙҙең төп бурысыбыҙ - уҡыусы ниндәй милләттән булыуға ҡарамаҫтан, уға Мостай Кәрим һәм уның замандаштарының ижады менән танышырға мөмкинлек биреү. Художестволы әҙәбиәттән тыш, академик уҡыу йорттарын башҡорт халҡының тарихы, тыуған яҡты өйрәнеү буйынса кәрәкле әҙәбиәт һәм китаптар, уҡыу әсбаптары менән тәьмин итеү ҙә беҙҙең бурыс.

Ауыл балаларының башҡорт теле һәм әҙәбиәтен заманса сығанаҡтарҙан, заманса шарттарҙа уҡый алмауы ла бик хәүефле, минеңсә. Шуға ла мәғрифәтселек функцияһы аҡса бүлеүҙә генә түгел, ә балаларҙы, студенттарҙы туған телендә уҡытырға мөмкинлек биргән алдынғы технологиялар ҡулланыуҙа ла. Беҙ Мостай Кәрим һәм башҡа башҡорт яҙыусыларының, шағирҙарының ижади мираҫын заманса саралар ярҙамында популярлаштырыу маҡсатында эшләйбеҙ. Был китапханаларҙы тулыһынса цифрлаштырыу, республиканың һәр төбәгендә теләгән кеше асып ҡарай алырҙай интерактив сайттар эшләү һәм башҡорт мәҙәниәтенең тиҫтәләгән йылдар дауамында тыуҙырған рухи ҡиммәттәрен заман талаптарына яраҡлаштырыу һәм башҡалар.

**Тимербулат КӘРИМОВ,**
**Мостай Кәрим фондын ойоштороусы.**

МИН ДӘ...

# ӨРКӨТТӨМ ТЕГЕЛӘРҘЕ...



**Бергилке банктар аҡса тәкдим итеп аптыратты. Көн һайын, хатта көнөнә бер нисә тапҡыр шылтыратҡан саҡтары ла булды. Яуап бирмәһәң, смс-хәбәр яҙып та ебәрәләр.**

Күптән түгел бик матур тауышлы ҡыҙ шылтырата. Гәҙәтенсә, дежур һорауҙарын теҙә генә башлағайны, ҡапыл шып туктаны. Быға тиклем "Юҡ, һөйләшә алмайым. Минең өсөн уңайлы ваҡыт түгел. Башҡаса шылтыратмағыҙ!"- тип әйткәндән һуң да, үҙенең ятлап алған һүҙҙәрен әйтеп бөтмәйенсә туҡтамаған таушы тынып ҡалды.

Ни сәбәпле тиһегеҙме? Мин уның һорауҙарына үҙенән дә ағымлыраҡ тауыш менән башҡортса яуап бирҙем. Трубканың теге осондағы ҡыҙ гәжәпләнеүенән хатта үҙе шылтыратҡанын да онотоп: "Һеҙгә кем кәрәк? Кемгә шылтыратаһығыҙ?" - тип һорағанын һиҙмәй ҙә ҡалды. Үҙенә таныш булмаған һүҙҙәрҙе ишеткәс, ризаһыҙлыҡ белдерер, нимәлер мығырҙаны ла, телефонын бөтөнләй һүндереп ҡуйҙы.

Бынын менән генә туктамаҫ, тағы шылтыратыр тип көтөп йөрөйөм. Ысынлап та, иртәгәһенә шылтыратты был. Уның менән тағы ла башҡортса һөйләштем. Шунан бирле был банк бәләкәй процент менән кредит тәкдим итмәй башланы...

Теңкәгә тейгән банктарҙан ҡотолоуҙың был алымы бик оҡшап ҡалды. Тағы шылтыратмаҫтар инде, тип көтөп йөрөйөм. Көтөүем бушҡа булманы, яңыраҡ икенсе банктан тағы шундай шылтыратыу алдым. "Беҙҙең банк һеҙгә бәләкәй процент менән..." - тип, апайым һымаҡ иркә тауыш менән өндәшеүе генә булды, мин тағы ла туған телемдә: "Әлегә кредитҡа мохтажлығым юҡ, мине ҡайғыртыуығыҙ, хәстәрләүегеҙ өсөн ҙур рәхмәт", - тигәйнем, яңы ғына әкиәттәрҙәге фәрештә тауышы менән һөйләшкән әңгәмәсем тупаҫ тауыш менән: "Нимә танау аҫтығыҙҙан бығырҙайһығыҙ, нормаль телдә һөйләшә алмайһығыҙмы?" - тип ысҡындырмаһынмы! Мин иһә башҡорт теле донъялағы иң матур, бөйөк телдәрҙең береһе булыуын, ул минең ҡиммәтле байлығым һәм хазинам икәнлеген әйттем. Бигерәк түҙемһеҙ булып сыҡты был хеҙмәткәр ҙә. Минең әйтеп бөткәндә лә көтмәй, трубканы ташланы. Шунан алып был учреждениенан да шылтыратыу алғаным юҡ әле.

Һеҙҙә лә ошоға оҡшаш шылтыратыуҙар йонсотоуы ихтимал. Үҙ телегеҙҙә яуап бирел ҡарағыҙ, бәлки, һеҙгә лә ярҙам итер. Туған телебеҙҙең ҡулланыу даирәһен киңәйтеүҙең бер ысулы бит был...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Балаҡатай районы эшҡыуары етештергән "Балаҡатай" газлы һыуы Силәбелә "АГРО-2017" агросәнәғәт күргәҙмәһендә алтын миҙал яуланы. Республика етештереүсеһенең лимонады ла күргәҙмәнең призеры исемен алды. Татлы эсемлек көмөш миҙалға лайыҡ булды, тип хәбәр итә республиканың Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитеты.

✓Башҡортостанда көнбағыш йыйыуға төштөләр. Төбәк Ауыл хужалығы министрлығының мәғлүмәттәре буйынса, әлеге ваҡытта көнбағыш 28 мең гектарҙан ашыу майҙанда йыйылған, ул пландың 12 процентын тәшкил итә. Иң юғары уңыш - гектарынан 18 центнер - Стәрлетамаҡ районы баҫыуҙарында билдәләнә. Бөтәһенән дә күберәк уңышты - һәр ҡайһыһы бишәр мең тонна самаһы - Әлшәй һәм Көйөргәҙе районы ауыл хужалығы предприятиелары йыйған.

✓Дәүләт Думаһында йорт хайуандарын тыләүле теркәү тураһындағы закон проекты тикшереүгә әҙерләнә. Әлегә хайуанды теркәүҙең күпмегә төшөүе һәм уға мотлаҡ рәүештә электрон чип ҡуйылыуы билдәһеҙ. Халыҡ һайланыусыларының фекеренсә, бындай саралар йорт хайуандарын тотҡандарға, ҡарауға алғандарға ҡарата ҡаты булмаҫҡа ярҙам итәсәк. Шул уҡ ваҡытта, йән эйәләренең хужалары тәрбиәләнеүселәренең ҡылыҡтары өсөн яуаплылыҡтан ҡаса алмаясаҡ, мәҫәлән: эт ташланғанда.

✓Башҡортостанда ике театр төбәк театр коллективтарының ижади проекттарына ярҙам итеү өсөн республика Башлығы грантын аласаҡ. Һәр гранттың күләме 1,8 миллион һум тәшкил итә. Конкурста республиканың дәүләт йә иһә шәхси ижади коллективтары ҡатнаша ала. Конкурсҡа ҡатнашыуға ғаризалар 2017 йылдың 10-18 октябрендә Мәҙәниәт министрлығының профессиональ сәнғәт, мәғариф һәм ижади проекттар бүлегендә иртәнге сәғәт 10-дан киске 5-кә тиклем ҡабул ителә.

✓Төбәктең Ауыл хужалығы министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, аграрийҙар 3,7 миллион тоннанан ашыу иген йыйып алған. Гектарынан уртаса уңыш 21,8 центнер тәшкил итә. Быйыл уңыш буйынса Саҡмағош районы беренсе урында - һәр гектарҙан 39,8 центнер ашлыҡ. Стәрлетамаҡ районы ашлыҡ һуғыу буйынса иң яҡшыһы тип танылған, унда аграрийҙар 219 мең тонна иген йыйған. Әле республикала иген һәм ҡуҙаҡлы культуралар майҙандарҙың 98 процентында сабылған һәм һуғылған.

**"Башинформ"дан.**

**✓ Король Салман Бен Әбдел Әзиз Әл Сәғүд белдереүенсә, ул Рәсәйҙе хеҙмәттәшлек өсөн төп илдәрҙең береһе тип иҫәпләй һәм мосолман республикалары етәкселеге менән осрашыуға ҙур әһәмиәт бирә.**



ҺӨЙӨНСӨ!



# ИЗГЕ ЭШ ЭШЛӘНДЕ!

**(Башы 1-се биттә).**

Дүрт ҡатлы лицей бинаһы 2016 йылда төҙөлә башлай. Дөйөм майҙаны - 20 мең квадрат метр. Бинала лифттар, бассейн, ике ҙур спорт залы һәм 504 урынлыҡ тамашалар залы бар. Башланғыс синыфтар кластары айырым блокта урынлашҡан. Мәктәп ихатаһында футбол, волейбол, баскетбол майҙандары булған стадиондар урынлашҡан. Лицей директоры Гөлнара Ғимаҙетдинова әйтеүенсә, 5-се синыфтан уҡытыу профилле алып барыласаҡ. Бында төрлө йүнәлештәге: химия-биология, лингвистика, инженер һәм кадет кластары булдырылған. Уҡытыу мәктәп программаһының вариатив өлөшө һәм дәрестән һуң эшмәкәрлек иҫәбенә предметтарҙы тәрәндән өйрәнеүҙе күҙаллай.

Республика Башлығы кластарҙы, уйын һәм интерактив кабинеттарҙы, уҡыу фильмдарын ҡарау өсөн 3D-кино залын, түңәрәктәр өсөн кабинеттарҙы, спорт залын, бассейнды, хеҙмәт бүлмәһен һәм ашхананы ҡараны. Директор әйтеүенсә, мебель һәм ҡорамалдар һайлағанда сәләмәтлекте һаҡлаусы технологиялар ҡулланыу иҫәпкә алына. Күпселек кластар интерактив гаджеттар һәм ҡорамалдар менән йыһазландырылған.

Рөстәм Хәмитов уҡыусылар һәм педагогтар менән әңгәмәләште, уҡыу программалары үҙенсәлектәре, дәрестән һуңғы эшмәкәрлек менән ҡыҙыҡһынды, Дим районын артабан үҫтереү һәм территорияны төҙөкләндереү мәсьәләләре буйынса фекер алышты.

- Дим районы ҙурая. Территорияла ниндәй матур, яҡшы йорттар үҫеүенә шаһитбыҙ. Беҙгә төҙөкләндереү буйынса тағы ла күп эшләргә кәрәк. Балалар майҙансыҡтары, машиналар өсөн туҡталҡалар, магазиндар, ял итеү урындары етешмәй. Бөтә был эште, әлбиттә, эшләргә кәрәк, - тине Рөстәм Хәмитов. - Был Республика көнө алдынан асылған матур лицейҙа 1200 бала белем аласаҡ, шуларҙың 700-ө - башланғыс синыфтар. Беҙҙә йәштәр күп, балалар үҫә һәм был бик ҡыуаныслы.

Мәғариф өлкәһендәге артабанғы пландары менән бүлешеп, Рөстәм Хәмитов алдағы ике-өс йылда яңы биҫтәләрҙә 10-15 мәктәп төҙөү, ә 2025 йылға баш ҡаланың барлыҡ мәктәптәрен бер сменала уҡытыуға күсереү, киләсәктә һәләтле балалар менән эшләүҙе камиллаштырыу, тотош белем биреү процесын модернизациялау кәрәклеген билдәләне.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## БӘЙЛӘНЕШТӘР ЯҢЫРА



**Мәскәүҙә Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Хәмитов менән Сәғүд Ғәрәбстаны Короле Салман Бен Әбдел Әзиз Әл Сәғүдтең осрашыуы үтте.**

Төбәк етәксеһененең матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, яҡтар ике яҡлы мөнәсәбәттәрҙе нығытыу, сауҙа-иҡтисади һәм мәҙәни хеҙмәттәшлекте үҫтереү мәсьәләләрен, шулай уҡ төбәк-ара бәйләнештәрҙе нығытыу перспективаларын тикшерҙе. Король Салман Бен Әбдел Әзиз Әл Сәғүд белдереүенсә, ул Рәсәйҙе хеҙмәттәшлек өсөн төп илдәрҙең береһе тип иҫәпләй һәм үҙенең дәүләт сәфәре сиктәрендә мосолман республикалары етәкселеге менән осрашыуға ҙур әһәмиәт бирә. Сәғүд Ғәрәбстаны Короле исламды һөйөүҙе һәм дәүләт-ара хеҙмәттәшлекте үҫтереү кәрәклеген айырым билдәләне. Уның һүҙҙәренсә, ислам флагы аҫтында терроризм идеологияһына тәүбәгә килтереүселәргә ҡаршы бергәләп көрәшеү - бөтә донъя мосолмандарының бурысы. Рәсәй Федерацияһы Президенты Владимир Путиндың мосолмандар тормошонда туранан-тура ҡатнашыуы, уларҙы дини байрамдары менән ҡотлауы Королдә ҙур ихтирам уята. Сөнки Сәғүд Ғәрәбстаны ислам диненең тыуған урыны, Короллек хаж һәм умра ҡылыу өсөн мосолмандарҙы бөтә кәрәкле шарттар менән тәьмин итергә тырыша. Быйыл рәсәйҙәр өсөн хажға квоталар һаны 23,5 мең кешегә тиклем арттырылды.

## КЕМДӘР ЛАУРЕАТ?



**Башҡортостан Хөкүмәтендә Премьер-министр Рөстәм Мәрҙәнов 2017 йылға журналистика өлкәһендә Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге республика Хөкүмәте премияһы лауреаттарын бүләкләне.**

Конкурсҡа тәҡдим ителгән 11 дәғүәсенән һәм ике ижади коллективтан комиссия өсәүҙе һайлап алды. Башҡорт дәүләт университетының журналистика кафедраһы профессоры Фәнил Күзбәков республика гәзит һәм журналдарында баҫылған башҡорт журналистикаһына, туған тел яҙмышына, тәбиғәт ҡомартҡыларын, матди һәм рухи байлыҡты һаҡлауға, йәш быуынды тәрбиәләүгә арналған мәҡәләләре өсөн премия менән бүләкләнде. "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы күҙәтеүсеһе Ләйлә Ишморатова (Аралбаева) республика мәҙәниәте, сәнғәте һәм Башҡортостандан ситтә йәшәгән яҡташтарыбыҙ тураһында мәҡәләләр серияһы өсөн премияға лайыҡ булды. Өсөнсө лауреат "Стерлитамакский рабочий" гәзите хәбәрсеһе Марина Воронова. Уға премия замандаштар образын тыуҙырғаны, уларҙың ыңғай ҡылыҡтары һәм эштәре тураһында гәзиттә баҫылған мәҡәләләре өсөн бирелде.

## МАЛДАРҘЫ ҺАҠЛАЙЫҠ!




**Туймазы районында бешмә вирусын асыҡлау менән бәйле Башҡортостан власы меңгә яҡын хайуанды юҡҡа сығарырға бойороҡ биргән. Хәҙер инфекция сығанағынан 40 саҡрымғаса вакцинация бара.**

Малдарҙың бешмә вирусы ауырыуы арҡаһында Туймазы районында ғәҙәттән тыш хәл режимы индерелде, карантин иғлан ителде. Ауырыу сығанаҡтары "Нур" крәҫтиән-фермер хужалығы биләмәһендә, шулай уҡ Йәрмөхәмәт һәм Үрмәкәй ауылдарында асыҡланды. Районда вирустың таралыуын туҡтатыу саралары үткәрелде. Башҡортостан власы вирус эҙемтәләрен бөтөрөүгә кәмендә 35-40 миллион һум йүнәлтәсәк, тип хәбәр итте төбәк Башлығы Рөстәм Хәмитов, төбәктә ауырыуҙың 40 йыл эсендә тәүге теркәләүен билдәләп. "928 баш малды, шул иҫәптән 486 баш эре мөгөҙлө малды юҡҡа сығарыу бурысы тора, - тине оператив кәңәшмәлә БР Хөкүмәте рәйесе Рөстәм Мәрҙәнов. - Бер үк ваҡытта малдарға мониторинг-клиник тикшереү уҙғарыла, 3422 проба һайланған, улар тикшереү өсөн Владимирға оҙатылған". Уның һүҙҙәренсә, хәҙер вакцинация ауырыу сығанағынан 40 саҡрым самаһы ерҙә: Бәләбәй, Бүздәк, Шаран һәм Туймазы райондарында алып барыла. Туймазы районы хакимиәте малдары алынған һәм юҡҡа сығарылған граждандарға ихатаға биш мең һум күләмендә матди ярҙам түләй башлаған. Бөгөнгә 16 ғаилә түләү алған, тип асыҡланы вице-премьер.

Төбәк Ветеринария идаралығы бешмә ауырыуы тураһында белешмә мәғлүмәтен алыу һәм граждандарға билдәләнгән ауырыу сығанағын бөтөрөү барышы хаҡында мәғлүмәт биреү өсөн ҡыҙыу линия асты. 8 (347) 218-10-18 телефоны буйынса шылтыратырға мөмкин.

## ӘРМЕГӘ САҠЫРАЛАР...




**Көҙгө саҡырылыш барышында Башҡортостандан 5,3 мең егетте хәрби хеҙмәткә оҙатыу ҡаралған. Яҙғы саҡырылыш кампанияһында Рәсәйҙең Ҡоралды Көстәренә һәм Милли гвардия ғәскәрҙәре федераль хеҙмәтенә республикабыҙҙан 5,1 меңдән ашыу кеше алынғайны.**

Башҡортостан хәрби комиссариатының граждандарҙы хәрби хеҙмәткә әҙерләү һәм саҡырыу бүлеге етәксеһе Риф Вәлиев мэрияла үткән оператив кәңәшмәлә ошо хаҡта хәбәр итте. Рәсәй Федерацияһы Президенты Владимир Путиндың указына ярашлы, быйыл көҙ илдә 134 мең егет Ҡоралды Көстәр сафына оҙатыла.

Хәрби хеҙмәткә саҡырыу датаһы элеккесә ҡалған: 1 октябрҙән 31 декабргә тиклем. Хеҙмәт итеү ваҡыты ла үҙгәрмәгән - быйыл армияға алыныусылар 12 ай хеҙмәт итергә тейеш. Быйыл Рәсәй Президенты Владимир Путин армияла хеҙмәт итмәгән граждандарҙы дәүләт органдарына эшкә алыуҙы тыйған федераль законға ҡул ҡуйҙы. Хәҙер бер ниндәй сәбәпһеҙ армия хеҙмәтенән ҡасып йөрөгәндәрҙе махсус комиссия уның статусын раҫлаған һығымтаһынан һуң 10 йыл үткәс кенә дәүләт органдарына эшкә ҡабул итеүҙәре мөмкин.

## ИСЛАМ ҠИММӘТТӘРЕ ТУРАҺЫНДА



**Быйыл "XXI быуаттың мәғариф киңлегендә ислам идеалдары һәм ҡиммәттәре" халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференцияһы 19 октябрҙә Өфөлә бына инде 10-сы тапҡыр уҙа.**

Конференцияла ҡатнашыу өсөн яҡын һәм алыҫ сит илдәрҙән: Ҡырғыҙстандан, Үзбәкстандан, Төркмәнстандан, Тажикстандан, Египеттан, Иорданиянан, Марокконан, Тунистан, Төркиәнән билдәле ғалимдар - дин белгестәре, мәҙәниәтселәр, философтар, социологтар, политологтар, тарихсылар, шулай уҡ ислам руханиҙары делегациялары килергә әҙерләнә. Башҡорт дәүләт педагогия университетының матбуғат хеҙмәтендә хәбәр итеүҙәренсә, ғилми форум ислам тарихын һәм мәҙәниәтен яҡшы белгән белгестәр әҙерләү федераль проектын ғәмәлгә ашырыу сиктәрендә уҙғарыла. Ислам мәғарифы, тарихы һәм мәҙәниәте, дини ҡиммәттәрҙе тергеҙеү, йәштәргә тәрбиә биреү һәм экстремизмды иҫкәртеү кеүек көнүҙәк һорауҙар фекер алышыу темалары буласаҡ.

Быйылғы конференция программаһында пленар ултырыштар, панель сессиялар, оҫталыҡ дәрестәре һәм түңәрәк өҫтәлдәр ҡаралған, улар Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай майҙансыҡтарында үтәсәк.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Грозныйҙа башҡорт боксеры Артур Собханғолов 60 килограмға тиклемге ауырлыҡ категорияһында Рәсәй чемпионатында көмөш миҙал яуланы. Турнирҙа илдең 53 төбәгенән 290 спортсы ҡатнашты, тип хәбәр ителә Башҡортостандың Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы сайтында.

✓16-18 ноябрҙә Коми Республикаһының Сыктывкар ҡалаһында Башҡорт мәҙәниәте көндәре уҙғарыла. Сыктывкар ҡалаһында башҡорттарҙың милли-мәҙәни автономияһының урындағы йәмәғәт ойошмаһы быйыл булдырылған, 2017 йылдың 17 майында теркәлгән. Автономия ағзалары "Дуҫтарса мөнәсәбәттәр төбәге" республика конкурсында ҡатнашып, "Сыктывкарҙа башҡорт мәҙәниәте көндәре" коммерцияға ҡарамаған проектын тормошҡа ашырыу өсөн 70 мең һумлыҡ грант отҡан.

✓Өфөлә хайуандар өсөн тәбиғи йәшәү мөхите булған зоопарк төҙөләсәк. 21 сентябрҙә "Ағиҙел" зоология баҡсаһы" дәүләт автономлы учреждениеһы булдырылды. Был - төрлө йәнлектәр өсөн тәбиғи йәшәү мөхите булған яңы типтағы зоопарк, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығының матбуғат хеҙмәтенән. Уны ойоштороуға миллионлы ҡалала ғаилә, балалар менән бергәләп ял итеү өсөн заманса зоопарктың юҡлығы тураһында мәсьәләне күтәреп сыҡҡан өфөләрҙең мөрәжәғәте сәбәпсе булды.

✓VII "Иҙел" халыҡ-ара башҡорт һәм татар йыры фестиваленә ғаризалар ҡабул ителә башланы. Фестиваль 17 һәм 18 ноябрҙә Өфөлә, "Башҡортостан" дәүләт концерт залында уҙа. Конкурста музыка мәктәптәрен, юғары һәм махсус уҡыу йорттарын тамамлаусылар, студенттар ҡатнаша ала. Балалар номинацияларында 7-16 йәшлектәр (музыкаль белем мөһим түгел), өлкәндәрҙекендә иһә 35 йәшкә тиклемгеләр сығыш яһай. Ғаризалар 7 ноябргә тиклем ҡабул ителә.

✓14, 15 октябрҙә Өфөлә ауыл хужалығы йәрминкәләре үтә. Сифатлы аҙыҡ-түлекте баш ҡаланың бөтөн райондарында ла һатып алырға мөмкин буласаҡ. 14 декабрҙә Дим районы Дағстан урамы, 2 адресы буйынса урынлашҡан "Магнит" гипермаркеты алдындағы, Ленин районында Солтанов урамы, 2-се йорт эргәһендәге, Октябрь районында Спорт һарайы һәм Рыльский урамындағы аллеялағы, Совет районында Йәштәр һарайы алдындағы майҙандарҙа, Калинин, Киров, Орджоникидзе райондарында ике көндә лә йәрминкә ойоштоРола.

*БЕЛЕМ УСАҒЫ*

# ТӘРБИӘСЕЛӘР ӘҘЕРЛӘНӘ



**"Кешелек өсөн иң мөһим нәмә ниҙән ғибәрәт?" тип һораһалар, моғайын, киләсәк быуынға ошоғаса билдәле мәғлүмәтте, белемде һәм аҡылды тапшырып ҡалдырыу, тип яуап бирергә булыр ине. Ысынлап та, борондан килгән гәҙәт буйынса, һәр быуын кешеһе балаларына үҙе белгәнде өйрәтергә, оҫталығын тапшырып ҡалдырырға ашыға. Элек аҡһаҡалдар, оло аҡыл эйәләре үҙенә уҡыусыларҙы һайлап ҡына алһа, бөгөн һәр балаға уның һәләттәренә, теләктәренә ҡарап кәрәкле белем алыу, оҫталығын арттырыу мөмкинлеге асылған. Республикабыҙҙа бындай мөмкинлекте теүәл 50 йыл йәш педагогтар әҙерләүсе М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты бирә. Юғары уҡыу йортоноң юбилейы айҡанлы уның ректоры, профессор, Салауат Юлаев ордены кавалеры Рәил ӘСӘҘУЛЛИНға бер нисә һорау менән мөрәжәғәт иттек.**

➔ **Рәил Мирвай улы, буласаҡ педагогтар әҙерләүсе юғары уҡыу йорто етәксеһе булараҡ, һеҙ үҙегеҙгә ниндәй төп маҡсаттар ҡуяһығыҙ? Бер маҡсатығыҙҙы беләбеҙ - һәр саҡ беренсе булыу.**

- Эйе, беҙ, ысынлап та, заман талап иткәнде беренселәрҙән булып атҡарыусылар иҫәбендә булырға ынтылабыҙ. Мәҫәлән, республикала вуздар араһында беренсе булып компетенциялар үҙәге астыҡ, улар хәҙер буласаҡ уҡытыусыларҙы һөнәри үсешкә илткән үҙәккә әйләнде. Шулай уҡ беренсе булып студенттар һәм аспиранттарҙың балалары өсөн балалар баҡсаһы астыҡ. Тағы ла беҙҙә Ғаилә һәм баласаҡ институты ойошторолдо, ул ошо өлкәлә эшләгән бөтә кафедраларҙы һәм социаль структураларҙағы мәғариф системаһын берләштерә. Башҡортостанда тәүгеләрҙән булып дистанцион белем биреү проектын бойомға ашыра башланыҡ, студенттар бөтә лекцияларҙы онлайн тыңлай ала. Әлегә был мөмкинлек беренсе курс студенттарына тәҡдим ителә, йыл һайын проекты камиллаштыра барасаҡбыҙ. Юғары уҡыу йортоноң юбилейына арнап, Шишмә районында "Сәлих" социаль-белем биреү үҙәген төҙөнөк. Уның эше лә республиканың киләсәге өсөн бик мөһим. Беҙҙең бик күп проекттар мәктәптә белем биреү сифатын яҡшыртыуға бәйле. Сөнки беҙ ауыл мәктәптәрендә балалар һаны аҙ булыуы сәбәпле күп уҡытыусыларҙың икенсе предметты уҡыта башлауын, бер нисә предметты бер юлы уҡытыуын беләбеҙ. Шуға Башҡортостандың алдынғы уҡытыусылары биргән дәрестәрҙе уҡыусылар онлайн режимда ҡарай алған уникаль структура эшләнек, ә педагогтарға үҙара фекер, тәжрибә уртаҡлашырға мөмкинлек биргән мәғариф порталы бар. Күптән түгел РФ Мәғариф һәм фән министры Ольга Васильева илдең мәғариф учреждениелары медиатекаһы тураһында телгә алғайны, был йәһәттән дә беҙ эшләйбеҙ һәм М. Аҡмулла исемендәге БДПУ медиатекаһында ла бик күп мәғлүмәт һаҡлана.

➔ **Күптәр үҫеш юҡлығын проекттарҙы тормошҡа ашырыу өсөн финанс йәһәтенән сығымдар талап ителеүенә бәйләй. Һеҙ был мәсьәләне нисек хәл итәһегеҙ?**

- Ысынлап та, юғары уҡыу йортоноң һәр факультетында, һәр уҡытыу йүнәлеше буйынса махсус кабинеттар асыу, заманса техника менән тәьмин итеү, инклюзив белем биреү йүнәлешендә атҡарылған эштәр, булдырылған уңайлыҡтар барыһы ла ҙур сығымдар талап итә. Шулай ҙа беҙ информацион технологиялар индереү буйынса Мәскәү дәүләт университеты, Бауман исемендәге МДТУ кеүек юғары уҡыу йорттарын үтеп, өсөнсө урында киләбеҙ. Уҡытыусылар әҙерләүсе вузды был кимәлгә күтәреүе, әлбиттә, еңел түгел. Ә шулай ҙа беҙҙең махсус йыһазландырылған кабинеттарҙа буласаҡ уҡытыусы һөнәри оҫталығын арттыра алһын өсөн барыһы ла эшләнгән. Хатта синыфта шаулаған балалар тауышы, митингыға сыҡҡан халыҡ тауышы, ҙур аудиторияла йыйылған кешеләр тауышы яҙылған аудио-яҙмаларҙы ҡуйып та дәрес үткәреп ҡарарға була. Уҡытыусы төрлө ситуацияла, төрлө аудитория менән эшләй белергә, һәр кемдең һүҙен ишеттерергә тейеш. Шуға ла студенттарға беҙ төрлө йәштәге балалар, мөмкинлектәре сикләнгән балалар, һәләтле балалар менән дә эшләп ҡарау мөмкинлектәре тыуҙырғанбыҙ. Фән менән ҡыҙыҡһынған йәштәр "Уҡытыусы-тикшеренеүсе" программаһы буйынса эшләй ала. М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның бөтә яңы проекттары ла бында эшләгән педагогтарҙың, студенттарҙың республика, Рәсәй һәм халыҡ-ара Грант программаларынан алған аҡсаһына, беҙҙең яңы башланғыстарҙы хупларға әҙер торған бағыусылар ярҙамында тормошҡа ашырыла. Бына шул уҡ балалар баҡсаһын асыу өсөн дә уҡытыусы Грант алды һәм "Транснефть" бағымсы булараҡ ярҙам күрһәтте. Һөҙөмтәлә, дуаль белем биреү идеяһын үҙенсәлекле рәүештә бойомға ашырған проект килеп сыҡты.

➔ **М. Аҡмулла исемендәге БДПУ бөтә факультеттарҙа ла башҡорт телен уҡытыуҙы ойошторған берҙән-бер вуз. Башҡорт телен һәм Рәсәй халыҡтарының туған телдәрен уҡытыуға ҡағылышлы һуңғы ваҡиғаларға һеҙҙең ҡараш нисек?**

- Республика август кәңәшмәһендә мәктәптә башҡорт телен уҡытыуға ҡағылышлы һорауҙарҙы хәл итеү юлдары асыҡ күрһәтелде. Ысынлап та, Рәсәй Федерацияһы Законы, Федераль белем биреү стандарттары бар һәм беҙ уларҙы иғтибарһыҙ ҡалдыра алмайбыҙ. Әммә был туған телдәрҙе, әҙәбиәтте, мәҙәниәтте өйрәнеүҙә традицион ысулдарҙы ғына ҡулланыу кәрәклеген аңлатмай. Бөгөн яңы стандарттар бойомға ашырылған саҡта килеп тыуған ауырлыҡтарҙы хәл итеү өсөн яңы юлдар эҙләргә тейешбеҙ. Әлеге ваҡытта килеп тыуған ситуация ҡуйбергән 5-7-се синыфтарҙа туған телдәрҙе уҡытыуға ҡағыла, унда ата-әсәләр һүҙе һәм теләге хәл иткес роль уйнай. Шуға башҡорт телен өйрәнеү мөмкинлектәрен тағы ла киңәйтергә булышлыҡ иткән саралар күрелергә тейеш. М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның башҡорт филологияһы факультеты коллективы был юҫыҡта әүҙем эшләй. Мәҫәлән, быйылғы уҡыу йылында Башҡорт телен дистанцион өйрәнеү халыҡ-ара системаһын ғәмәлгә индерҙек. Унда башҡорт телен башлап өйрәнергә теләгән кешеләр өсөн дә, белемдәрен һәм телмәрен камиллаштырырға уйлағандарға ла мәғлүмәтле материалдар бар. Бынан тыш, яңы талаптарға ярашлы лингвомәҙәниәт нигеҙенә ҡоролған беҙҙең вуз уҡытыусылары тарафынан эшләнгән дәреслектәр теҙмәһе басылып сыҡты. Киләсәктә лә башҡорт телен өйрәнергә, ошо телдә уҡырға теләүселәр һанын арттырыуға йүнәлтелгән һәм уларға сифатлы белем биреүҙе маҡсат иткән проекттар эшләйәсәкбеҙ. Сөнки йәш быуын туған телен белеп үҫергә тейеш.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

*ҠЫҪҠАСА*

## ЯҢЫ ЙЫЛДЫҢ ЯЛЫ

✔ **Хеҙмәт министрлығы әҙерләгән һәм хөкүмәт тарафынан хуплау тапҡан документҡа ярашлы,** 2018 йылда яңы йыл каникулдарында рәсәйҙәр ун көн - 30 декабрҙән 8 ғинуарға тиклем ял итәсәк, ә май айының тәүге аҙнаһында ике көн генә эшләйәсәк, кесе йома һәм йома - 3 һәм 4 май. 2018 йылдың 6 ғинуарындағы байрам көнө - 9 мартҡа, ә 7 ғинуар - 2 майға күсерелә. 28 апрелгә тура килгән ял көнө - дүшәмбегә, 30 апрелгә, күсерелә: был осраҡта шәмбе эш көнө була. 9 май (шаршамбы) шулай уҡ эшләмәгән көн булып ҡала. Рәсәйҙәрҙең шулай уҡ ҙур булмаған өс көнлөк каникулдары 23-25 февралдә, 10-12 июндә һәм 3-5 ноябрҙә була. Бынан тыш, рәсәйҙәрҙе дүрт көнлөк ял март айында көтә - 8-11 март.

✔ **Волга-Каспий балыҡ хужалығы бассейны өсөн балыҡсылыҡ ҡағыҙәләренә ярашлы, төбәк биләмәһендә уҡбалыҡ тотоу тыйылмай ине.** Ә был балыҡ республиканың Ҡыҙыл китабына индерелгән. Ошо төрҙәң һаҡланып ҡалыуын тәьмин итеү маҡсатында Башҡортостан прокуратураһы мәсьәләне Рәсәй балыҡсылығының Урта Волга территориаль идаралығында тикшереүгә ирешә. Һөҙөмтәлә ағымдағы йылдың июль айында Рәсәй Ауыл хужалығы министрлығы уҡбалыҡты Башҡортостан биләмәһендә тотоу өсөн тыйылған һыу биоресурстары исемлегенә индерҙе. Бынан тыш, республиканың һыу ятҡылыҡтарында рус бикреһе, бағыр, бәрҙе балыҡтарын тотоу рөхсәт ителмәй. Уларҙы законһыҙ рәүештә тотҡан өсөн административ һәм енәйәт яуаплылығы ҡаралған, тип иҫкәрттеләр республика прокуратураһында.

✔ **Һаулыҡ һаҡлау министрлығында балаларын вакцинациялауҙан баш тартҡан ата-әсәләргә "тәьҫир итеү" сараһын, йәғни уларға эшкә ярамһыҙлыҡ ҡағыҙҙарын "түләү"ҙе үҙгәртеү мөмкинлеген ҡарайҙар.** Һаулыҡ һаҡлау министры Вероника Скворцова фекеренсә, бындай сара ата-әсәләрҙең прививканан баш тартыуы баланың сирләүенә килтергән осраҡта ғәмәлдә булырға тейеш. "Әйтәйек, бала һеҙҙең ғәйебегеҙ буйынса ауырып китһә, һеҙ уны вакцинациялауҙан баш тартҡанһығыҙ икән, һеҙгә эшкә ярамһыҙлыҡ ҡағыҙы башҡаларға ҡарағанда икенсерәк түләнәсәк,- тип билдәләй Вероника Скворцова. - Беҙ вакциналарҙың сифатын бик ныҡ тикшерәбеҙ, шул рәүешле тотош быуындың иммунитетын үҙгәртәбеҙ, ә вакцинация менән бәйле ниндәйҙер "кире тәьҫирҙәр" бик һирәк осрай..."

✔ **"Рәсәй Ҡоштарҙы һаҡлау союзы" дөйөм Рәсәй йәмәғәт ойошмаһы Рус география йәмғиәтенең төбәк бүлексәһе йәйге-көҙгө миҙгелдәге "Башҡортостан ҡоштары" VII республика балалар интернет-конкурсын уҙғарыу тураһында иғлан итте.** Конкурста дөйөм белем биреү мәктәбе, мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы һәм өҫтәмә белем биреү ойошмаһы уҡыусылары ҡатнаша ала. Номинацияларҙа ҡатнашыу өсөн ҡош фотоһын, оя ҡорған, йылы яҡҡа осоусы ҡоштарҙың һүрәтен еберергә, шулай уҡ Башҡортостанда оя ҡорған һәм бынан йылы яҡҡа осоусы ҡоштарҙың төрҙәре тураһындағы һорауҙарға яуап бирергә кәрәк. Тулыраҡ мәғлүмәт конкурс сайтында урынлашҡан. Конкурс һорауҙарына бөтә яуаптарҙы "Башҡортостан ҡоштары" сайтында табырға мөмкин. Конкурсҡа эштәр 1-7 октябрҙә ҡабул ителә, 1 ноябрҙә һөҙөмтәләр иғлан ителә.

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Баллы һыу

❖ Ашҡаҙандың лайлалы тиресәһе шешеүе (гастрит) бер нисә төрлө була. Әгәр ҙә ашҡаҙан һутының юғары әселеге һөҙөмтәһендә гастрит барлыҡҡа килһә, ашарҙан 20-30 минут алда 1 ҡалаҡ бал һалынған йылы һыу эсергә. Ашҡаҙан һутының әселеге түбәнәйгән булһа, ашарҙан 1 сәғәт алда һыуытылған баллы һыу эсегеҙ.

### Вегетатив-ҡан тамырҙары дистонияһы

❖ Был ваҡытта дегәнәк япрағы һәм тамырҙары төнәтмәһе өҫтәлгән ванналар ярҙам итә. Ваннаны йәйге миҙгелдә көн һайын 15-20 минут инергә.

### Быуын ревматизмы

❖ 2 ҡалаҡ ваҡланған ерек ҡайырыһына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәттән һөҙөргә һәм көнөнә 2-3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә.

### Герпес

❖ Һәр 2 сәғәт һайын аҡ шыршы майы һөртөргә. Шеш сығып килгәндә үк ошолай дауалай башлаһағыҙ, яҡшыраҡ.

### Һарыһыу ауырыуы

❖ 800 грамм петрушканы йыуып, турап, эмаль кәстрүлгә һалырға һәм 1 литр һөт ҡойорға. Талғын утта яртыһы ҡайнап бөткәнсе тоторға, һөҙөргә һәм һәр сәғәт һайын 1-2-шәр ҡалаҡ эсергә. Яңап алған төнәтмәне ошо рәүешле көн дауамында эсеп бөтөргә. Көн һайын яңынан әҙерләргә.

### Әҫпе

❖ Ҡара ҡарағат япраҡтарын йыуып, бер ус япраҡҡа ярты литр һыу өҫтәп, 1-3 минут ҡайнатырға. Төнәтмәне бер аҙ эсергә, шулай уҡ мамыҡты сылатып, әҫпеле урындарға һөртөргә.

### Баш ауыртыуынан...

❖ Дегәнәк япрағын эҫе һыу менән бешекләп, башҡа һалып, яулыҡ ябынһағыҙ, 15-20 минуттан баш ауыртыуы бөтөр. Дегәнәк япрағы өҫтөнән целлофан ябырға ла була.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *Алла тарафынан Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең үҙенә лә, бөтөн мосолмандарға ла көнөнә биш тапҡыр намаҙ башҡарырға бойорола. Бынан һуң Мөхәммәт бәйғәмбәр яңынан ергә төшә, ә Бураҡ уны тиҙ арала Мәккәгә ҡайтарып ҡуя...*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Алла янына сәйәхәт

Мөхәммәт бәйғәмбәр Йәҫриб оазисына Мүсәб ибн Ғүмәйер исемле тоғро өммәттәшен ебәрә. Мүсәб әүҙем эшмәкәрлек башлай, Йәҫриб халҡына Ислам динен вәғәзләй, Ҡөрьәнде дөрөҫ уҡырға һәм доғалар ҡылырға өйрәтә, ҡанундарҙы аңлата. Мүсәбтең вәғәздәре тиҙ арала һөҙөмтәләр бирә - күп тә үтмәй, бөтөн нәҫелдәрҙә лә мосолман динен ҡабул итеүселәр артҡандан-арта бара. Тик Әүес ырыуының Әүес-Манат нәҫеле генә Ислам диненән ҡырҡа баш тарта.

Бер йылдан һуң Мүсәб үҙенең урынына Азат ибн Зурат исемле Әүес ырыуы кешеһен әҙерләп ҡалдыра ла, Мәккәгә ҡайтып, Йәҫриб халҡының Ислам динен ихлас ҡабул итеүе һәм Мәккә мосолмандарының барыһын да үҙҙәренә саҡырыуы тураһында Мөхәммәт бәйғәмбәргә хәбәр итә.

Ошо арала Мөхәммәт бәйғәмбәр мосолмандарҙы күсереп алып китеү буйынса Мәккәлә әҙерлек эштәре алып бара. Был турала уның иң яҡын өммәттәштәре генә белә.

...Бер тапҡыр Мөхәммәт бәйғәмбәр иҫ китмәле күренеш кисерә. Оҙайлы ваҡыт намаҙ ҡылғандан һуң, ул үҙенең Ҡәғбәлә йоҡлап ятыуын күрә. Шунан һуң уны Ябраил фәрештә уята ла, урамға сығырға ҡуша. Урамда уны Бураҡ исемле, ап-аҡ төҫлө, меңге мал кәүҙәле, әммә кеше башлы, ҙур ҡанатлы зат көтөп тора. Ябраил Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе Бураҡҡа атландыра ла, бергәләшеп Иерусалим ғибәҙәтханаһына осоп барып етәләр. Ғибәҙәтханала уларҙы өс бәйғәмбәр - Ибраһим, Муса һәм Ғайса ҡаршы ала. Мөхәммәт бәйғәмбәр улар менән бергә доға ҡыла.

Доға тамамланғандан һуң уға өс һауыт һуҙалар. Һауыттарҙың береһенең эсендә һыу, икенсеһендә - һөт, өсөнсөһөндә шарап була. Мөхәммәт бәйғәмбәр һөт һалынған һауытты һайлап алғас, Ябраил уны хуплай һәм Мөхәммәт бәйғәмбәргә лә, уның өммәтенә лә шарап эсергә ярамағанлығын әйтә.

Шунан һуң Мөхәммәт бәйғәмбәр Ябраил менән бергә һауаларға күтәрелә. Беренсе һауала ул Атабыҙ Әҙәм менән осраша. Икенсе һауала Мәрйәмдең улы Ғайса бәйғәмбәр менән бында бергә көн күргән Зәкәриә улы Яхъя бәйғәмбәрҙе осрата. Өсөнсө һауала уны Яҡуб улы Йософ бәйғәмбәр ҡаршы ала. Дүртенсе һауала - Иҙрис, бишенсе һауала - Һарун, алтынсыһында Муса бәйғәмбәрҙәр ҡаршылай.

Етенсе һауала, иҫ китмәле матур тәхеттә, Ибраһим бәйғәмбәр ултыра. Ул тәхетенән төшөп, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе ожмахҡа алып инә лә, башҡа бәйғәмбәрҙәр менән осраштыра. Шунан һуң Мөхәммәт бәйғәмбәр Алла менән һөйләшә. Алланың үҙен күрмәй ул, шаршауҙар аша хәбәрләшә. Алла тарафынан Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең үҙенә лә, бөтөн мосолмандарға ла көнөнә биш тапҡыр намаҙ башҡарырға бойорола. Бынан һуң Мөхәммәт бәйғәмбәр яңынан ергә төшә, ә Бураҡ уны тиҙ арала Мәккәгә ҡайтарып ҡуя...

Киләһе көн Мөхәммәт бәйғәмбәр был күренеш тураһында өммәттәштәренә һөйләй. Был ваҡиғаның бик ҡыҫҡа ваҡыт арауығында булыуы тураһында ла әйтә. Сөнки, Ябраил фәрештә уны уятҡанда өҫтәлдә ултырған һыу һауытын яңылыш төртөп ебәрә. Мөхәммәт бәйғәмбәр, йөрөп ҡайтҡандан һуң, ауып барған һауытты тотоп өлгөрә.

Мосолмандар Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең төнгө сәйәхәте тураһында тыңлағандан һуң, бер ни тип тә өндәшмәй. Ни тип әйтергә лә белмәйҙәр. Мәккәнән Иерусалимға тиклем бер айлыҡ юл. Ҡанаттары булған йән эйәләре өсөн дә яҡын ара түгел...

**(Дауамы бар).**

*ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА*

**Башҡорт теленең ни тиклем бай булыуы тураһында күп һөйләргә лә кәрәкмәй. Телен ятраҡан, уның нескәлектәрен белгән кешеләр ошо байлыҡ менән файҙалана ла белергә тейеш тә бит. Тик ғәмһеҙлекмелер, әллә инде бөгөнгө көн менән генә йәшәүгә күнегеп барыуыбыҙмы, ул байлыҡты ҡәҙерләмәйбеҙ ҙә, баһаламайбыҙ ҙа, уны һаҡлауға, үҫтереүгә үҙ өлөшөбөҙҙө индереү тураһында уйлап та ҡарамайбыҙ.**

# ҠӘЙНӘ МЕНӘН ТЕЩА АРАҺЫНДА...

## айырма бармы?



Ә бит ныҡлабыраҡ уйлап ҡараһаң, ҡасандыр телебеҙҙә бер сит һүҙ ҙә булмаған. Бөгөнгө телмәребеҙгә ҡолаҡ һалһаң, ябай ғына кешеләрҙең түгел, белемле, ғалим кешеләрҙең дә, үҙ фекерен аңлата алмай, күберәк рус телен ҡулланыуына шаһит булаһың. Быға ваҡ нәмә, ғәҙәти күренеш, тип ҡарауыбыҙ арҡаһында телмәребеҙ сүпләнгәндән-сүпләнә бара. Шул арҡала "наверное", "может", "если", "например", "значит", "или" кеүек һүҙҙәрҙең сит тел һүҙҙәре булыуын, уларҙың башҡортса бөтөнләй икенсе төрлө яңғырауын уйлап та бирмәйбеҙ. Элегерәк үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең телебеҙгә инеп, нығынып китеүен аңларға ла була, сөнки заман алға барған һайын, техника ла үҫешкән, тормош шарттары ла яҡшыра барған. Шул арҡала яңы һүҙҙәр ҙә уйлап сығарырға кәрәк булған. Бөгөн телебеҙ аралашыу, фекер аңлатыу өсөн һүҙҙәргә мохтажлыҡ кисермәй. Ҡайһы берәүҙәрҙең сит тел һүҙҙәрен йыш ҡулланыуы, уларҙың телмәребеҙгә көндән-көн нығыраҡ үтеп инеүе төп башҡорт һүҙҙәрен телебеҙҙән бөтөнләй ҡыҫырыҡлап сығарып, уларҙың юғалыуына килтерә бара. Бөгөнгө телмәребеҙҙе ишеткән ата-бабаларыбыҙ ни әйтергә теләгәнебеҙҙе, ни турала һүҙ алып барғаныбыҙҙы төшөнмәй ҙә торор ине, моғайын.

Көндәлек аралашыуҙан, телмәрҙән саҡ ҡына ситкәрәк китеп, ҡәрҙәшлек терминдарына туҡталып китһәк тә, ошо айырым осраҡта ғына ла ни тиклем үҙ асылыбыҙҙан ситләшеүебеҙҙе күрер инек. Ә бит нәҫел-нәсәбеңде белеү, ҡәрҙәшлек мөнәсәбәттәрен һанлау һәм ихтирам итеү үҙ-ара матур мөғәмәлә булдырып, туғанлыҡептәрен нығытыуға ла ҙур өлөш индерә. Йәш айырмаһына, туғанлыҡ быуынына ҡарап, һәр кемдең тәғәйен үҙ урыны бар, һүҙ ҡушҡанда шунан сығып әҙәп, хөрмәт күрһәтелә. Шуға ла таныш булмаған, исемдәрен белмәгән кешеләргә "һеңлем", "ҡустым", "апай" йә "ағай" тип өндәшеү ҙә һис хилаф һаналмай, ә былай тип һүҙ ҡушыу, киреһенсә, ике аралағы мөнәсәбәтте яҡынайтып ебәргәндәй тойола. Шуныһы ҡыҙыҡ, урыҫ халҡында үҙеңдән олораҡтарҙың барыһы ла "тетя", "дядя" булһа, беҙҙә иһә был туғанлыҡ терминдары "апай", "инәй", "ағай", "бабай"ға (апа) бүленә. "Апай", "ағай" икән, тимәк, улар бары тик үҙеңдән олораҡ, ә "инәй", "бабай" (апа) тигәндә үҙеңдең атай-әсәйеңдән өлкәнерәк кешеләр булыуы аңлашыла.

Өйләнешеп, ғаилә ҡорғас, ҡатын менән ир, йәғни, кейәү менән килендең дә яңы туғандары барлыҡҡа килә. Мәҫәлән, бикәс, ҡәйнеш, балдыҙ, ҡайнаға, ҡайынбикә, килендәш, апһын нәҡ ошо йүнәлештәге туғанлыҡ бәйләнешен билдерә лә инде. Халыҡ араһында "Бажа - туған, кәҙә мал түгел" тип шаяртырға яратһалар ҙа, үҙ-ара килешеп, донъя йөгөн бергәләп тартҡан бажалар ҙа етерлек бөгөн. Бушҡа ғына "Йәшәйҙәр, ти, өс бажа, күрмәйҙәр, ти, һис нужа", тип йырламайҙарҙыр. Ғөмүмән, туғандарҙың үҙ-ара татыулығынан күп нәмә тора. "Апһын-ара татыу булһа - аш етер, ағай-эне татыу булһа - ат етер", тигән һүҙҙәр ҙә буштан ғына килеп сыҡмаған. Үкенескә ҡаршы, бөгөн был терминдарҙы барыһы ла ҡулланмай. Улар урынына "апай", "ағай" тиеү киң таралған. Шул арҡала телебеҙҙәге матур ҡәрҙәшлек терминдары ла юғалыуға табан бара. Элегерәк бер ғаиләлә тыуған балалар үҙ туғанына мотлаҡ "апай" йә "ағай" тип өндәшергә тейеш булһа, бөгөн иһә ата-әсәләрҙең быны ни тиклем мөһим булыуын уйлап бөтөрмәүе арҡаһындамылыр инде, күптәр бер-береһенә исеме менән генә өндәшә. Ә бит "апайым", "ағайым" тип һөйләү матур ғына түгел, ике араны яҡынайтыусы, туғанлыҡты нығытыусы, яуаплылыҡ өҫтәүсе һүҙҙәр ҙә.

Шулай уҡ һуңғы йылдарҙа сит халыҡ ғәҙәтенә эйәреп, ҡайны менән ҡәйнәне "әсәй", "инәй" (диалект), "атай" тип әйтеү ҙә модаға инеп бара. Әлбиттә, әллә ни төбөнә төшөп уйламағанда бында бер хилаф та юҡ кеүек. Килен менән кейәү туғандарҙы айырмаҫын, ире йә ҡатынының ата-әсәһен үҙенекеләй итеп ҡабул итеүен күрһәтергә теләйҙер. Ә кем әйтә һуң, ҡайны йә ҡәйнә һүҙенең дәрәжәһе әсәй менән атайҙыҡынан түбәнерәк тип? Икенсе төрлө аталғандан ғына мөнәсәбәттәр, ихтирам үҙгәреп китергә тейеш түгел бит. Эштең исемдә түгел, есемдә булыуын аңлатырға кәрәкмәйҙер. Тик шулай ҙа ҡәйнәнең - үҙ, әсәйҙең үҙ урынында булыуы яҡшыраҡтыр. Һуңғы йылдарҙа тағы ла шундай хәл йыш күҙәтелә. Күп кенә ҡәйнә-ҡайнылар килен-кейәүҙәренә лә исем менән өндәшеүсән. Быны, килен-кейәү тиһәң, уларҙы сит кешенең балалары итеп күрһәтә, ә былай үҙебеҙҙекеләр кеүек, тип аңлаталар. Был күренеш яңы быуында тәрбиәләнгән балаларҙың үҫеп етеп, заманса ҡәйнә-ҡайны булыуынан киләмелер, әллә инде туғанлыҡ терминдарын белмәүҙән йәиһә һанламауҙанмы - билдәһеҙ ҡала.

Тағы ла, телебеҙҙә ҡоҙа-ҡоҙағыйҙан тыш, ҡоҙаса тигән матур термин да бар. Былай тип, килен йәки кейәүҙең апайҙарына йәки һеңлеләренә әйтәләр. Тик бөгөн күптәр был һүҙҙе ҡулланмай, ҡоҙасаға ла ҡоҙағый тип өндәшеү ғәҙәткә инеп бара.

Тағы шуныһы ла ҡыҙыҡ. Ҡәйнәләр тураһында ниндәй генә көләмәстәр һөйләмәйҙәр бөгөн. Мәҫәлән, ошондай көләмәсте генә алайыҡ:

Өйҙә гәзит уҡып ултырған кейәүенә ҡәйнәһе:

- Исмаһам, түтәлдәргә сығып һыу ҡойор инең, - ти.

- Һуң, ҡәйнәм, тышта бит ҡойоп ямғыр яуа бит, - ти кейәүе.

- Атаҡ-атаҡ, яуһа ни, плащ кейеп сыҡ, - ти икән ҡәйнәһе.

Йәки, кейәүенең ҡәйнәһенә ҡарата булған мөнәсәбәтен күрһәткән көләмәс:

Дауахананан сыҡҡан кейәүе ҡәйнәһенә арҡаһына төкөрөргә ҡуша ти. Уныһы аптырап:

- Нимә, иҫәрләнеп бараһыңмы әллә? - ти.

Кейәүе:

- Төкөрөгөҙ, тигәс, төкөрөгөҙ. Врач йылан ағыуы менән ыуынырға ҡушты, - ти икән.

Көлкө көлкө менән, тик был көләмәстәрҙең төбөнә төшөп ҡараһаҡ, уларҙың бөтөнләй ҙә беҙҙең менталитетҡа тап килмәүен аңлар инек. Ғәҙәттә, эргә-тирәбеҙҙә кейәүенә ни алып биреп, ни ҡуйырға белмәгән, уны ололаған баҫалҡы ҡәйнәләр йәшәй. Кейәүҙәр ҙә ҡәйнәләренә бар яҡлап та ихтирам күрһәтә, уларҙың абруйын аша атламай. Шуға ла "теща" менән "ҡәйнә" араһындағы ҙур айырманы ла күрә белергә кәрәктер

Әлбиттә, һәр кемгә үҙ дәрәжәһе буйынса өндәшергә өйрәтеү ғаиләлә үк һалынырға тейеш. Был телебеҙҙең байлығын ғына һаҡлап ҡалмай, туғандар араһын нығытыуға, яҡынайтыуға ла нигеҙ булып тора. Үрҙә әйтеп үтелгән һәр терминдың статусына ҡарап, үҙ абруйы бар, нәҡ шунан сығып, нисегерәк һүҙ башлауыбыҙҙы, ниндәйерәк әңгәмә ҡороуыбыҙҙы самалайбыҙ. Нәҡ ошо арҡала матур мөнәсәбәттәр, әңгәмә барлыҡҡа килә. Ә бынан иһә тормошобоҙ тағы ла йәмләнә, нурлана ғына төшә.

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА.**

✓ *Валерий руханиҙың әйтеүенсә, Салауат хатта урындағы Изге Георгий сиркәүен реконструкциялауҙа ҡатнашҡан. Иң күп иғәнә индергән кеше ул. Әлбиттә, һорау тыуа: һөргөндәге кешенең ҡайҙан ундай аҡсаһы булған?*



СӘХИФӘНАМӘ

# УНДА САЛАУАТТЫ ҘУРЛАЙҘАР,

## унда Салауат рухы менән йәшәйҙәр!

**Йыл һайын 23-24 сентябрҙә Эстонияның баш ҡалаһы Таллинда Эстонияның аҙ һанлы халыктары байрамы ойошторола. Эстониялағы "Ағиҙел" башҡорт мәҙәниәте ойошмаһынан ошо сараға саҡырыу килгәс, Башҡортостан Республикаһының "Салауат Юлаев вариҫтары" төбәк йәмәғәт ойошмаһы рәйесе Виктор Хәкимов менән оло юлға сыҡтыҡ.**



Эстонияға аяҡ баҫыу менән Палдискиға юлландыҡ. Салауатыбыҙ һәйкәле янында батырыбыҙға булған олуғ һөйөүебеҙҙе белдереп, шиғыр уҡыныҡ, ҡурай моңо яңғыраттыҡ. Атаһы яғынан тамырҙары Салауат районынан булған улымды - Фатима Мостафина исемендәге 20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһының XI класс уҡыусыһы Хасбулат Абдуллинды - ошо сәфәргә алып сыға алыуыма сикһеҙ ҡыуандым. Уның йәш йөрәгенә им булып килешер мәлдәр, рух булып ҡуныр минуттар бында етерлек ине. Ул Ратуша майҙанында сәхнәнән дә, Палдискиҙың Салауат менән бәйле һәр урынында ҡурай моңон яңғыратты.

Күҙҙән йәш эркелдерер осрашыуҙар, танышыуҙар күп булды Эстония еренда. Улар хаҡында "Башҡортостан" гәзитендә сыҡҡан (6 октябрь һанында) мәҡәләмдә телгә алып үттем. "Киске Өфө" гәзите уҡыусыларына Палдискиҙағы Изге Георгий сиркәүе руханийы Валерий Назаренко менән осрашыуым хаҡында һөйләргә теләйем. Дин әһеле бында Салауат Юлаевтың исемен мәңгеләштереү менән шөғөлләнә. Ул беҙгә XVIII быуатта Уралда эшләнгән парсунаһы күрһәтте, йәғни Салауат Юлаевтың 31/26 см үлсәм менән ағасҡа төшөрөлгән рәсемен тәҡдим итте. Беҙ, башҡорттар - эскерһеҙ, артыҡ ныҡ ышаныусан халыҡ. Шуға күрә Салауат тураһында ниндәй генә мәғлүмәт ишетһәк тә, күҙҙән йәш эркелергә тора, һәр фекергә йөрәк аша ҡабул итеп өйрәнгәнбеҙ. Ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәнек беҙ был мәғлүмәттәргә, әммә күргәндәрҙе гәзит уҡыусыларға еткерергә кәрәк тип таптым. Ҡалғаны - тарихсылар, тикшереүселәр һәм ваҡыт эше.

Парсунаға түбәндәге һүҙҙәр яҙылған: **"Парсуна сиречь живле писание со всякимъ тщаниемъ образа князя Башкирского Салауата воина-харатейника, сына Юлая князя Азналы, воеводы-старшины волости Шайтанъ-Кудеевская. Написася сия парсуна древляго благочестия изографомъ Яискаго войска Юлайска полку писцомъ Андреомъ Толстухиномъ По высочайшему повелению Благочестивейшаго самодержавнейшаго Великого Государя Царя нашего Петра Федоровича Императора всея Роусии при наследнике его Благоверном Государе Цесаревиче и Великом Князе Павле Петровиче в лето от сотворения мира 7280, от Рождества же по плоти Господа Бога и Спаса нашего Исуса Христа 1772, Емуже подобает всяка слава, честь и поклонение со Отцом и Святым Духом ныне и присно, и во веки, веков. Аминь".**

Интернет селтәрендә мәғлүмәттәр эҙләп ҡараным. Ысынлап та, Толстухиндар нәҫеленән икона төшөрөүселәр бар, бөгөн дә бер вариҫтары Киров өлкәһендә йәшәй. Әммә был мәғлүмәттәрҙен дөрөҫлөгөн тикшереү өсөн ентекле экспертиза үткәреү зарур. Парсунаның төп нөсхәһе Мәскәүҙә, шәхси ҡулдарҙа һаҡлана икән.

Халыҡ араһында Салауаттың улы Рәхмәтулланың иҫән ҡалыуы билдәле. Ул үҙ заманы документтарында ла теркәлгән. Рәхмәтулланың улы Сөләймән, ә уның ҡыҙы Кинйәбикә булған. Бына шул ҡатындың ҡыҙы Гөлсафияның бүләләре була инде Виктор Хәкимов менән Айгиз Байрамғолов. Виктор Сәлим улы ДНК тикшереүе буйынса үҙенең Салауатҡа туғанлығын иҫбатлаған. Айгиздә лә туғандары беҙ Палдискиҙан алып ҡайтҡан Салауаттың рәсеменә оҡшатты...

Рухани беҙгә, Салауаттыҡы, тип шандал тип аталған әйберҙе лә күрһәтте. Уралда ҡойолған 37 сантиметрлыҡ был бронза ҡоролма - шәм ҡуя торған нәмә икән, беҙҙә уны шәмдәл тип әйтәләр. Ҡоролма, тим, сөнки ул бер нисә өлөштән тора һәм өс яҡлап унда шулай уҡ Салауат Юлаев хаҡында мәғлүмәттәр теркәлгән. Бер яғына **"Сей шандал получен за роздачею имущества Салавата Юлаева"** тип яҙылған, икенсеһенә "После его блаженныя кончины сентемрия 26-го 1800 года. Сие исполнено согласно последней воле усопшего" тиелгән, ә өсөнсө ҡырында: "Да упокоить Господь Богъ душу сего" тигән һүҙҙәр теркәлгән. Отец Валерийҙың әйтеүенсә, Салауаттың вафатынан һуң уның шәхси әйберҙәре Урал казактары ҡулына килеп эләккән һәм "Юлайска полку" казак полкы ҡомартҡылары араһында һаҡланған.

Шул уҡ казактарҙа Салауаттың намаҙлығы ла һаҡланған, тине рухани. Ул XVIII быуатта Иранда эшләнгән, үлсәме 124-43,5 см, бер ни тиклем зыян күргән, әммә яҡшы хәлдә. Урал казактары араһында йөрөгән риүәйәттәр буйынса, намаҙлыҡ, йәғни бында теркәлгәнсә, чувал, Салауат Юлаев ҡулға алынғас та уның менән ҡалған. Рогервикка ла хужаһы менән бергә килеп еткән һәм ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем суфый шағир Салауат Юлаев унда намаҙ уҡыған. Намаҙлыҡ батырҙың вафатынан һуң уның дуҫтары, казактар ҡулында ҡалған. Әйткәндәй, казактар менән башҡорттарҙың дуҫлығы хаҡында йыш ҡабатлай отец Валерий, уларҙы азатлыҡ өсөн көрәш кенә түгел, ә Рәсәй халыҡтарын милләтенә, диненә ҡарамайынса берләштереп, яңы дәүләт ҡороу идеяһы туплай, тигән фекерҙе лә әйтә. Ул хатта, Рәсәй федерализмы башында торған шәхес - ул Салауат Юлаев, тине.

Әлбиттә, был хәбәрҙәрҙе бер ни тиклем тетрәнеп тә, ғәжәпләнеп тә ҡабул итәһең. Милләтселектә, тик үҙ халҡын күтәрергә тырышыуҙа ғәйепләнгән Салауаттың, киреһенсә, башҡа ҡәүемдәр менән тығыҙ аралашып, ныҡлы эшлекле бәйләнештә йәшәүен хәбәр итәләр беҙгә. Әлегә тиклем Салауат Юлаевтың шиғырҙары тик урыҫ телендә табылыуы билдәле. Уны Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәшит Нигмәти иҫ киткес итеп башҡортсаға әйләндергән. Рухани Валерий, Салауат шиғырҙарын урыҫ телендә яҙған, ул был телдә яҡшы аралашҡан, шуға ла шиғырҙары урыҫ телендә табылған, тип иҫәпләй. Был фекерҙән дә хаҡ булыуы бар.

Тыуған яҡты өйрәнеүсе Радик Вахитов үҙенең бер сығышында шундай фараз әйтте: "Каторгала кешеләрҙең иң күбе ике-өс йыл йәшәүе ихтимал, әммә 25 йыл түгел, шуға күрә Салауат һәм уның фекерҙәштәре өсөн унда айырым шарттар тыуҙырылған булған". Был фекерҙе лә кире ҡағып булмай, сөнки Валерий руханиҙың әйтеүенсә, Салауат хатта урындағы Изге Георгий сиркәүен реконструкциялауҙа ҡатнашҡан. Улай ғына ла түгел, иң күп иғәнә индергән кеше ул. Әлбиттә, һорау тыуа: һөргөндәге кешенең ҡайҙан ундай аҡсаһы булған? Ошо уҡ һөйләмдәрҙе Валерий атаға ла ҡабатлайым һәм, ауылдары менән яндырылған башҡорт халҡы нисек аҡса тапһын бында ебәрергә, тим. "Башҡорттар үҙ батырын иғтибарҙан ситтә ҡалдырмаған, улар уға алтын ебәргән, ул замандарҙа шымсылар шәп эшләгән. Салауат бында бик яҡшы шарттарҙа йәшәгән. Халҡына ҡабат зыян килер тигән уйҙан ғына ул тыуған яҡтарына әйләнеп ҡайтыуҙан баш тартҡан", - ти ул.

**(Дауамы 11-се биттә).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

### Ҡатайҙар

Ҡара ҡатайҙар ниндәй тамырҙан булһа ла, XI-XII быуаттарҙа улар төрки халыҡтар мөхитендә үҫешкән. Араларында ҡыпсаҡтар күп булған. Уларҙың Алтайҙан булыуы этник үҙенсәлектәрен билдәләй, һөйләштәрендә сағыла. Ҡатайҙарға хас үҙенсәлектәр Орхон-Йәнәсәй яҙмаларында айырыуса ныҡ сағыла. Шуға күрә Ж. Кейекбаев уларҙы "Орхон ярҙарынан сығыусылар" тип яҙған. Ҡатай ҡәбиләһе табындарҙан көньяҡҡараҡ урынлашҡан.

Монголдар килгәнгә тиклем үк башҡорттар ырыу-ҡәбиләләр конфедерацияһы - ете ҡәбилә берҙәмлеге төҙөй, унда ҡатайҙар, табындар һәм ҡыуаҡандар инә. Шуға күрә боронғо табын, ҡатай, ҡыуаҡан ырыуҙары тарихы күсмә халыҡ теорияһын инҡар итә.

Уралда һәм көнбайыш Себерҙә йәшәүсе башҡорт ырыуҙары (уғырҙар) тимер иретеп эшкәрткән, ҡорал һәм төрлө әйберҙәр эшләгән. Мәғдәнселек, тимер иретеү башҡорттарҙың традицион хужалыҡ итеү төрҙәренә һаналған. Башҡортостан картаһындағы Иртәш, Ирәндек, Ирәмәл атамаларында "иретеү" өлөшө булыуы ла юҡҡа түгелдер.

Бикәтиндәр ҡатайҙарға ҡарағанда боронғораҡ ҡәбилә һаналһа ла, улар үҙҙәрен ҡатайҙарға туған һанай. Бикәтиндәрҙең ырыу башы Бикатун башҡорттарға икенсе этноним биргән легендар Иштәктең дүртенсе улы булған. Бикәтин ҡәбиләһе яңы эраның 1-се меңйыллығы аҙағында истәк йәки иштәк атамаһы алған төрки-уғырҙарға ҡарай. VII-IX быуаттар сығанаҡтарына ярашлы, яугир ҡатайҙар һәм һалйоттар тарафынан яуланғандан һуң, улар әйле, табын ырыуҙарының уғыҙ-ҡыпсаҡ компоненттәренә ҡушылып өҫтөнлөк иткән ҡәбилә һаналған. Һөҙөмтәлә ялан ҡатайҙар Уй йылғаһының төньяғы менән Тубыл йылғаһы араһында урынлаша. Ҡатайҙарҙың Башҡорт иленә күсенеүе XIII быуаттың уртаһында башлана. Улар XII-XIV быуаттарҙа Ыҡ һәм Ағиҙел йылғалары араһына төпләнә. Ҡатайҙарҙың күбеһе XIV-XV быуаттарҙа төньяҡҡа йүнәлә, Чусовая йылғаһының юғары ағымын биләй. Ә XVI быуатта Пермь крайы һәм Себер ерҙәрен баҫып алыуға бәйле Рәсәйҙәге сәйәси ваҡиғалар һөҙөмтәһендә ҡатайҙар төньяҡтағы ерҙәрен ташлап китергә мәжбүр була. Был процесс Себер ханлығы ҡыйралыуы менән тиҙләнеш ала. Башҡорттар Урал аръяғы далаларына күсә.

Ҡатайҙар һәм һалйоттар күбеһенсә төньяҡҡа һәм төньяҡ-көнбайышҡа табан китә. Риүәйәттәргә ярашлы, уларҙың ата-бабалары Сөн йылғалары буйлап Пермь Себеренә барып етә.

Ҡатайҙар менән һалйоттарҙың төньяҡ территорияларҙа оҙайлы ғүмер итеүе уларҙың этник составына йоғонто яһамай ҡалмаған.

XVI-XVIII быуаттарҙа ҡатайҙар менән һалйоттарҙың ҡушылыуы вогулдарҙы башҡорт мөхитенә яҡынайтырға булышлыҡ иткән. XVII быуат документтарында йыш ҡына башҡорттарҙы вогул, вогулдарҙы башҡорт тип атайҙар.

Строгановтарҙың баҫып алыу сәйәсәте, Ермактың көнбайыш Себерҙе яулауы башҡорттарҙы, Г.Ф. Миллерҙың әйтеүе буйынса: "урыҫ власын танырға теләмәйенсә алыҫ ерҙәргә китергә мәжүр итә...". Ҡатайҙарҙың бер өлөшө һалйоттар артынан Урал аръяғына, Һанар һәм Теча йылғаһы буйына юллана. Һеңрәндәр менән бергә терһәктәр Пыжма менән Исәт араһын ташлап китә. XVII быуат башында терһәктәрҙең бер өлөшө Төмән өйәҙенә ҡасырға мәжбүр була һәм 1630 йылда Исәт йылғаһы буйында Терһәк волосы барлыҡҡа килә.

Ер етешмәү арҡаһында ҡатайҙар Тубыл һәм Уй буйы далаларына төпләнеп, ялан ҡатайҙары булып китә.

Ҡатайҙар Урал аръяғына һуңғы тапҡыр XVIII быуат башында күсенә. 1959 йылда бында 24 ялан ҡатай ауылдары теркәлгән: Аҫҡар, Тарғул, Юламан, Манатау, Боҙыяҙ, Латыҡай, Балыҡсы, Ҡуйбәк, Баҡай, Байғына, Шәрип, Кирәй-Тамаҡ һ.б.

Зыряндар, терһәктәр, бикәтиндәр Уралға ҡатайҙар менән бергә килә.

Ҡатайҙарҙың алты ырыуы бар, 155 тамғаһы, 160 ырыу араһы теркәлгән. Хәҙерге ваҡытта ялан ҡатай вариҫтары Ҡорған өлкәһенең Сафаҡул, Әлмән районында йәшәй.

**(Дауамы бар).**

✓ *Тирмә булғас, ул мотлаҡ ҡаты ағастан: имәндән, сағандан, йыланан, дардарҙан бөгөп эшләнергә тейеш, тинек. Монгол тирмәләре һымаҡ, терәүҙәр ҡуйыуға, кирәмде "һындырыу"ға юл ҡуймаясағыбыҙҙы күңелдәребеҙгә һеңдерҙек.*



# ШӘХЕС АЗАТЛЫҒЫ

## йәки Имәнде

**Бөгөнгө ҡунағыбыҙ Ғәлинур Әхиәр улы ЗАРИПОВ - башҡорт халҡының милли кәсептәрен тергеҙеү йүнәлешендә эшләүсе оҫта. Уның менән тирмәләр эшләүҙең ҡайһы бер үҙенсәлектәре тураһында әңгәмә ҡорабыҙ. Ғәлинур Әхиәр улы ваҡыт төшөнсәһен ҡабул итеү, шәхес азатлығы, милли кәсептәрҙең киләсәге тураһындағы үҙенсәлекле фекерҙәрен дә ишеттерер.**

**Һүҙ башында үҙебеҙҙең әңгәмәселәрҙең тамырҙары, хәҙерге йәшәйеш хәлдәре тураһында белешеү йолабыҙ бар...**

- Минең ата-бабам Миәкә районы Илсеғол ауылынан. Мин Миәкәнең үҙендә йәшәйем. Рәсәй империяһы халыҡ иҫәбен алыу яҙмаларында (ревизские сказки) беҙҙең бабаларыбыҙ тураһында теркәлгән мәғлүмәттәр 1816 йылға ҡарай. Бер бабамдың исеме Ғәли икәне тураһында яҙма бар. Уның улы Туҡтамыш Ғәлин - есаул дәрәжәһендәге казак була. Туҡтамыштың ҡайҙа тыуыуы тураһында мәғлүмәттәр юҡ. 1814 йылда, Ватан һуғышы тамамланғас, өлкән улы Мөхәммәтшәриф Туҡаев (Туҡай - Туҡтамыштың ҡыҫҡартылған варианты, ҡушаматы булыуы мөмкин - **Ғ.З.**) менән Муса Ибраһимов отрядынан күсерелеүе, үҙе Илсеғолда йорт старшинаһы итеп ҡуйылыуы тураһында яҙма мәғлүмәттәр һаҡланған. Ә Муса Ибраһимов ул ваҡытта 7-се кантон старшинаһы була. Тимәк, Туҡтамыш 7-се кантон (Стәрлетамаҡ өйәҙе) кешеһе булыуы бар. Дәрәжәле кешеләрҙең мал-мөлкәте, дәрәжәләре, наградалары, хеҙмәттәре тураһында һәр 2-3 йыл һайын мәғүмәт алынып булған. Ындай яҙмалар Ырымбурҙа әле лә һаҡлана.

Ә яҡынырак тарихты ҡарағанда, ҡартатайым Илсеғол ауылы крәҫтиәне. Столыпин реформалары ваҡытында тәүгеләрҙән булып яңы урынға күсенеп, Яңы Илсеғол исемле үҙ биләмәһен булдырған. Йәғни, ҡартатайҙа шәхси хужалыҡ булдырыу теләге көслө булған, күрәһең. 20-се йылдарҙа, яңы иҡтисади сәйәсәт (НЭП) ваҡытында ул тиҙ генә аяҡҡа баҫып, "күтәрелеп" китә, шунлыҡтан уға "кулак" мөһөрө тағылыу ҡурҡынысы янай. Әммә өлкән улының Миәкә МТС-ы парторгы булып эшләүе арҡаһында ғына ҡартатай эҙәрлекләүҙәргә дусар ителмәй ҡала. Минең атайға был йәһәттән әллә ни уныш йылмаймай. Ул уҡытыусы, колхоз рәйесе булып, райкомда һәм башҡа урындарҙа эшләгән. 1937 йылда золом өйөрмәһе уны ла йолоп алған, әммә, Аллаға шөкөр, мәхшәрҙән иҫән ҡотолған. Мин инәйемдең ауылы Бикҡолда тыуғанмын, Илсеғолда үҫтем, шунда урта мәктәп тамамланым. Унан Башҡорт дәүләт педагогия институтында художество-графика факультетында юғары белем алдым.

**Һеҙҙең оҫталыҡ бар халыҡты хайран итә. Был талантты кемдән үҙләштергәнһегеҙ, атай-олатайҙарҙанмы?**

- Оҫталыҡ быуындан-быуынға тапшырыла килгәр, тип уйлайым. Атайым яғынан оҫталар әллә ни юҡ, инәйемдең ҡустыны балта оҫтаһы ине. Унаң һымаҡ оҫталар яҡын тирәлә бөтөнләй юҡ ине, тиһәм, хата булмаҫтыр. Ул бондарь, йәғни, мискә эшләүсе булды. Мин бала сағымдан уның эргәһендә уралдым. Холҡом менән дә, тышҡы һыҙаттарым менән дә әсәйемдәр яғына нығыраҡ тартҡанмын.

Институтта мин рәсем, һыҙма һәм хеҙмәт дәрестәре уҡытыусыһы бүлегендә декоратив-ҡул эштәре сәнғәте йүнәлешендә уҡыным. Шунлыҡтан, мин әлеге мәлдә үҙ һөнәремә тоғро, ошо һөнәрем буйынса хеҙмәт итәм, тип әйтә алам.

Дөрөҫ, мәктәптә ярты йыл ғына эшләнем. Әммә ул ярты йыл ғүмерлеккә иҫтә ҡалырлыҡ булды: мин үҙемдең педагог түгеллегемде аңланым.

**Ни өсөн тап тирмәләр эшләү менән ҡыҙыҡһынып киттегеҙ? Әллә йәмғиәттә ҡапыл ғына был боронғолоҡ күренешенә һорау, ихтыяж килеп тыуҙымы?**

- Тәүҙә ҡыҙыҡһыныу, шунан ихтыяж тыуҙы. Ун йыл элек булдымы, әллә унан алдараҡмы, инглиз телендәге сайттарҙы гиҙә торғас, инглиздарҙың, француздарҙың һәм башҡаларҙың тәмләп, ерәнә еткереп, халыҡсан, сифатлы итеп тирмәләр эшләүен, быны менән беҙҙең мәҙәниәтте лә пропагандалауын, тирмәләрҙең ни тиклем шәп, унайлы, ыҡсым, нәҙәкәтле торлаҡ икәнен донъяға танытыуын аңланым. Ә беҙҙәге мәҙәни сараларҙа, бигерәк тә һабантуйҙарҙа, "Агиҙел" фирмаһы етештергән, уртаһында көмбәҙҙе тотоп тора торған торба ҡуйылған тирмәгә оҡшаш нәмәләр ҡулланыла ине. Тирмәнең ундай терәүе булмаған икәнен дә белә инем. Үҙебеҙҙәге ошо күренеш тә, сит ил оҫталарының әүҙемлеге лә сәмгә тейҙе бит.

Улымдың да әле мәктәптә уҡыған мәле - минә ярҙам итергә мөмкинлеге бар ваҡыт. Тотток та, ағасын матур итеп бөгөп, ҙур булмаған, бер ниндәй терәүһеҙ тирмә эшләп тә ҡуйҙыҡ. Тәүге тирмәбеҙ беҙгә нык оҡшаны. Уны беҙ яңы урында өй һалғанда ваҡытлыса торор урын итеп ҡулланырға булдыҡ. Көҙ көнө беҙҙең ихаталағы тирмәне күршебеҙ күреп ҡалған: "Был нимә ул?"- тип, ҡыҙыҡһына теге. "Тирмә", - тим. Ул: "Һат миңә тирмәнде!" - тип бәйләнде лә ҡалды. Шулай итеп, тирмәгә ҙур булмаһа ла, һорау барлығы асыҡланды. Беренсе тирмәне күршегә һаттыҡ. Шул йылда уҡ улыбыҙ сайт эшләне. Йәйләп, етештереү күләмен арттыра барҙыҡ. Бөгөнгәсә, сама менән әйткәндә, 150 тирмә эшләгәнбеҙҙер. Күпме тирмә эшләүебеҙҙе, әлбиттә, һанаманыҡ...

Башта уҡ тирмәне ябайлаштырып эшләү иҫулдарынан баш тартырға булдыҡ. Тирмә булғас, ул мотлаҡ ҡаты ағастан: имәндән, сағандан, йыланан, дардарҙан (корос ағасынан) бөгөп эшләнергә тейеш, тинек. Монгол тирмәләре һымаҡ, терәүҙәр ҡуйыуға, кирәмде "һындырыу"ға юл ҡуймаясағыбыҙҙы күңелдәребеҙгә һеңдерҙек.

Йыл буйы эшләгән тирмәләрҙең 3-4-ен музей экспонаты сифатында, йәғни боронғо ысулдарҙы ныҡлы күҙәтеп, түнәрәк ағастан, шартына килтереп эшләйбеҙ. Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, боронғоса тирмәләр күп тырышлыҡ һәм ваҡыт талап итә. Улар менән ҡыҙыҡһыныусылар ҙа бик әҙ. Тирмәләр баҙары үҙе лә бик бәләкәй, бик тар өлкә бит инде ул. Шунлыҡтан, был тауарға һорау ҙа, тәбиғи рәүештә, күп була алмай, әлбиттә. Әммә хеҙмәтебеҙҙән килгән аҡса беҙгә етә. Тирмәне күп итеп етештереү маҡсатын баштан уҡ күҙ уңында тотмағайныҡ, бөгөн дә был ҡарарыбыҙ үҙгәрешһеҙ ҡала. Әйткәндәй, бөгөн беҙ тирмәне осоҙ хаҡҡа күп итеп етештереп, еңел килем алыу мөмкинлегенә лә эйәбеҙ. Быны өсөн йылдар буйы тупланған тәжрибә лә, етештереү базаһы ла бар. Тәүҙә ҙур ғына күләмдә аҡса талап итә был эш, аҙаҡ ул сығымдың үҙе ҡаплай. Тик был ысул миңә ҡыҙыҡ түгел. Тирмә эшләүҙе мин бизнес күренеше булыуҙан бигерәк, сәнғәт күренеше тип ҡабул итәм.

Беҙ бөгөн үҙебеҙҙең күңелебеҙ ятҡан башҡа эштәрҙе лә башҡарабыҙ. Мәҫәлән, уҡ-һаҙаҡ эшләү, балаҫ һуғыу ҡорамалдары етештереү... Күнел тартҡан эшебеҙ аҡса ла килтерә, әммә беҙ аҡса эшләү маҡсаты менән генә эшләмәйбеҙ. Нисек кенә тырышма, бөтөн аҡсаға барыбер эйә булып булмай. Быға өҫтәп, аҡса өсөн генә эшләү бик ялҡытҡыс шөғөл икәнлеге лә сер түгел.

**Ә һеҙҙең эшкә, аҡсаға бындай үҙенсәлекле мөнәсәбәтегеҙ эшҡыуарлыҡты артабан үҫтереүгә ниндәй дәрәжәлә ярҙам итә?**

- Аллаға шөкөр, ярҙам итә. Был мөнәсәбәт күп аҡса килтермәй, әммә ғәмәлдә башҡа бер кемдә лә булмаған азатлыҡ бирә. Ундай азатлыҡ бары тик фрилансерҙарҙа, йәғни, ирекле хеҙмәткәрҙәрҙә генә була. Кемдер, бәлки, аҡсалы эштә эшләүсе нефтселәр, дәүләт хеҙмәткәрҙәре үҙҙәрен ирекле тип уйлайҙыр. Минеңсә, ул кешеләр үҙҙәренең ни тиклем ирекһеҙ булыуын үҙҙәре лә белеп етмәй. Әгәр был турала уйланһалар, ах итерҙәр ине... Хәйер... Минең тормош тәжрибәм күрһәтеүенсә, кешеләрҙең күпселегенә ирек бөтөнләй кәрәкмәй ҙә һымаҡ. 90-сы йылдарҙа беҙгә шәхси азатлыҡ бирҙеләр ҙә бит, кем, күпме кеше файҙаланды һуң уны? Предприятиеларҙы үҙләштереүселәрме? Халыҡ байлығын хосусилаштырыусылармы? Эйе, улар ауыҙҙарына өҙөлөп төшөргә торған алманы тотоп алды - мөмкинлекте ҡулдан ысҡындырманы. Ә төп халыҡ массаһы был азатлыҡты тоймай ҙа ҡалды.

**Боронғо башҡорт тирмәһе һыҙмаһын тергеҙгәндә һеҙ ниндәй сығанаҡтарға таяндығыҙ? Рус ғалимдарының яҙмаларынамы? Әллә башҡа сығанаҡтарғамы?**

- Башҡорт тирмәһе буйынса ниндәй мәғлүмәттәр таба алдым - барыһын да файҙаландым. Тәүҙә тәжрибәһеҙлегем арҡаһында саф башҡорт тирмәһең генә төҙөргә булып киттем. Йәнәһе лә, ер йөҙөндә саф башҡорт тирмәһе генә була инде. Хәҙер мин, башҡорт тирмәһе, ҡаҙаҡ, нуғай, ҡырғыҙ тирмәләре, тигән төшөнсә юҡ, ә уларҙың мәҙәни мөхите бер, әммә һәр халыҡтың тирмәһендә үҙ үҙенсәлектәре бар икәнен аңларлыҡ тәжрибәгә эйә булдым. Халыҡтың үҙенсәлек сиге лә шунда тамамлана. Күптәр таҙа башҡорт, таҙа ҡаҙаҡ күренештәрен эҙләй башлай. Был үҙе уҡ аҡыл ярлылығы күрһәткесе. Быны үҙемдән беләм. Беҙҙең тирмәләрҙе төрки халыҡтары тирмәһенең башҡортса төрө тип әйтергә була. Төрки халыҡтарының тирмәләре берберенән әллә ни айырылмай ҙа тиерлек. Хатта тирмә өлөштәре атамалары ла бер төрлөрәк яңғырай: "сағыраҡ", "шаңыраҡ", "кирәгә", "канат", "уҡ", "ишек". Ҡаҙаҡтар ишекте ишек ти, ә ҡапҡастарын "сыҡырлауыҡ" ти. Беҙҙеңсә, шығырҙауыҡ була инде. Ул һүҙ беҙҙә лә булған да, онотолғандыр. Беҙ, көнбайыш башҡорттары, 200 йыл инде тирмәләрҙә йәшәмәйбеҙ. Көнсығышта тирмәләр уҙған быуат баштарына тиклем һаҡланған. 20-се йылдарҙа тирмә һирәк осрай торған күренеш булғандыр. Ә беҙ тирмәне тағы ла алдараҡ юғалтҡанбыҙҙыр. Бәлки, 100 йылға алдараҡтыр. Тағы, әйтергә кәрәк, халыҡтың хәтере ҡыҫҡа бит ул. Иҫ китерлек, йыйылып китерлек ҡыҫҡа халыҡ хәтере. Мине бер яҡын кешем, ҡатын кеше шул тиклем аптыраша ҡалдырҙы. Уның тураһында философик трактаттар яҙырға булалыр, тип уйлайым. Әлеге танышыма борон замандағы тирмәләр тураһында һөйләгәйнем. "Кайҙан беләһең һин борон заманды? Ул заманда булмағандыр бит инде тирмәләр?" ти. Әңгәмәсемдең был һүҙҙәренән һуң миндә уның "борон заман" тигән төшөнсәһенең бик һай булыуы тураһында шик тыуҙы. Мин унан: "Ә ҡасан булған һуң ул борон заман?" - тиһәм, ул: "Борон заман - ул беҙҙең йәш саҡ инде", - тине. Был ваҡиғанан һуң мин төрлө кешеләрҙән

***ҒӘЛИНУР ЗАРИПОВ:***

*Минең күҙәтеүҙәремдән сығып фекер йөрөткәндә, донъяла әҙәпһеҙ, яһил заттарға ҡарағанда, намыҫлы һәм ғәҙел кешеләр күберәк. Минеңсә, бөгөнгө йәштәр иҫ киткес шәп. Улар беҙҙән дә, беҙҙән алдағы быуындан да күпкә яҡшыраҡ. Миңә йәштәр нык оҡшай. Иң мөһиме, улар азат. Уларҙың күҙҙәрендә лә, күңелдәрендә лә беҙҙә булған ҡурҡыу юҡ.*



*✓ Азат булығыҙ. Тик азатлыҡты бәйелһеҙлек менән бутарға кәрәкмәй. Кем бутай, ул аңһыҙ һәм бер нәмә лә аңламай тигән һүҙ. Азатлыҡ - ул иң беренсе нәүбәттә, яуаплылыҡ. Ул үҙенең юлын, тәҡдирен, күрәсәген белә.*

# ТУРАҺЫНДА ҺҮҘ,

## нисек бөгәләр?

боронғолоҡто улар нисек ҡабул итеүе тураһында һораштыра башланым. Һөҙөмтәлә, бихисап кешеләрҙең тарихи хәтере тарих фәне төпкөлдәренә үтеп инмәй тип һығымта яһаным. "Боронғо" тигән төшөнсәне улар 2 быуын элгәре генә итеп ҡабул итә. 2 быуындан алдараҡ тарих улар өсөн легенда кеүек нәмә. Тарихты белмәйҙәр, әллә кешегә ҡыҙыҡ түгел, әллә башҡа сәбәп...

**Тирмәләрҙән тыш, ағастан тағы нимәләр эшләйһегеҙ?**

- Төп эшебеҙ - тирмәләр. Хобби рәүешендә бер нисә төрлө балаҫ һуғыу станоктары эшләйбеҙ. Тик улар халыҡта ҙур һорау менән файҙаланмай. Уларҙы Башҡортостанда бер кем дә һатып алманы. Беҙ уларҙы башлыса үҙәк Рәсәйгә һатабыҙ. Тағы күңел өсөн тип уҡһаҙаҡ, семәрле, һырлы һандыҡтар эшләйем. Мин ҡайһы бер әйберҙәрҙе кәрәк булғаны өсөн эшләмәйем, ә эшләмәй булдыра алмағаным өсөн эшләйем. Эшебеҙҙе башлап ҡына торғанда өй эстәренә һырлы баҫҡыстар ҙа, йорт йыһаздары ла эшләп алдыҡ. Ваҡытында ағастан елкәнле яхталар ҙа эшләнек. Йыйып ҡына әйткәндә, шулар.

**Белеүемсә, һеҙ заказ буйынса аҡ тирмәләр ҙә, һоро тирмәләр ҙә эшләйһегеҙ. Тирмә башҡорттарҙың мәҙәниәтендә ниндәй роль уйнаған?**

- Тирмә - байлыҡ билдәһе. Ярлы-ябағаның тирмәһе булмаған. Улар йәйләүгә сыҡҡанда ҡайҙа етте, шунда көн күргән. Бесән ҡыуышта, йүкә-ҡайындан эшләнгән аласыҡта йәшәгән. Ә тирмә иһә хәлле кешеләрҙең торлағы булған. Ни өсөн тигәндә, тирмәне төҙөп, кейеҙ менән уратыу, иҫкергән кейеҙҙе алыштырыу, ямап тороу өсөн генә 100-120 баш ҡуй талап ителгән. Мин тәүҙә тирмәне ғәҙәти күренеш тип уйлағайным. Ысынында, ул етеш статуслы, ҡыйбатлы әйбер булған икән.

**Һеҙҙең тирмәләр ҡайһы тарафтарға, ниндәй илдәргә күберәк һатыла?**

- Тирмәләрҙе башлыса Рәсәй Федерацияһы өсөн төҙөйбөҙ. Клиенттарыбыҙ Санкт-Петербургтан Сахалинға тиклем. Сит дәүләттәргә килгәндә, элекке совет республикалары - Эстония һәм Ҡаҙағстанға оҙатҡаныбыҙ булды. Рәсәйҙең көньяғы, Мәскәү, Санкт-Петербург, Таулы Алтай республикаһы бик әүҙем һатып ала тирмәләребеҙҙе.

**Һеҙ бер әңгәмәлә, тирмә эшләү бизнесында конкурентлыҡ юҡ, тип әйткәйнегеҙ. Һаман да шулаймы, хәлдәр үҙгәрмәнеме? Ә бит бик ауыр ғына шөғөл бит инде ул тирмә эшләү...**

- Ауыр түгел. Мин был феномендың сәбәбен аңлап етмәйем. Миңә ошо һөнәргә өйрәнергә тип, бер нисә егет килгәйне. Мин уларға эштең айышын төшөндөрөп тә биргәйнем. Аңлауымса, был егеттәр үҙҙәрен етәкләп йөрөтөп өйрәтеүҙе көттө, шикелле. Кешегә, баҡһаң, интернетта үҙен ҡыҙыҡһындырған мәғлүмәт табыу ҙа "ауыр" икән. Хәҙер бит элекке заман түгел - мәғлүмәткә ҡытлыҡ юҡ. Миңә нимә генә кәрәк булһа ла, интернет киңлектәренән таптым. Элек кенә ул, "тимер шаршау" ваҡытында бер нәмә табып булмай торғайны. Хәҙер ул йәһәттән - хөрриәт заманы, нимә эҙләргә, ҡайҙан эҙләргә кәрәк икәнен белһәң һәм теләгең булһа, шул еткән. Эйе, ярайһы ғына ваҡыт ултырырға, эҙләнергә кәрәк буласаҡ.

Күптәр етештереүҙә ағасты бөгөү талап ителмәгән монгол тирмәләре эшләй ул эшләүгә. Унда бөтөн өлөштәр ҙә тура. Шаңыраҡтың тирәсе лә бысылған ғына. Ниңәлер, монголдар ағасты бөгөү оҫталығын өйрәнмәгән. Ауыр ҙа түгел һымаҡ. Һәр хәлдә, ағасты бөгөү күптәрҙе ҡурҡыта. Күптәр ағасты бөгөү өсөн мотлаҡ ҙур ҡаҙанда һыу ҡайнатыла, ағас шуның эсендә "бешерелә" икән тип уйлап, хаталана. Ағасты тағы ла аҙыраҡ сығымдар менән, тағы ла һөҙөмтәлерәк, сифатлыраҡ бөгөү ысулы таш быуаттан билдәле. Быу тигән нәмәне, пар генераторын әйтәм. Ҡапҡаслы һауытҡа һыу ҡойолоп, унын аҫтына ут яғыла. Быу шланг аша бөгөү талап ителгән ағастар һалынған улаҡҡа бирелә. Пар генераторы менән эшләһәң, ағас һыу менән эшләгәндәгегә ҡарағанда әҙерәк еүешләнә, эштең сифаты ла яҡшыраҡ була. Кешеләр ағасты бөгөү эшен саманан тыш ауыр, тип уйлаймы, баштағы ҡурҡыу тойғоһо уларға эшкә тотонорға ҡамасаулаймы икән... Ә мин студент саҡта уҡ ағас бөгөү буйынса тәжрибәләр эшләй торғайным. Шуға, тирмә эшләй башлаған саҡта был эш миңә таныш ине инде.

**Ғәҙәттә, бизнесты башлау ҡыйын түгел, уны оҙаҡ йылдар йәшәтеү - ауыр, тиҙәр. Һеҙ үҙ эшегеҙҙе инде тиҫтә йылдан ашыу уңышлы алып бараһығыҙ...**

- Кемгә нисек оҡшай, кемгә нисек күңеленә ята бит. Миңә, шәхсән алғанда, теләһә ниндәй эште башлап ебәреү бер ни тормай. Минең өсөн көн һайын бер үк эш эшләү ауыр. Күп кешеләр ғүмерҙәре буйы, һәр көн бер үк ғәмәл атҡарырға мөмкиндәр. Йәғни, ғүмерең буйы һәр көн иртән тороп, кейенеп, эшкә барыу минең өсөн үлемгә тиң. Ундай тормош алып барып, бер аҙна эсендә башыңды элмәккә тығырға була... Башҡалар өсөн ошо хәлде үҙгәртеү - үлемгә тиң булыуы бар. Шулай булғас, һәр кемдең - үҙ өлөшө, өлөшөнә төшкән көмөшө.

**Һеҙҙең юлығыҙҙы дауам итеүселәрегеҙ бармы?**

- Улым үҙ юлын һайланы, ҡыҙым был юлды дауам итә торған заттан түгел - ул ҡатын-ҡыҙ затынан. Ә юлымды дауам итеүселәр бик күп. Ҡасандыр минең менән эшләгән 10-лаған кешенең барыһы ла, минән китеп, үҙ эшен асты.

**Хәҙерге заман кешеһе өсөн, һеҙҙеңсә, тәү сиратта ниндәй сифаттар кәрәк?**

- Заманалар үҙгәреү менән кешелек сифаттары үҙгәрмәйҙер ул. XVII быуатта ла, бөгөн дә кеше булып ҡала белеү сифаты баһалана торғандыр, тим. Мин үҙем бик тә дисциплиналы кешеләрҙе ихтирам итәм, сөнки миндә был сифат юҡ. Һәр хәлдә, ҡаты тәртип тигән нәмә юҡ минең үҙемдә. Тағы, ихласлыҡ һәм ябайлыҡ - рухи һәм физик сәләмәтлек нигеҙе, тип иҫәпләйем. Минең күҙәтеүҙәремдән сығып фекер йөрөткәндә, донъяла әҙәпһеҙ, яһил заттарға ҡарағанда, намыҫлы һәм ғәҙел кешеләр күберәк. Минеңсә, бөгөнгө йәштәр иҫ киткес шәп. Улар беҙҙән дә, беҙҙән алдағы быуындан да күпкә яҡшыраҡ. Миңә йәштәр нык оҡшай. Иң мөһиме, улар азат. Уларҙың күҙҙәрендә лә, күңелдәрендә лә беҙҙә булған ҡурҡыу юҡ.

**Һеҙҙәге шәхес азатлығына ынтылыш ҡасан барлыҡҡа килде икән? Моғайын, был һорау бер мине генә ҡыҙыҡһындырмайҙыр...**

- Кемгәлер азатлыҡ һауа һымаҡ кәрәк. Әйткәйнем инде, йәш саҡта, тәжрибәһеҙлегем арҡаһында, азатлыҡ бөтөн кешеләргә лә кәрәк икән тип уйлап, яңылышҡанмын. Беҙҙең илдәге халыҡтың 86 процентына, мәҫәлән, ирек бөтөнләй кәрәк түгел. Улар үҙенең шәхси иркен бер шешә араҡыға алыштырырға мөмкин. Ундайҙар Советтар Союзында ла булды, хәҙер ҙә бар. Заман үҙгәрмәй. Икенсе төҫ кенә ала. Мәҫәлән, элек парторг булып йөрөүселәр хәҙер мулла сапанын кейә...

**Башҡорттар ҙа үҙгәрмәйме?**

- Юҡ, үҙгәрмәй. Менталлек, ысынлап та, бар. Ҡайһы саҡта иҫ китерлек дәрәжәгә етә был үҙенсәлек. Беҙ ниндәйҙер үҙебеҙ уйлап сығарған мифологик донъяла йәшәйбеҙ. Мин донъяға үҙ халҡымдың башҡаларҙан яҡшыраҡ, артығыраҡ икәне тураһында белдерергә теләгәндән түгел, ә беҙ башҡа халыҡтар менән бер кимәлдә, башҡалар менән тиң хоҡуҡлы, азат, тип әйтергә теләгәндән башҡорт тирмәләрен төҙөй, мәҙәниәтебеҙҙе тарата башланым.

**Йәштәргә ниндәй теләктәр әйтерһегеҙ?**

- Азат булығыҙ. Әҙ генә булһа ла азат булырға тырышығыҙ. Тик азатлыҡты бәйелһеҙлек менән бутарға кәрәкмәй. Кем бутай, ул аңһыҙ һәм бер нәмә лә аңламай тигән һүҙ. Азатлыҡ - ул иң беренсе нәүбәттә, яуаплылыҡ. Ирекле кеше - яуаплы кеше. Ул үҙенең юлын, тәҡдирен, күрәсәген белә. Ул уңға-һулға һуғылмай, үҙенең уйын, маҡсатын тормошҡа ашыра. Әгәр һинең үҙеңдең планың юҡ икән, һин сит кешенең планы буйынса йәшәйәсәкһең. Шуға, йәштәрҙе мөмкин булған саҡлы үҙ идеялаларын, үҙ маҡсаттарын, үҙ пландарын тормошҡа ашырырға өндәйем. Шул саҡта ирекле булырһығыҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөгөнгө әңгәмәнән кем нимә алғандыр, миңә ҡунағыбыҙҙың шәхес азатлығы тураһында әйткән һүҙҙәре нык тәьҫир итте. Ғәлинур Зарипов, ирекле кеше - яуаплы кеше, тип, уйланырға нигеҙ, хәрәкәт итергә йүнәлеш күрһәтте. Һеҙҙә лә әңгәмә ниндәй ҙә булһа кисерештәр тыуҙырғандыр, тигән ышаныста ҡалабыҙ.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**әңгәмәләште.**














Тикшереп бөткәс, йыуынғыс яғына барып, ҡулдарын сайып, таҫтамал менән ҡоротто ла пациентҡа яңы карта асып, уға тикшереү мәғлүмәттәрен яҙа башланы.

"Эт-бесәй тотҡандан һуң ҡулын йыуамы ни..." Һәр хәрәкәтте күҙҙән үткәргән Дилеммаға табиптың сирҡанғандай ҡулдарын йыуып аҙапланыуы оҡшаманы, шуға сираттағы һорау бирелмәҫ элек ҡәтғи ҡарар ҡабул итеүен белдерә һалды:

- Мин аборт эшләтәм, шуға килдем. Был минең ныҡ уйланған һәм һуңғы ҡарарым!

Табип сыймаҡлауын ҡуйып, алдындағын ситкәрәк этәрҙе лә, аңламағандай, ҡабатлап һораны:

- Нимә тинең? - Тегеһенең уңайһыҙлыҡ кисереп, юғалып ҡалыуын күргәс, ҡәтғи тонда дауам итте. - Бала ишетеп ҡалмаһын был һүҙҙәреңде!

- Ишетергә ул әлегә тыумаған.

- Эй, һеңлем, йәшһең шул әле, күп нимәне аңлап, төшөнөп бөтмәйһең. Тыумаһа ла барыһын да һиҙеп ята, һинең һәр әйткәнеңде, ҡылығыңды йөрәге аша үткәрә. Шул сәбәптән, бына ошондай ҡаты бәғерһеҙлектән миһырбанһыҙ, выжданһыҙҙар тыумаймы икән? Тыумаҫ элек үҙен артыҡ, кәрәкһеҙ иҫәпләгән бала рәнйейҙер. Һинең ҡарының уның өсөн әлегә үҙе бер донъя. Әйҙә, шул донъяны боҙмайыҡ, емермәйек.

- Апай, зинһар, лекция уҡымағыҙ!

Табип, ирендәрен ҡымтып, үпкәләгәндәй итте лә хөкөм сығарғандай теҙҙе:

- Беренсе аборт үтә лә зарарлы, ары бөтөнләй түлһеҙ ҡалыуың ихтимал. Тағы һуңлағанһың, һылыуым, ваҡыт үткән. Яһалма юл менән әле етлекмәгән толҡатты тыуҙырырға йыйынмайым, теләгем дә юҡ. Тере кешене үлтереүгә тиң процедура ул. Уны эшләүгә һуңғы сиктә, әсәнең һаулығына ҡурҡыныс янағанда ғына баралар. Башҡа белгестәргә мөрәжәғәт итә алаһығыҙ, улар ҙа һеҙгә шул кәңәште бирәсәк.

Кабинеттан өмөтһеҙләккә бирелеп, төңөлөп сыҡты Дилемма. Башҡа табиптарға ла күренеп аҙапланманы, шөбһәләнеп, хатта ҡайһылыр кимәлдә ҡурҡып бушаныу көнөн көтә башланы.

Туғыҙ айын тултырып, уны тулғаҡ ғазаптарына дусар итеп, ир бала донъяға килде. Дилемма акушерканың юғары күтәрелгән ҡулында ҡыҙыл йомарсаҡты күргәс, күҙҙәрен йомдо: "Йөҙө ҡыҙарып тора, хас та атаһы!" - тигән уй йәшен тиҙлегендәй мейеһен ярып үтте, күңелен ауырттырып сыйҙы. "Тыума!.." Шул һүҙҙе ҡысҡырып әйтеүҙән ҡурҡып, ауырттырып тештәрен ҡыҫты.

- Ҡотлайым, өс кило ла туғыҙ йөҙ грамм! Шалҡан һымаҡ таптаҙа!

Ҡуйырҙан-ҡуймай ҙабаһа бәпесте ҡабул иткән бәйләнсек акушерка, иртәгәһен палатаны яңғыратып килеп инде лә яр һалды. - Шул тиклем дә матур малай, йызылдап ҡарап ятасы, иламай ҙа бит әле!

- Минең уны теләмәгәнемде тотош больница белә. Кире уйлар, ирер ҙә, алыр, тип өмөтләнәһеңме? Не нужен мне ребенок! Бар, эргәмдән сығығыҙ!

- Тыумаған саҡта теләмәй инең, хәҙер ул бар, кеше тыуған донъяға, тимәк, хоҡуҡтары ла бар. Хәҙер яныңа алып киләм, күрһәң, айырылғың да килмәҫ.

- Килтермәгеҙ, кәрәкмәй!

- Уға имергә ваҡыт.

- Уның нимә теләгәне мине ҡыҙыҡһындырмай. Бар, эргәмдән китегеҙ, бер кемде лә күргем килмәй.

- Эх, һин, беҙ ирем менән теләһәк тә сабый һөйөп ҡыуана алмайбыҙ, ә һин булғанынан баш тартаһың. Үкенерһең бер саҡ.

- Ҡурҡытмағыҙ, йәме, вон отсюда! - Дилемма үкһеп, түшәгенә йөҙтүбән ҡапланды.

* * *

Бына ул сабыйын балалар табыу йортонда ҡалдырып, зәғиф өләсәһен, ҡартатаһын яҙмыш ҡосағына ташлап, ят тарафҡа китеп бара. Уңырмы, туңырмы - билдәһеҙ. Поезға ултырырға саҡырҙылар. Ул баҫты ла, ауыр сумкаһын һөйрәп, башҡа сығыусылар артынан эйәрҙе.

Ер аҫты юлында таш иҙәнгә ҡатырға киҫәге түшәп, хәйерсе ҡарсыҡ бөршәйгән. Һөйәк тә тиренән хасил сырыш йөҙҙә хис тә, кисерештәр ҙә сағылмай, бары унда юйылмаҫлыҡ булып ғазап төҫмөрләнә. Ҡарсыҡ ҡыуарған ағастай тырпайған бармаҡтары менән яулығы ситенән күренгән сал сәстәрен тәртипкә килтерҙе лә, танығандай төбәлеп, уға усын һондо:

- Алыҫ юлға йыйынғанға оҡшағанһың, ҡыҙым, Алла йөҙөндә мине риза итеп, хәйер-саҙаҡаңды биреп кит.

Дилемма кеҫәһе төбөндә сылтыраған тиндәрҙе ҡарсыҡтың алдындағы ҡағыҙ ҡумтаға ырғытты.

- Алла ярлыҡаһын үҙеңде!

Дилемма алам-һоламға төрөнгән ҡарсыҡҡа ерәнгәндәй ҡараны ла, ҡабаланып, ары атланы.

Китә биргәс, уны билдәһеҙ бер көс кире ҡайырылырға мәжбүр итте. Туҡтаны ла уңайһыҙланғандай ҡиәфәттә һораны:

- Инәй, әйт әле, ниндәй һүҙ ул тәүбә?

Ҡарсыҡ төҫһөҙ күҙҙәрен секерәйтте:

- Уны кем әйтте, ҡыҙым?

- Өләсәйемдән ишетһәм дә төшөнмәгәйнем.

- Ҡылған гонаһтарыңдың кисерелеүен һорап, Аллаға мөрәжәғәт итеү, унан ярлыҡау һорау.

- Поняла... Аллаға нисек мөрәжәғәт итергә һуң?

- Намаҙ уҡы, балам. Һинең уй-теләктәреңде намаҙ аша Тәңре ишетер. Намаҙ уҡыған кешеләрҙе әхирәттә ожмах көтә.

- Тимәк, бөтә муллалар ҙа теге донъяла ожмахҡа эләгәләрме?

Хәйерсе ҡарсыҡ тешһеҙ ауыҙын мөйтәңләтеп бер килке һүҙһеҙ ултырғас, уфтанып яуапланы:

- Ҡөрьән уҡый белгәндәре генә, балам. Бөгөн бит кемдең гонаһлы, кемдең изге, кемдең әтрәгәләм, кемдең мулла икәнен айырыу мөмкин түгел. Буталды замана, ерҙән мәғәнә, ҡот, бәрәкәт ҡасты.

Алйыған әбейҙең аңлашылып бөтмәгән фәлсәфәһен тыңларға теләмәгән Дилемма тәгәрмәсле сумкаһын һөйрәп, ары атланы, күңелен аҡланыу уйы өйкәне: "Алла алдында ниндәй ғәйебем булһын. Никого не убивала, бер кемде лә таламағанмын, үҙемсә йәшәргә теләйем, бары шул ғына!"

* * *

Бына ул нисәнсе көн файҙаһыҙға йүгергеләп, баш ҡаланың ҙур ойошмаларын, предприятиеларын ҡыҙырып эш эҙләй. Ҡайҙа ғына барһа ла иң башта пропискаһының барлығы-юҡлығын белешәләр, кире яуап алһалар, шундуҡ бороп сығарыу яйын ҡайыралар, йәиһә, бер һантыйға ҡарағандай, һауалы текәләләр ҙә үҙ эштәре менән булашып, уның хаҡында бөтөнләй оноталар, башты баҫып сығып китеүҙән башҡа сара ҡалмай.

Был ҡала ер ябып өҙлөкһөҙ ҡайҙалыр ашыҡҡан халыҡты бер юлы упҡан аждаһаны хәтерләтә. Аждаһа көнөн дә, төнөн дә уяу, тонсоҡторғос төтөн тыныуы тынды ҡурып алып бара, үҙе өҙлөкһөҙ геүләү, ухылдау, һыҙғырыу тауыштары сығара. Бер мәлгә генә булһа ла серем итә, тынысланa микән был иләмһеҙ йән эйәһе? Уның ҡоршауына ҡамалғандар һәр саҡ нимәгәлер асыулы, йөҙҙәре йәмерәйгән, бер-береһен тапаларға тырышып йүгергәләйҙәр, йығыл, берәү эргәңә килмәйәсәк, ярҙам ҡулын һуҙмаясаҡ. Тағы бер нисә көн файҙаһыҙға ҡала ҡыҙырғандан һуң гәзиттәге рекламалар мөйөшөндә "имеҙеүсе кәрәк", тигән белдереүҙе уҡып, ҡыҙыл кирбестән һалынған коттедж янына килде, йортто уратып алған бейек таш ҡойманың тимер ҡапҡаһына килеп төртөлдө, баҙнатһыҙ үрелеп, бәләкәй ҡапҡа бағанаһындағы ус аяһылай төймәгә баҫты. Эс яҡта наҙлы көйгә тартым ҡыңғырау шылтыраны. Көйлө саҡырыуға яуап итеп, эстә күмәк эттәрҙең өрөүе ишетелде, әммә был яҡҡа яҡынлаусы тойолманы. Көн һайын асыла һалып бармайҙыр, бағана менән ҙур ҡапҡа араһына ҡыл иләк ҙурлығындағы үрмәкес ауы тартылған. Бына йәбешкәк ептәргә төңгө күбәләк килеп эләкте лә, ысҡына алмай, йәнасыҡҡа тыбырсынырға тотондо, тик ысҡыныу ҡайҙа - елпенгән һайын ҡанаттар ҡәһәрле тоҙаҡҡа уралғандан урала ғына бара. Табыш эләгеүен абайлаған ҡап-ҡара үрмәкес ҡайҙандыр килеп сыҡты ла ептәр буйлап күҙ эйәрмәҫлек тиҙлектә шыуып, табышына ташланды. Дилемма кинәт ынтылып, бөжәкте ергә һуғып төшөрҙө лә уны кроссовкаһының үксәһе менән баҫып иҙҙе, ҡорбанынан ерәнгәндәй, аяғын ҡаҙ бәпкәһе үләненә ышҡыны.

Ниһайәт, мискәләй йыуан кәүҙәле, тәбәнәк буйлы, бирән ҡорһаҡлы, ҡара күҙлек кейгән көньяҡ кешеһе килеп сыҡты ла, күҙлеген һалып, тура, яҫы ҡаштарын йыйырып, һораулы төбәлде:

- Что вам надо, девушка, слушаю, гаваритэ... - Акцентлы тауыш мискә төбөнән килгәндәй геүелдәне.

- Здравствуйте? - Сәләм алынмағас, йомошон йомошларға ашыҡты. - Я по объявлению...

Бирән ҡорһаҡ артынан эйәрергә ишаралап, бәләкәй ҡапҡаны асыҡ ҡалдырып, ата айыуҙай таш һуҡмаҡтан коттедж яғына төмрәңләне.

Ут ҡыҙыл төҫтәре менән күҙҙе ҡамаштырып, тамылйып атҡан ләлә сәскәләре һуҡмаҡтың ике яғынан теҙелгән, йортто балдаҡҡа ураткан сирень ҡыуаҡтары ла сукланып сәскәгә бөрөләнгән. Хуш еҫ бөркөргә тейеш ишек алдынан уҡшытҡыс эт тиҙәге еҫе килә. "Ғәжәп, сәскәләр тәү ҡарашҡа күркәм һымаҡтар, ә ниңә һуң уларҙан йәм, матурлыҡ бөркөлмәй?" Һул яҡта оҙон бер ҡыйыҡ аҫтына алынған гараж, мунса, келәт ишектәре күренә. Улар эргәһенә эт ояһы эшләнгән. Ә икенсе яҡта стеналай бейек, апаруҡ оҙон, ярты яғы көпләп рәшәткә ҡалҡҡан, һәр айырым вольерҙан эт һыны төҫмөрләнә. Тимәк, унда эт аҙбары. Кемуҙарҙан абалаған өрөү тауыштары ла шунан килә. Йорттоң эргәһендә асыҡ зәңгәр ҡыйыҡлы, ҡалған өлөшө аҡҡа буялған беседкалар ҡалҡҡан. Шуларҙың береһенә сал сәсле, кейгән кейеменән, кәүҙә торошонан аҡһөйәклек аңҡыған ир кеше һаҡҡан. Ул өҫтәлгә терһәкләнгән дә йоҡомһорай, әүелйей. Аяҡ тауыштарын ишетеп, ситкәрәк айырым ҡуйылған оянан күрер күҙгә сәйер, томшоғо көмрәйгән, аяҡтары ҡамыт, аҡ йөнлө йоҡа тиреһе аша көслө мускулдары беленгән эт килеп сыҡты ла муйылдай ҡара, тәңкәләй тумалаҡ, бер-береһенән алыҫ урынлашҡан күҙҙәрен һораулы яндырҙы, томшоҡ өҫтө тиреһен йыйырып, тештәрен ыржайтып, тоноҡ өрөү өнөн сығарҙы.

- Сидеть, Белка! - Бирән ҡорһаҡ вайымһыҙ мөңгөрләп, этте тынысландырҙы ла тупһа ауыҙына еткәс, эткә түгел, фәҡәт уға ғына тәғәйенләнгән сираттағы фарманын бирҙе. - Ошонда көт!

Дилемма бер аҙҙан саҡырыу буйынса эскә инде лә ундағы затлы йыһаздарға иҫе китеп, телдән ҡалды. Эске яҡ стена ҡиммәтле ҡыҙыл ағас менән көпләнгән, иҙәндә ҡабарып ятҡан келәм аяҡ табандарын наҙлы иркәләй, түшәмдә тоҡандырмаған хәлдә лә нурҙар сәсеп, ҡиммәтле люстралар йылҡылдай.

Күрһәтелгән бүлмәгә үтте. Унда ла нескә зауыҡ төҫмөрләнә, артыҡ ҡаралты күҙгә бәрелмәй, шул уҡ ваҡытта улар ҡулай урынлаштырылған. Бүлмә эсендәге бөтә нимә береһе икенсеһен тулыландырып, тамамланған бөтөнлөк хасил итәләр. Йомшаҡ күн менән көпләнгән ҡәнәфигә һылыу, еренә еткереп һылап-һыйпанған ҡатын һеңгән. Нәфис бармаҡтарында ҡатын-ҡыҙҙар өсөн тәғәйенләнгән затлы сигарет төтәй. Ул билдәһеҙлеккә төбәлеп, инеүсене абайламаны ла шикелле. Бына аҡ, һығылмалы ҡул алға һонолдо:

- Справкағыҙҙы бирегеҙ!

- Нимә? - Дилемма аңлап еткермәй, аңшайып ҡалды - Мин белдереү буйынса...

- Беләм. Әйттеләр. Шуға ла сәләмәтлегегеҙ тураһында справка һорайым түгелме?

Документтарҙы биниһая ваҡыт аҡтарҙы, ҡағыҙҙарҙан хата эҙләгәндәй ҡат-ҡат уҡыны. Уҡый ҙа, матур күҙҙәрен һынамсыл ҡыҫа биреп, килеүсегә төбәлә.

- Хәҙер сисенегеҙ! Инәнән тыума сисенегеҙ! - Ҡыйынһынып ҡалыуҙы күргәс, ҡағыҙҙарҙы кире һондо.- Теләмәйһегеҙ икән, мин һеҙҙе сараһыҙламайым һәм ары тотҡарламайым. Хушығыҙ.

- Юҡ, юҡ, мин хәҙер. - Ташҡа әүерелгән бармаҡтар көскә ҡыймылдап, күлдәк төймәләренә йәбеште. Сисенеп бөткәс, ҡулдары менән кәүҙәһен ҡосаҡлап, ел-дауылда сайҡалған яңғыҙ ҡайындай, иҙән уртаһына баҫты. Саманан тыш тулҡынланыуҙандыр, ҡош тәне ҡалҡып, тотош кәүҙәһе ҡалсылданы.

Тикшереүсе торҙо, ҡабаланмай ғына, талғын баҫып, Дилемманы әйләнеп сыҡҡас, ҡаршыһында туҡталды:

- Эске күлдәгең, күкрәксәң таҙа, тәнеңдән дә һаҫыҡ тир еҫе килмәй. Значит, чистоплотная!



✓ *Салауат Юлаевтың исеме Палдиски өсөн шул тиклем үҙ, хатта урамда кешегә: "Беҙ Башҡортостандан!" - тиһәң, "Вы из родины нашего Салаватушки? Милости просим!" - тип ихласлыҡ менән әңгәмә ҡора башлайҙар.*



- Тырнаҡтары еренә еткереп игәлгән, ялтырауыҡ лак ягылған нәфис ҡул осо ҡыйыу үрелеп, түштәрҙә ҡапшаны, имсәк остарына ҡағылды, баҙарҙа һауын һыйырын һайлаймы ни. - Түшеңдең тулылығына ҡарағанда, һөтөң етерлек һымаҡ. Баланды ла имеҙәһеңдер?

- Э-э-э, ниндәй бала?

- Һеҙ нимә, Уралданмы әллә?

Тыуған ерен күреп-белмәйенсә, төпкөлгә һынап, уны тома наҙанға иҫәпләп, үҙенсә кәмһетмәксе, мыҫҡыл итмәксе. Сатнатып, бынан да яманыраҡ итеп яуап бирер ине лә, урыны был түгел, шуға, буталып яуапланы:

- Юҡ, ул... үлде. Тыуҙы ла үлде.

- Аңлашылды. Әлегә кейенә тор. Мин хәҙер. - Еңел һөйәкле, һомғол һынлы ҡатын өҫтөндәге затлы халат итәктәрен килешле елпеп, бүлмәнән сығып китте лә, бер аҙҙан ҡабат инеп, урынына сумды, нимәлер хәл иткәндәй, бер килке уйланып ултырҙы. Ниһайәт, ҡарар яңғыраны. - Миңә оҡшанығыҙ, уныһын йәшермәйем. Ошоғаса гел әрпештер, йә ҡарт бисәләр килде. Ә һеҙ йәш, таҙа. Тик әйтегеҙ әле, мин баянан бирле асыҡлай алмай йонсойом, һеҙ - ҡаҙаҡмы, әллә яҡутмы? Паспортығыҙға әллә ниндәй, мин ишетмәгән, күрмәгән-белмәгән милләт яҙылған.

Дилемма буталып аңлатты.

- Поняла, выходит не ошиблась, с Урала, значит. - Ҡатын бүлтек ирендәрен бөрөштөрөп, апаруҡ ваҡыт өндәшмәй ултырҙы ла ҡарарын әйтте. - Ят милләт кешеһе булараҡ, һеҙҙе эшкә ҡабул итә алмайым. Һау булығыҙ!

Юғалыңҡырап ҡалған Дилемманың тауышы ҡалтырап сыҡты:

- Баланы имеҙеү өсөн милләт мөһимме ни?

Ҡатын түбәнһетеп, һауалы ҡараны:

- Вы действительно из провинции. Был мөһим, үтә лә мөһим, сөнки балаға һөт аша милләт минталитеты, рухы күсә. Һеҙҙе башҡаса тотҡарламайым.

Юлы уңмағанға йәне көйөп, шыпырт ҡына сығыу яғына үтеп бара ине, баяғы йоҡомһораған ир туҡтатты:

- Эй, һин, кил әле! - Яҡынлағас, эргәһенән урын күрһәтте - Ултыр бына бында, минең ҡаршыма.

Дилемма ҡыйынһынып ҡына ултырғысҡа янбаштарын терәне лә һиҙҙермәҫкә тырышып, иргә һирпелде. Ултырған килеш серем иткән ирҙең йөҙө ҡайһылыр кимәлдә күрмәлекле: бурҫлаҡ биттәр, итләс танау, дүрткелләнеберәк тамамланған эйәк, яҫы маңлай, бая, ингәндә иғтибар иткән сал сәстәр. Ҡолаҡтар һыртынан башланып, ярты сикәне япҡан бакенбардалар йөҙҙәге ағзаларҙы бер урынға йыйып, уға абруй һәм дәрәжә өҫтәй. Бына йомоҡ күҙҙәр асылды һәм Дилемма, ҡурҡҡандай, артҡа тартылды. Уға ҡоторған эттекенә тартым, ҡан һауған ташбыҡ күҙҙәр аҡайып ҡарай ине. Боҙ һалҡынлығы, уҫал тәкәбберлек ағыла төҫлө уларҙан. Ағыла ла йөҙҙәге кешелек сифаттарын йыуа, юҡҡа сығара. Ҡайһылай ҡурҡыныс!..

**(Дауамы бар).**

*СӘХИФӘНАМӘ*

# УНДА САЛАУАТТЫ ҘУРЛАЙҘАР,

## унда Салауат рухы менән йәшәйҙәр!

**(Башы 7-се биттә).**

Ә бит, бер уйлаһаң, каторгалағы кеше дымлы һауа шарттарында, йүнләп кеше лә йәшәмәгән ярымутрауҙа нисек итеп 25 йыл ғүмер һөргән һуң? Етмәһә, ул бит ихтилалдар ваҡытында бер нисә тапҡыр ҡаты яралана. Шул килеш һөргөнгә киткән батырҙың хәле бик насар булырға тейеш ине кеүек бит. И. Гвоздикованың яҙмаларында: "Маршруты его передвижений за один год боевых действий позволяют говорить о том, что Салават буквально не слезал с коня. Он обладал большой физической силой и выносливостью. Трижды в сражениях под Оренбургом, Кунгуром и Осой был тяжело ранен, но с едва зажившими ранами возвращался в строй. На левой щеке остался рубец как след боевой схватки под Оренбургом, а в сентябре 1775 г. по приговору губернатора И. А. Рейнсдорпа лицо Салавата было обезображено продавленными на лбу и щеках указными знаками - клеймами "З, Б, И" (злодей, бунтовщик, изменник) и вырезанием ноздрей..."

Бынан тыш, аталы-уллы батырҙарҙы Рогервикка 175-әр тапҡыр ҡамсы һуҡтырып алып барғандарын да иҫкә төшөрһәк, шул тиклем язаларҙан һуң сардар Салауат юлда уҡ ауырға тейеш ине, тип уйларға була...

Кем белә, бәлки, Салауат ысынлап та тыуған яғы менән тығыҙ бәйләнештә йәшәгәндер? Һәр хәлдә, быға бик ныҡ ышанғы килә, хатта сиркәүҙә бөгөн һаҡланған әйберҙәрҙең дә батырҙыҡы икәнлегенең раҫланыуын теләй күңел...

Бөгөн Изге Георгий сиркәүендә беҙгә күрһәткән пистолет менән тесак (бысаҡ) та Салауаттыҡы булыуы бик ихтимал. Уларҙың да датаһы XVIII быуатҡа ҡарай. Урал казактарында һаҡланған риүәйәттәрҙә әйтелгәнсә, пистолет батырҙы ҡулға алғанда ҡулында булған, аҙаҡ хөкөм сығарғанда ла енәйәтен раҫлар күрһәтмә дәлил булып хеҙмәт иткән. Һуңынан хужаһына саҡма һуҡҡысы ҡыҫҡартылып, хөкөм тантанаһын күрһәтеп, тәтеһе ватылып, кире ҡайтарылған.

Тесак йәки юнғы, ике яҡлы бысаҡты Салауат каторгала эш барышында ла, көндәлек тормошта ла ҡулланған. Тәүге һабы юғалған, әммә әлеге мәлдәгеһе һуңғараҡ шуға оҡшатып эшләнгән.

Быйыл йәй, 22 июлдә, Палдискиҙа Салауат Юлаевтың һәйкәле яңыртылып ҡуйылды, ундағы тантанала Башҡортостандың Милли музейы директоры Ғәли Вәлиуллин да ҡатнашты. Был хаҡта мәғлүмәт сығанаҡтары хәбәр итте. Изге Георгий сиркәүе руханийы Валерий Назаренко унда сығыш яһарға әҙерләнгән. Бына уның телмәренән өҙөктәр, улар беҙгә тарихи ысынбарлыҡты эҙләгәндә кәрәк булыуы бик ихтимал: "Он мог бы уйти в зарубеж, например, в Турцию, как это сделали запорожцы или казаки-старообрядцы (некрасовцы), но Салават избрал страдальческий путь принесения себя в жертву искупления за народ. И таким образом он спас не только свой народ, участвовавший в восстании, от репрессий победившей стороны, приняв на себя всю тяжесть карательной машины екатерининского режима, но он спас и честь законного Наследника Престола - будущего Государя Императора Павла I, с надеждой взиравшего на народный престол. Салават был честным воином, верным присяге, данной законному Государю Императору Петру Федоровичу, и поэтому Наследник Престола Великий Князь Павел I относился одобрительно ко всем, кто сохранял верность присяге, данной Петру III, ибо Наследник - цесаревич был уверен, что его царственный родитель жив. Салават тоже был в этом уверен и служил Государю Петру III верой и правдой, за что и пострадал от тех, кто вероломно совершал государственный переворот".



*Валерий Назаренко Салауаттың портреты менән.*

Салауат Юлаевтың исемен халыҡҡа тулы образында ҡайтарыу маҡсатынан Валерий Назаренко Салауат Юлаев исемендәге халыҡ-ара клуб ойошторған, уның гимнын булдырған, гербын эшләгән. Үҙе президенты булып тора. Гербында Башҡортостан гербы менән Эстонияныҡы урынлаштырылған. Иң башында торған лира - ул Салауат шиғриәте символы. Имән һәм лаврҙан эшләнгән венок - Эстония сағылышы. Аҫта - Екатерина II заманында булдырылған Балтика портының гербы.

Гимн тураһында айырым һөйләп китеү кәрәк. Гимн урынына улар XVIII быуаттан сиркәүҙә яңғыраған кантты алған. Әйткәндәй, һүҙҙәре - Салауат Юлаевтыҡы. Быныһы ла беҙҙең өсөн бер яңылыҡ булды:

*Я гляжу на цепи гор*
*В нашем благостном краю*
*И, вбирая их простор,*
*Божью милость познаю.*
*Песней небо раскололось,*
*Соловей поет в долу,*
*Как азан звенит твой голос,*
*Богу вознеся хвалу!*
*Не зовет ли на молитву*
*Славный наш Башкортостан?*
*Помни их - героев битвы,*
*Наш Урал - родимый стан!*
*Заплатили они кровью*
*И не дождались похвал.*
*Осеняет нас любовью*
*Древний наш седой Урал!*
*Солнцем небо озарилось,*
*Скакуны летят в опор.*
*Радость, счастье, Божья милость*
*Ждут нас на вершине гор!*

Валерий Назаренконың тағы ла бер фекерен еткерәм: "Салауат Юлаев мосолман дине вәкиле булһа ла, ул бындағыларҙы иманына бүлеп ҡарамаған, сөнки Аллаһтың барлығын һәм берлеген танаған. Юҡҡа ғына уны казактар "воин-харатейник" тип хәтерләмәгән, сөнки телмәре, үҙен тотошо менән уның үҙе артынан эйәртерлек көсө булған. Улай ғына ла түгел, Салауат Юлаев доғалары ярҙамында был донъянан киткән ата-бабалары менән аралаша алған. Бындай яугирҙарҙың эшмәкәрлеге үҙҙәренең вафатынан һуң да халыҡҡа хеҙмәт итеүен дауам итә. Ни өсөн беҙгә был хаҡта әйтмәйҙәр, тиһегеҙме? Аңлатам: "Екатерина батшабикә ҡушҡанса, "имя предали вечному забвению". Башҡортостан халҡы ла бөгөн шул хәлдә йәшәй. Батырығыҙҙың исеме юғары кимәлдә иленә ҡайтасаҡ әле".

Салауат Юлаевтың исеме Палдиски өсөн шул тиклем үҙ, хатта урамда осраған һәр кешегә барып өндәшеп: "Беҙ Башҡортостандан!" - тиһәң, "Вы из родины нашего Салаватушки? Милости просим!"- тип ихласлыҡ менән әңгәмә ҡора башлайҙар. Һәйкәле янынан да халыҡ өҙөлмәй, унда ла хәбәрҙәре Салауат тураһында булды.

Юл ыңғайы ингән тавернаға аяҡ баҫыуыбыҙ булды, уның хужаһы Галина Малютина шулай уҡ беҙгә Салауат хаҡында һөйләй башланы. Бына ҡайҙа икән Салауатты ҙурлау! Бына ҡайҙа ул Салауаттың рухы менән йәшәү! Ул батырыбыҙға арнап яҙылған шиғырын дөйөм йыйынтыҡта баҫтырған һәм беҙгә лә уҡып ишеттерҙе. Унда шундай юлдар бар:

*Не смог смотреть ему в глаза,*
*Такая сила в них была!*
*В тот миг стояла, как броня,*
*За ним его Башкирия.*

Палдискиҙың тупрағын алып ҡайтыуҙы ла маҡсат итеп ҡуйғайныҡ беҙ. Шуға күрә танытмаһына ҡул ҡуйҙырыр өсөн мэрияға юлландыҡ. Вице-мэр Елена Вилльман ҡул ҡуйған ҡағыҙҙа түбәндәге юлдар яҙылған: "Настоящим подтверждаю, что земля, вложенная в металлическую капсулу с надписью на башкирском и русском языках, взята с места предполагаемого захоронения усопших арестантов крепости Рогервик, среди которых был и Салават Юлаев, признанный как национальный герой башкирского народа и его отец Юлай Азналин. Капсула передана потомкам Салавата Юлаева и Юлая Азналина для доставки в музей Салавата Юлаева в с. Малояз Салаватского района Республики Башкортостан".

Әйткәндәй, Виктор Сәлим улы сәфәргә сығыр алдынан уҡ капсуланы ентекле әҙерләп, башҡортса һәм урыҫса яҙмаларҙы гравюра менән эшләтеп, изге тупраҡты рәсми рәүештә алып ҡайтыу хәстәрлеген ойошторҙо. Эйе, бында килгән һайын һәр кем тупраҡ та, таш та алып ҡайтҡандыр, әммә һәр сәфәрҙең үҙ маҡсаты. Заманында бында Башҡортостан вәкилдәре йыш булған. Хөкүмәт Премьер-министры урынбаҫары Хәләф Ишморатов етәкселегендәге ҙур делегация батырҙың исемен мәңгеләштереү буйынса ҙур эштәр атҡарған. Ул ваҡыттағы Матбуғат, нәшриәт һәм полиграфия идаралығы начальнигы урынбаҫары Фәнил Ҡоҙаҡаев етәкләгән журналистарҙан торған төркөм Палдиски тәьҫораттары буйынса "Батыр рухы менән осрашыу" тигән китап та сығарҙы. Ундағы иҫтәлекле урындарҙа Хөкүмәт Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитовтың 2012 йылда ҡалдырған яҙмалары ла һаҡлана.

Елена Вилльман беҙҙе Балтик диңгеҙе ярҙарына алып барып, һөргөндәгеләр эшләгән урындарҙы күрһәтте, тап ана шул ерҙә тултырҙыҡ инде беҙ тупраҡты. Барыһын да видеоға төшөрҙөк, улар "Бәйләнештә" социаль селтәрендә ҡуйылды. Каторжандар эшләгән урында бер йылға ла аға. Әйткәндәй, ни сәбәпләлер, уның исемен берәү ҙә белмәй. Салауат шишмәһе тип атап киттем уны. Улар ошо ерҙә эшләгәс, аяҡ баҫҡан урындары булғас, моғайын, тәһәрәт алып, намаҙ ҙа уҡығандыр әле. Яр буйлап теҙелгән эре таштар махсус ҡуйылғанға оҡшаған. Әйтерһең, кемдер аяҡтарын сайҡар өсөн урынлаштырған. Салауаттың исеме менән йәшәй был ҡала.

**Лариса АБДУЛЛИНА.**
**Палдиски, Эстония.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ДАРЫУ УРЫНЫНА - күнегеү

■ Физик әүҙемлек кешегә рухи сәләмәтлеген һаҡларға ярҙам итә. Норвегия ғалимдары 30 мең кешене тикшереп, шундай һығымтаға килгән. Күнегеүҙәрҙең биологик һәм социаль йәһәттән ыңғай яҡтары күп. Уны хатта депрессия менән көрәшеү программаһына индерергә кәрәк, тигән фекерҙә белгестәр. Бер тапҡыр ҙа күнегеүҙәр яһамаған кешеләр депрессияға йышыраҡ бирелә, уларҙың кәйефе лә насар була. Ә бына аҙнаһына 1-2 тапҡыр күнегеүҙәр яһау хәлде ҡырҡа үҙгәртә. Статистика буйынса, депрессия - донъяла иң күп таралған психик ауырыуҙарҙың береһе. Хәҙерге медицина антидепрессанттар ҡуллана, әммә улар һәр осраҡта ла ярҙам итмәй. Улар һимереүгә, матдәләр алышыныуын боҙоуға килтереүе ихтимал. Шуға ла дарыуҙарҙы күнегеүҙәргә алыштырыу мөмкинлеге - ҙур табыш, ти ғалимдар.

■ Атеросклероз булмаһын тиһәң, иртәнге аш аша. Иртәнсәк ашамау ғәҙәте мөһим ағзаларға ҡан һәм кислород килеүҙе сикләй. Һынауҙар йөрәк-ҡан тамырҙары һәм хроник бөйөр сирҙәре осрамаған кешеләрҙә үткәрелгән. Уларҙы 3 төркөмгә бүлгәндәр. Беренсе төркөм көндәлек энергияның 5 процентын ҡулланған, йәки ҡәһүә, һыт ҡына эскән. Икенсе төркөм 20 проценттан ашыуын ҡулланған, йәки яҡшы итеп ашаған. Өсөнсө төркөм 5-20 процентҡа ҡулланған, йәғни иртәнге аш түбән калориялы булған. Атеросклероз билдәләре иртән бер нәмә лә ашамаған йәки түбән калориялы аҙыҡ ҡулланған кешеләрҙә йышыраҡ осраған. Иртәнге ашты инҡар итеүселәрҙең бил үлсәме, шулай уҡ тән массаһы индексы, ҡан баҫымы, ҡанда май һәм шәкәр күрһәткестәре күберәк булған.

■ Һәр өсөнсө кешелә парфюмға аллергия бар. Бынан тыш, ул баш ауыртыуына, астмаға килтереүе ихтимал. Белгестәр билдәләүенсә, духи һәм яһауҙа ҡулланылған күп кенә эфир майҙары ла сәләмәтлек өсөн хәүефле булыуы бар. Мәҫәлән, рауза майынан яһалған бета-дамасценон тигән берләшмә аллергия башланыуына йоғонто яһай.

■ Көнсығыш Финляндия университеты ғалимдары 42 йәштән 60 йәшкә тиклемге 1621 ир-егетте тикшергән һәм мунса юғары ҡан баҫымы менән яфаланыусыларға ла файҙалы тигән һығымтаға килгән. Һынауҙар 22 йыл дауам иткән. Мунса, сауна яратыусылар араһында юғары ҡан баҫымы сире һирәк осраған. Ғалимдар билдәләүенсә, даими мунсаға йөрөү йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен, ҡапыл ғына йөрәк өйәнәгенән үлеүҙе иҫкәртә. Былар барыһы ла ҡан баҫымы менән бәйле проблемаларҙың булмауы менән бәйле, ти белгестәр. Сауна ҡан тамырҙарын нығыта, тирләү ҡан баҫымын түбәнәйтә.

■ Организмдың дөрөҫ эшләүендә көн тәртибе мөһим роль уйнай. Дөрөҫ туҡланыу, йоҡо һәм ялға етерлек ваҡыт бүлеү, витамин һәм микроэлементтарҙың запасын тулыландырып тороу - быларҙың барыһы ла һеҙҙең тормошоғоҙҙа мотлаҡ булырға тейеш. Быларҙан тыш, ҡайһы бер ябай ҡағиҙәләрҙе үтәү кәрәк. Иртән тиҙ уяныуҙы ғәҙәт итеп алығыҙ, уянғас та оҙаҡ ятмай, һыу ҡойоноғоҙ, физик күнекмәләр эшләгеҙ. Көндөҙ организм күпкә әүҙемерәк, шулай ҙа сәғәт берҙәрҙә ял итеп алыу ҡамасауламаҫ. Мөһим эштәрҙе киске алтынан һуңға ҡалдырырға ярамай.

СИТ ЕРҘӘРГӘ БАРЫП…

# ҠЫРҒЫҘСТАНДА ҠУНАҠТА







**Ҡырғыҙстанға сәйәхәтебеҙ йәй көнө булғайны. Ләкин унда күргәндәр, алған тәьҫораттар барыбер тынғы бирмәй, күңелдә йөрөгәс, ҡағыҙға төшөрөп, "Киске Өфө" гәзите уҡыусылары иғтибарына тәҡдим итергә булдым.**

...Ҡырғыҙстан баш ҡалаһының "Манас" аэропортында мине Олег Тэн тигән корея егете ҡаршы алды. Олег бер автокомпанияла водитель булып эшләй. Кәрәк ваҡытта Ҡырғыҙстандың хөкүмәте уларҙы төрлө эш өсөн яллай икән. Сталин осоронда корея-лыларҙы Алыҫ Көнсығыштан Ҡырғыҙстанға, Ҡаҙағстанға һөргәндәр. Олег шундай кореялыларҙың нәҫеленән. Бишкәк ҡалаһында 1982 йылда тыуып, шунда үҫкән, ҡырғыҙ телен белмәй, русса аралашабыҙ. "Ҡырғыҙ телен уҡытманылармы ни?" тип һорайым. "Юҡ", тип яуап бирә. Әйтеүенсә, ҡала мәктәптәрендә уҡыу-уҡытыу әше әле лә русса алып барыла икән. Уҙаллы төрки телле дәүләт өсөн ҡыҙыҡлы хәл, әлбиттә.

Бишкәк, билдәле булыуынса, Ҡырғыҙстандың төньяғында урынлашҡан. Ҙур ҡатлы йорттар күп түгел. Ил президентының беренсе һанлы "Ала Арча" исемле дәүләт резиденцияһына элдерәбеҙ. Унда иң юғары кимәлдә "Алтайская цивилизация и родственные народы алтайской языковой семьи" тигән ғилми форум башланырға тейеш. Конференция үткән залға кергәндә ил президенты Алмазбек Шершен улы Атамбаев форумды асҡайны инде. Үҙенең сығышында президент төрки телле алфавиттарҙы латин графикаһына күсереүгә ҡырҡа ҡаршы булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Был һүҙҙәр, әлбиттә, Ҡаҙағстан яғына таш булып атылды. Унан һүҙ Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Зәки улы Хәмитовҡа, Татарстан Республикаһы президенты Р. Миннихановҡа, Яҡут Республикаһы (Саха), Алтайҙан килгән юғары ҡунаҡтарға бирелде.

Төштән һуң конференцияла ҡатнашыусылар Бишкәктән 400 саҡрым көнсығышта ятҡан Ҡырғыҙстандың иң күренекле урындарының береһе - Ыҫыҡ-күлгә юлланды. Беҙ ҙә - коллегам, филология фәндәре кандидаты Зиннур Әмир улы Сиражетдинов, беҙҙе оҙатып йөрөүсе, педагогия фәндәре кандидаты Гөлъегет Үмәр улы Соронҡулов менән Олегтың "Тойота"һында шулай уҡ Ыҫыҡ-күлгә юл алдыҡ. Гөльегет Үмәр улына 65 йәш, төҫкә илленән артыҡты бирерлек түгел. Ваҡытында Ҡырғыҙстандың мәғариф министры урынбаҫары булған, шул ведомствоның төрлө идаралыҡтарын етәкләгән, әле иһә ғилми институтта эшләй. Хәләл ефете менән һигеҙ балаға ғүмер биргәндәр. Шуларҙың өсөһө әлеге көндә сит илдәрҙә йәшәй икән: бер ҡыҙы Яңы Зеландияла, икенсеһе - Швецияла (швед егетенә кейәүгә сыҡҡан). Иң бәләкәй малайҙарына ун ике йәш. Әммә малайҙы олаталарына уллыҡҡа биргәндәр. Тимәк, был бороңғо йола ҡырғыҙҙарҙа әле лә йәшәп килә.

Еңел машина баш ҡаланан сығып, Чу йылғаһы үҙәне буйлап көнсығышҡа елдерә. Үҙәнде ике яҡтан Тянь-Шань тауҙары уратҡан. Чу әллә ни ҙур түгел, әммә тау йылғаһы булараҡ, көслө ағымлы. Ҡырғыҙстанда ауыл хужалығы яҡшы үҫешкән. Төньяҡ Ҡырғыҙстан алма, абрикос, фасоль һәм башҡа ауыл хужалығы продукцияһын үҫтереү менән дан тота. Былтыр Бишкәктән көнбайышта урынлашҡан Талас үҙәнендә фасоль үҫтереү ҙур табыш килтергән. Ул ныҡ уңған, күбеһенсә автомашиналарҙа Төркиәгә оҙатҡандар. Фасоль үҫтереүселәр бер йыллыҡ уңыштан бер нисә иномарка алып ултыртҡандар, ти. Ауыр сәнәғәт төрҙәре әллә ни күп түгел, еңел сәнәғәт, аҙыҡ-түлек етештереү үҫешкән. Әлеге көндә дәүләт бюджетына иң күп һалымды сит илдәрҙә эшләүсе ватандаштары түләй икән. Икенсе урында - Канада инвестицияларына төҙөлгән алтын сығарыу предприятиеһы.

Яҙ етеү менән ҡырғыҙҙар малдарын тауҙарға ҡыуа, унда йәйләүҙән йәйләүгә күсенеп йөрөйҙәр (был вертикаль күсенеү тип атала). Көҙгә кире йылға үҙәндәренә төшәләр. Шулай уҡ ҡырғыҙҙарға әлегә тиклем ҡыр ҡоштары (бөркөт, ҡарсыға) менән һунарға йөрөү йолаһы һаҡланған.

Йәйләп тауҙар юлға яҡынлашҡандан-яҡынлаша һәм бара торғас үҙән бөтөп, тар ғына тарлауыҡҡа әйләнә. Ул Боом тарлауығы тип атала. Тарлауыҡты үткәс, Ыҫыҡ-күл башлана. Машинала күлдең төньяҡ ярҙары буйлап тағы ла 100 саҡрымға тиклем барҙыҡ. Юл күлдән 100-200 м йыраҡлыҡтан ғына үтә. Күл буйлап төрлө ауыл-ҡалалар, курортттар, ял итеү йорттары урынлашҡан. Зыяраттар йыш осрай. Ҡырғыҙҙарҙың зыяраттары әле лә бик үҙенсәлекле урындарҙың береһе. Унда ҡәбер таштарының, мазарҙарҙың ниндәй төрләөһө генә юҡ. Ҡапҡа, тирмә, мавзолей һәм башҡа формалағы мазарҙарҙы әле лә төҙөйҙәр икән. Улар алыҫтан күренеп тора.

Ыҫыҡ-күл буйында, күренеүенсә, элек-электән халыҡ күп йәшәгән. Урта быуаттарҙа ҡәберлектәргә ҡуйылған балбалдар бик күп. Уларҙы хатта урам буйында, ябай магазин ҡырында ла күрергә мөмкин. Ниндәй генә төрлө балбалдар булмаған. Балыҡ күтәргән, сынаяҡ аҫты тотҡан кеше һындарын да күрергә тура килде (улар Сыңғыҙ Айтматов исемендәге "Рух Ордо" мәҙәни үҙәгендә урын алғандар).

Икенсе көндө Ыҫыҡ-күл буйында Ҡырғыҙстан Республикаһы Президенты А.Ш. Атамбаев Ҡорманжан Датка исемендәге күскенселәр цивилизацияһы үҙәген асты. Үҙәк заманса төҙөлгән бинала урынлашҡайны, ә уның территорияһында Ҡырғыҙстанда йәшәгән төрлө халыҡтарҙың тирмәләре ҡоролғайны. Улар араһында башҡорт тирмәһе лә бар. Тирмә матур биҙәлгән, милли аштар ҡуйылған. Әммә тирмәләге Ҡырғыҙстан башҡорттары татар милли кейемендә инеләр. Беҙҙең һорауға, башҡорт милли кейеме юҡ, тип яуап бирҙеләр, бер егет ҡурайҙа уҙаллы уйнарға өйрәнгән. Һөйләштәре лә татарсаға тартым. "Беҙ инде Ҡырғыҙстанда дүртенсе быуын йәшәйбеҙ", тине шундағы бер апай. Бәлки, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте башҡорт милли кейеме менән ярҙам итер, тигән теләктә беҙ килеһе тирмәгә йүнәлдек. Алтай халҡының тирмәһендә беҙҙе тоҙло сәй менән һыйланылар. Икенсе тирмәнең яртыһында яҡуттар, яртыһын корейлылар биләгән. Шулай уҡ уйғыр, үзбәк тирмәләре менән дә танышып өлгөрҙөк.

Ҡырғыҙ халҡына хас булған этнографик экспонаттар тупланған Үҙәк, әйтеүемсә, XIX быуаттың икенсе яртыһында - XX быуат башында йәшәгән ҡырғыҙ ханы Ҡорманжан Датка исемен йөрөтә. XX быуат башында уның биләмәһендә күренекле фин сәйәсмәне, генерал Карл Густав Маннергейм ҡунаҡ булып киткән. Был ваҡытта инде Ҡорманжан ханға 80 йәш тирәһе булған.

Иртәгәһенә Бишкәк университетында күренекле ҡырғыҙ эпосы "Манас"-тың башҡортса З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә сыҡҡан тәржемәһенең презентацияһы булды. Унда БР Хөкүмәте Премьер-министр урынбаҫары С.Т. Сәғитов, М. Аҡмулла исемендәге БДПУ ректоры Р.М. Әсәҙуллин, эпосты тәржемә итеүселәрҙең етәксеһе, китаптың мөхәррире З.Ә. Сиражетдинов, ошо юлдар авторы ҡатнашты. Сығыштарҙы Башҡортостан дәүләт филармонияһы артисы И. Хәйруллиндың ҡурайҙа уйнауы биҙәне. Әлеге көндә башҡорт эпосы "Уралбатыр"ҙы ҡырғыҙ теленә тәржемә итеүсе профессор Ибраһим Абдувалиевтың сығышы ла беҙҙең өсөн ҡыҙыҡлы булды. Профессор еңел булмаған тәржемә эшендә ниндәй ҡыйынлыҡтар кисереүе тураһында бәйән итте. Көҙгә тәржемәне тамамлаясағын белдерҙе. Беҙ уға уңыштар теләп, "Урал батыр" эпосы оҙаҡламай ҡырғыҙ телендә лә донъя күрер, тигән ышаныста аэропортҡа юл алдыҡ.

**Шамил ИҪӘНҒОЛОВ, тарих фәндәре кандидаты.**

*ҠАЙТАУАЗ*

**"Киске Өфө"нөң 34-се һанында баҫылған "Яратып та, яратылмай йәшәү…" исемле мәҡәләгә иғтибар иттем. Ундағы сығыштар бер миндә генә түгел, күптәрҙең күңелендә шаңдау тапҡандыр, моғайын. Кемдер килешкәндер, кемдер килешмәгәндәр.**

# ШӘРИҒӘТ ҠАНУНДАРЫ ЛА...

## мөхәббәтле ғаилә яғында

Мәҡәлә башында 80 йәшлек ағинәй Сара Бикйәнованың фекере ошолай тип башлана: "Шәриғәт ҡанундарына ярашлы, үҙ ризалығынан тыш ҡыҙҙарҙы көсләп кейәүгә биреү Октябрь революцияһынан һуң бөтөрөлөргә тейеш булһа ла, совет осоронда ла ҡыҙҙарҙы шундай мәрхәмәтһеҙ юл менән кейәүгә биреү күренештәре осрай ине әле..." Хөрмәтле Сара апайға һәм шәриғәт ҡанундарын борондан уҡ белмәгән һәм хәҙер ҙә улар менән таныш булмағандар өсөн әрнеү һәм ҡыйырһытыу ҡатыш әйтер һүҙҙәрем бар. Динебеҙ закондарын, Бәйғәмбәрҙең талаптарын белмәү арҡаһында дөрөҫ булмаған эштәр атҡарған осраҡтар борондан булған, әлбиттә. Халыҡта дингә ҡарата насар фекер уятыу ниәте менән совет осоронда хатта бына шундайыраҡ мәғәнәләге әҙәби әҫәрҙәр ҙә барлыҡҡа килгән. Һәр саҡ күңелде өйкәгән бына ошо һорау буйынса уңайы тура килгән һайын бер-ике һүҙ булһа ла әйтергә тырышам: **шәриғәт ҡанундарына ярашлы, ир егеттең генә түгел, ә ҡатын-ҡыҙҙың да никахҡа ризалығын алыу мотлаҡ!** Аллаһ илсеһе ғәләйһис-сәләм ҡатын-ҡыҙҙың ризалығын алмай тороп, уны кейәүгә бирергә ҡушмаған. Әгәр ҡатын-ҡыҙ "юҡ", тип әйтә икән, үҙ ихтыярынан тыш уны бер кемдең дә никахлаштырырға хоҡуғы юҡ. Тик ҡыҙ оялсанлығынан бер ни ҙә өндәшмәй икән, быны уның никахҡа ризалығы, тип һанау мөмкинлеге хаҡында ғына әйткән Бәйғәмбәребеҙ ғәләйһиссәләм. Мәҙрәсә белеме булған һәр имам был хаҡта бик яҡшы белә. Үкенескә, борондан халыҡта Ҡөрьән талаптарын, Бәйғәмбәр сөннәтен үҙенсә бороп, шәриғәт ҡанундарын "үҙенә ҡулайлаштырырға" тырышҡан кешеләр була килгән. Ана шундайҙар арҡаһында динебеҙгә ҡағылышлы күп кенә нәмәләрҙе яңылыш аңлап аптыранабыҙ. Бына шундай дин кешеләре хаҡында әле революцияға тиклем йәшәгән мәшһүр Аҡмуллабыҙ былай тип яҙған:

*...Ҡай муллалар халыҡҡа*
*ялғанлайҙар*
*Хәйерҙән ҡаламын,*
*тип ҡурҡҡандан,*
*Көсө бар мирзаларға*
*ярамһынып,*



*Шәриғәтте күңел өсөн бороп һалған...*

Йәш ҡыҙҙы кәләш итеп алырға хыялланған бай кеше муллаға күберек итеп хәйер биреп, тап шағирыбыҙ әйтмешләй, "шәриғәтте бороп һалған" осраҡтар күп булған шул, үкенескә. Ә инде Октябрь революцияһынан һуң динебеҙгә ниндәйерәк быҫраҡ яғырға белмәгәндәр өсөн бына шундай хәлдәр етә ҡалған да инде. Шунлыҡтан да, бәғзеләребеҙ шәриғәт ҡанундарын "мәрхәмәтһеҙ" тип атай. Октябрь түңкәрелешенән һуң аңыбыҙ ҙа икенсе юҫыҡҡа көйләнгән шул. Хатта ҡайһы берәүҙәр тарафынан хәмер эсеүҙең, зина ҡылыуҙың, рибаның (риба - ростовщичество) Аллаһы Тәғәлә тарафынан бөтөнләйгә тыйылыуы әҙәм балаһының хоҡуғын боҙоу һымаҡ ҡабул ителә. Күптәр әле булһа тормошто, ҡунаҡ-мунаҡтарҙы, туйҙарҙы хәмерһеҙ хатта күҙ алдына килтерә алмай. Шулай уҡ оло гонаһ шомлоғо булырҙай, кешеләрҙе бурыс һаҙлығына батыра торған рибаһыҙ (яңыса - ипотека) бер нәмә лә һатып алып булмай, тигән инаныуҙа күптәр. Шәриғәт ҡанундарын үтәмәй, "шул көйөнсә генә" ҡорған нихахтың зина икәнлеген дә бәғзеләр белергә теләмәй. Ә динебеҙ закондары, кемдәрҙер уйынса, әле булһа "мәрхәмәтһеҙ" булып ҡала. Яҙыусыларыбыҙҙың борон ҡыҙҙарҙы ихтыярынан тыш кейәүгә биреүҙәре хаҡындағы әҫәрен уҡығандар шундай ваҡиғалар ысынбарлыҡта булған, тип иҫәпләүҙе дауам итә. Тик аныҡ кешеләрҙең ебәргән оло хаталарын шәриғәт ҡануны тип һанап, динебеҙгә тел тейҙереү һис ярамай.

Ир менән ҡатынды димләп өйләндереү буйынса ла үҙ фекерем бар. Минең атайым менән әсәйем дә яҡындары, таныштары димләүе буйынса өйләнешкән. Биш бала үҫтереп, ғүмер буйы бер-береһен ихтирам итеп, татыу йәшәнеләр. Сирек быуат хәрби хеҙмәттә булған оло ағайымдың да еңгәм менән бергә иңгә-иң терәп йәшәгәндәренә быйыл илле йыл тулды. Ағайым сираттағы отпускыһына ҡайтҡан арала уларҙы ла димләп ҡауыштырғандарын хәтерләйем. Әммә уларға ҡарап күптәр көнләшер ине! Ә тирә-яғыбыҙға баҡһаҡ, бер-береһен "өҙөлөп һөйөп" тормош ҡорған күпме ғаиләләр тарҡала икәненә шаһит булып торабыҙ. Йәшәй башлағандарынан алып бер нисә айҙан, хатта тиҫтәләгән йылдарҙан һуң да айырылышыусылар күпме!

Шәриғәт ир менән ҡатындың бер-береһен ихтирам итеп йәшәүен талап итә. Динебеҙ ҡанундары буйынса, ҡатын кешенең иренә буйһоноп йәшәргә тейешлеген дә күптәр дөрөҫ итеп аңламай ҡаңғыра. Бында ҡатын кешенең үҙенә генә хас булған функцияларын еренә еткереп үтәп йәшәүе күҙ уңында тотола. Ә ир кешегә йөкмәтелгән бурыс - күпкә күберәк һәм ауырыраҡ. Бөтә ғаиләне матди яҡтан тәьмин итеүҙән тыш, көслө заттарға үҙ ҡатынына ҡарата ихтирамлы, яҡшы, ағымлы мөғәмәләлә лә булырға ҡушҡан Бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм. Минең ныҡлы инаныуымса, бер-береңде яратыу мәсьәләһен тик ир менән ҡатын араһындағы булған мөнәсәбәттәр менән сикләү аҙ. Яратҡан кешене артыҡ идеаллаштырмай ғына, балаларыңа булған мөхәббәтте иң алғы планға ҡуйып, бер-береңде иң беренсе нәүбәттә балаларыңдың атаһы йә әсәһе итеп яратыу ғаиләне һаҡлап алып ҡалыуҙың төп ысулы булалыр. Ҡатын менән ирҙең үҙ-ара ихтирам тойғоһо балаларына ҡарата булған һөйөү менән бергә туҡылып, ғаилә тип аталған ҡаҡшамаҫ ҡәлғәгә әүерелергә тейеш. Шәриғәт тә, башҡа донъяуи ҡағиҙә-ҡанундар ҙа ғаиләгә ҡарата бына шундай талап ҡуя.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

*ПАРСАЛАР, ӘЙТЕМСӘЛӘР*

# ҺАУЛЫҠ - ҘУР БАЙЛЫҠ

* * *



Үҙеңде ғәҙәти тыныс кеше итеп тойоу өсөн күп бәндәләргә хас көнсөллөк, ғәйбәт, насар уй-ниәт ише алама ғәҙәт, шойҡандарҙан ҡотолорға кәрәк.

Үҙеңде һәйбәт холоҡло кеше итеп күрер өсөн бүтәндәрҙең ғәйебен, алама ҡылығын кисерә белергә лә, үҙеңде ғәфү итеү, игелек ҡылыу, һәр кемгә иғтибар, ихтирам тойғолары тәрбиәләргә кәрәктер башта.

Үҙеңде бәхетле кеше итеп тойор өсөн изге уй-маҡсаттарыңа өлгәшеү менән бергә бүтәндәрҙе лә бәхетле итешеүҙә булышлығың тейеүҙәлер, моғайын.

* * *

Йәш саҡта һәр кем һөйкөмлө.
Ҡартлыҡ - аҡһаҡаллыҡ һөйкөмө.

* * *

Мунса тәнгә шифа,
Йылы һүҙ йәнгә шифа.

* * *

Эштән кеше үлмәй,
Эшлектән сығыуҙан үлә.

* * *

Эшләп ашағандың ашы тәмле.
Матур ғүмер һөргәндең эше йәмле.

* * *

Кешегә бер генә бирелгән ғүмерҙе
берәгәйле итеп йәшәргә ине.
Һәләтеңә яҡын һөнәрҙәрҙе
бына тигән итеп эшләргә ине.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

### Аҡса - стимулмы, маҡсатмы?

"Ҡайһы бер кешеләр, хатта уларға бөтөнләй балыҡ кәрәкмәһә лә, ғүмер буйы балыҡҡа йөрөй", тигән Генри Дэвид Торо. Аҡса өсөн генә эшләһәң, бер ваҡытта ла бәхетле булмаясаҡһың, аҡсаң да артмаясаҡ. Йыһан шулай итеп беҙҙе ысынлап та оҡшаған эш менән шөғөлләнеүгә этәрә. Эшеңде яратһаң, төп иғтибарыңды аҡсаға йүнәлтмәйһең, ҡағиҙә булараҡ, уларҙы күберәк эшләйһең. Аҡса эшләү - ул уйын, ә һәр уйында иҫәпте күҙәтеүсе түгел, уйынсы еңә. Әлбиттә, аҡсаны баһаларға була һәм баһаларға кәрәк тә, әммә үҙ эшеңә бирелгәнлек - ул аҡса эшләү теләгенә ҡарағанда күпкә көслөрәк. Әлеге ваҡытта нимә эшләһәң дә, шуны иҫеңдә тот: яратҡан эше менән шөғөлләнеүселәр һәр ваҡыт һиңә дәғүәсе буласаҡ. Әгәр үҙ эшеңде ятармаһаң, дәғүәселәрең тапап китәсәк.

Был баҙарҙа буш урын бармы? Оҫталыҡ һәм профессионаллеккә һәр ерҙә лә урын табыла. Кешелектең 80 проценты матур, әммә уртаса кешеләрҙән тора. Таҙа таксиҙы йыш күрәһегеҙме? Табипҡа һуңғы тапҡыр ҡасан тәғәйенләнгән ваҡытта индегеҙ? Магазинда туғандарылай күреп хеҙмәтләндерәләрме? Яратҡан эш менән шөғөлләнеү өсөн мотлаҡ оҙаҡ йылдар белем алырға йәки ҙур аҡса түгергә кәрәкмәй. Быға хатта ҡайһы берҙә кире ваҡиғалар ҙа этәреүе мөмкин.

### Яратҡан эштә аҡса ала алмам…

Оҙайлы киләсәктә яратҡан һөнәр бик йыш осраҡта ҙур килем килтерә. Әлбиттә, һәр ваҡыт түгел. Икенсе яҡтан, ҡайһы берҙә, үҙеңде яратҡан эшеңә бағышлап, аҡсаның элеккегә ҡарағанда әҙерәк талап ителеүен асыҡлайһың. Әйтәйек, һеҙ - эре компанияның президенты икән, ти. Ҙур фатирығыҙ, ял көндәрендә барып ял итергә ҡаланан ситтә йортоғоҙ, ҡиммәтле машиналарығыҙ һ.б. өҫтөнлөктәрегеҙ бар. Һеҙ ғүмер буйы сабыш аттарын үрсетеү менән шөғөлләнәһегеҙ һәм һыбай йөрөү буйынса инструктор булырға хыялланаһығыҙ. Ләкин был теләкте: "Эштән китһәм, ошо шөғөлөм өсөн аҡса етмәүе ихтимал!" - тип баҫтыра киләһегеҙ. Ә бит, әгәр ысынлап та һыбай йөрөү буйынса инструктор булып китһәгеҙ, пентхаустар һәм ҡиммәтле машиналарҙың кәрәге лә ҡалмаясаҡ. Был ҡиммәтле уйынсыҡтарҙы беҙ бик йыш бер генә маҡсаттан сығып һатып алабыҙ - эшебеҙҙе күрә алмауыбыҙ тураһындағы уйҙарҙан арыныу өсөн. Йөрәгегеҙҙе тыңлап һәм ул ҡушҡанса эшләп, матур тормош өсөн ауылдағы бер бәләкәй генә йорт, ҙур булмаған машина ла етә икәнлеген аңларһығыҙ.

### Эш вазифала түгел…

Һәйбәт шәфҡәт туташтарының бер ҡыҙыҡлы сифатын күрергә мөмкин: улар кешеләрҙе медицинаға ҡарағанда нығыраҡ ярата. Был дәлил һеҙгә үҙегеҙгә тап килгән эш һайлағанда ярҙам итер: эш вазифала түгел! Йәшәү өсөн ниндәй эш тапһағыҙ ҙа - ул бары тик беҙҙе башҡалар менән тоташтырыусы күпер генә. Ә ҡәнәғәтлек тойғоһо кешеләргә ни тиклем яҡшы хеҙмәт итеүеңә бәйле. Альберт Швейцер был хаҡта бына нимә тигән: башҡаларға хеҙмәт итеүҙе эҙләгән һәм уның ысулын тапҡан кеше генә ысын мәғәнәһендә бәхетле була ала.

**Эндрю Мэтьюз.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Әгәр ҙә ҡатының шаяртыуыңа көлә икән, был ике нәмәне аңлата ала: йә шаяртыуың ҡыҙыҡ, йә ҡатының шәп.*

*(Тристан Бернар).*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ИШЕМБАЙ РАЙОНЫ ТӘБИҒӘТ ҠОМАРТҠЫЛАРЫ

1



2



Бөтә нәмәлә сама беләү

Шихан ауылынан көнсығыштағы күл (1)

Маҡар ауылы эргәһендә һаҡсылар тауы

Ҡомтертҡес балыҡ икенсе төрлө

Вафа Әхмәҙиев, Рауил Ниғмәтуллиндың тыуған ауылы

Волга йылғаһының һул ҡушылдығы

Билдәле оскостар МИ-28, КА-50, КА-52

Был ҡаяла Салауат мөмерйәһе бар (3)

Ишембай районы гербы һәм флагындағы тау

Юрматы ырыуы ҡошо

Хажы ау. эргәһендә ҡош исемен йөрөткән мөмерйә (2)

"Кешегә (...) ҡаҙыма - үҙең төшерһең"

"Өйөрө башҡаны (...) ҡуша"

БР-зың "Урал" командаһы нимә уйнай

"Бүре ала торған ат (...)өнән таныла, Бүре һуға торған егет белегәнән беленә"

Инглиз ер үлсәү берәмеге

"(...) юлы балаға таҡыр"

"Айыуға аҡыл өйрәткән - (...)"

Бал ҡортоноң өйе

Стәрлетамаҡ эргәһендәге шихан

Күк күкрәгән тауыш сығарған шарлауыҡ (4)

Ҙурлығы буйынса икенсе материк

Ҡан тамырҙарында барлыҡҡа килгән төйөр

Йыл аҙағын билдәләгән бороңғо йола байрамы

"(...) бар ерҙә ат үлмәҫ"

Пуля (ҡусм. мәғәнәлә)

Ризаитдин Фәхретдин 1908 йылда етәкләгән журнал

Көрпәк төбәгә сыҡҡан "ярма"

"Дәрт - дарья, (...) - донъя"

Ишембай һәм Белорет р-на ингән тау ырыты

"Ярлыла - бала, байҙа - (...)"

3



4



80-150 һалдатлыҡ подразделение

Тибеттағы будда монахы

Тауыҡ төшөнә кергән ярма

Ҡалҡыулыҡ, түмәләс (син.)

"... беш, ауыҙыма төш"

⌘

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА** төҙөнә.

**38-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Кинйә. Кәләпүш. Шаҡай. Балта. Булат. Тортила. Һуҡайлы. Урман. Шалҡан. Ыҡсым. Һыу. Бәрҙе. Мышы. Твен. Йөҙөм. Артек. Атом. Ек. Кино. Артыш. Граната. Күперле.

**Вертикаль буйынса:** Һарымһаҡ. Баҡсасы. Йөкмәтке. Кант. Көнгәк. Атыш. Кәләш. Һәнәк. Игенсе. Ҡотоҡсумған. Томат. Әлшәй. Аве. Бау. Быйма. Рәшә. Ауыҙ. Төн. Еңмеш.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**14 октябрь "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия 12+

**15 октябрь "Йүгер, Харис, йүгер..."** (Э. Йәнһүҙин), комедия 16+

**17 октябрь "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури, А. Абушахманов, Ш. Ғилманова инц.). Башлана 15.00, 19.00 16+

**18 октябрь "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия 12+

**19 октябрь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама 16+

**20 октябрь "Ай тотолған төндә"** (М. Кәрим) 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**14 октябрь "Нух кәмәһе"** (У. Хуб), ғаилә өсөн тамаша. Башлана 12.00 0+

**15 октябрь "Йәнкиҫәккәйем"** (Т. Миннуллин), музыкаль комедия. Башлана 18.00 12+

**19 октябрь "Беҙҙең өйҙөң йәме"** (М. Кәрим), хәтирәләр. Башлана 15.00 6+

**20 октябрь "Беҙҙең өйҙөң йәме"** (М. Кәрим), хәтирәләр 6+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**14 октябрь "Лесная ярмарка"** (А. Рахманкулова) 0+

**15 октябрь "Дюймовочка"** (Г.-Х Андерсен) 0+

Башлана 12.00, 14.00

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**19 октябрь "Мизгелдәрҙән тора ғүмерҙәр..."** "Ашҡаҙар" башҡорт эстрада-фольклор төркөмө концерты 6+

**20 октябрь "Люксембургка барып ҡайтҡансы"** (М. Ҡунафин), фантасмагория 12+

*ХОККЕЙ*

САЛАВАТ ЮЛАЕВ хоккейный клуб

# ЯРЫШ ДАУАМ ИТӘ

**КХЛ чемпионаты уйындары дауам итә. 6 октябрь "Салауат Юлаев" үҙ боҙонда "Авангард" командаһын ҡабул итте.**

Иҫәпте юлаевсылар асты, ләкин был уларҙың уйын барышындағы берҙән-бер унышы булды. Ҡунаҡтар иһә хужалар ҡапҡаһына 3 гол индереү яйын табып, матчта еңеү яуланы. Был һөҙөмтә Өфө командаһының рәттән өсөнсө еңелеүенә килтерҙе.

Алдағы уйындағы уңышһыҙлыҡ тәьҫоратын "Салауат Юлаев" Новосибирскиҙың "Себер"е менән осрашыуҙа "шымартты". Матчтың тәүге осоронда уҡ юлаевсылар таблолағы иҫәпте икегә еткерҙе, ә икенсе осорҙа көрәштәше ҡапҡаһына тағы ла бер гол оҙатыу мөмкинлеге тапты. "Себер" иһә был осрашыуҙа үҙенә бер мәрәй ҙә йыя алманы. Шулай итеп, уйын һөҙөмтәһе 3:0.

"Себер"ҙе тар-мар итеү тәьҫиреме, әллә баш тренер күрһәтмәләре һөҙөмтәһеме - "Салауат Юлаев" егеттәре Минскиҙың "Динамо"һы менән осрашыуҙы ла һөҙөмтәле уҙғарҙы. Уйындың тәүге осоронда уҡ юлаевсылар - 3, ә икенсе осорҙа тағы ла бер гол индереп, хужаларҙан күпкә алға сыҡты. "Динамо" тик өсөнсө осорҙа ғына үҙ иҫәбенә ике гол яҙа алды. Ситтәге тәүге уйын Өфө командаһына, 4:2 иҫәбе менән, ышанысլы еңеү килтерҙе.

**Гөлназ МАНАПОВА.**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Октябрь (Мөхәррәм - Сәфәр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 16 (26) дүшәмбе | 6:19 | 7:49 | 13:30 | 16:43 | 18:13 | 19:43 |
| 17 (27) шишәмбе | 6:21 | 7:51 | 13:30 | 16:41 | 18:11 | 19:41 |
| 18 (28) шаршамбы | 6:23 | 7:53 | 13:30 | 16:38 | 18:08 | 19:38 |
| 19 (29) кесе йома | 6:25 | 7:55 | 13:30 | 16:36 | 18:06 | 19:36 |
| 20 (30) йома | 6:27 | 7:57 | 13:30 | 16:34 | 18:04 | 19:34 |
| 21 (1) шәмбе | 6:29 | 7:59 | 13:30 | 16:31 | 18:01 | 19:31 |
| 22 (2) йәкшәмбе | 6:31 | 8:01 | 13:30 | 16:29 | 17:59 | 19:29 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ*

# БЫУЫНДАРЫҒЫҘ АУЫРТҺА...



**Олоғая килә йә теге, йә был ер ауырта башлай. Бик йыш быуындар ыҙалата. Ҡасандыр тигеҙ, шыма ғына булған быуындар ҡапыл шешмәкләнеп, нисектер сығып торған һымаҡ булып китә.**

Халыҡ табиптары, йәғни традицион булмаған ысулдар менән дауалаусылар был осраҡта лавр япрағы һәм артыштан эшләнгән май тәҡдим итә. Бының өсөн 6 өлөш лавр япрағы, 1 өлөш артыш энәләре һәм 10 өлөш аҡ май кәрәк. Аҡ май бик сифатлы булырға тейеш. Ауыл майы - иң һәйбәте. Әгәр магазиндан алаһығыҙ икән, иғтибарлап составы менән танышығыҙ, ул ысын май булырға тейеш, ә маргарин йәки башҡа нәмәләр ҡушылмаһын. Лавр менән артышты кофе тарттырғыстан үткәрегеҙ ҙә майға бутағыҙ. Барлыҡҡа килгән ҡатышманы быуындарығыҙға һөртөгөҙ. Килешкән осраҡта, ауыртыуҙар ике аҙнала үтә.

*- Ҡалай ҡыҙғаныс! - тигән Фәрештә. - Үҙең өсөн генә борсолоуың ғүмереңдәге берҙән-бер башҡарылған изгелегеңде лә яманлыҡҡа әйләндерҙе.*



ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ

**Көҙ миҙгеле төрлө мәҙәни сараларға айырыуса бай булмаҡсы. Шуларҙың береһе 27 октябрҙә Конгресс-холл сәхнәһендә үтәсәк һәм "Ҡурай battle" тип аталасаҡ. Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, сараның ҡуйыусы режиссеры Альмира Әғзәм ҡыҙы СӘФӘРҒОЛОВА менән ошо турала әңгәмәләшәбеҙ.**

# ҠУРАЙСЫЛАР ЯҢЫСА ЯРЫША




**"Өфө эстрада театры" ижади берләшмәһе яңы ғына Халыҡ-ара музыка һәм Ололар көндәренә арнап, сағыу тамаша үткәргәйне. Был юлы сәхнә түре, тимәк, халҡыбыҙҙың милли уйын ҡоралы - ҡурайға?**

- Ысынлап та, тәүге сара бик уңышлы үтте, хатта беҙ тамашасының иғтибарын һәм ышанысын яулау юлында беренсе аҙымды һанаһыҡ, тип әйтер инем. Унда опера солистары Әлим Ҡәйүмов, Ян Лейше, Айгиз Ғиззәтуллин, билдәле эстрада йырсылары Руслан Сәйфетдинов, Фәриҙә Ғәлиәскәрова, Вадим Зәкиев, Айгиз Ханов, Сиявуш Шерматов, Полина Кобец, филармония солистары Флярида Иркина менән Олег Шупиковтар сығыш яһаны. Жанрҙар төрлөлөгө, урам театры, бейеү берләшмәләре ҡатнашыуы концертты бик күңелле, еңел итте. Унда шулай уҡ Олег Ҡасимов етәкселегендәге эстрада-джаз оркестры булды, был да тамашаға ҡабатланмаҫ йәм өҫтәне.

Ҡурайға килгәндә, мин бер ҡасан да халҡыбыҙҙың был уйын ҡоралына битараф булғаным юҡ. Мин уны ихтирам итәм һәм яратам. Бынан ун йылдар элек "Ҡурай-шоу" тигән бер проект булғайны, унда ҡурай төрлө уйын ҡоралдарына ҡушылып яңғыраны. Былтыр "Евразия йөрәге" Халыҡ-ара сәнғәт фестивале сиктәрендә үткән "Ҡурайфест"ты ойоштороусыһым. Унда күберәк йәштәр ҡатнашты, улар халыҡ көйҙәрен дә, заманса көйҙәрҙе лә башҡарҙы. Йәғни, тамашасы ҡурайҙың музыка ҡоралы булараҡ бөтөн мөмкинлеген күрҙе. Эстрада-джаз оркестрына, хатта электрон музыкаға ҡушылып уйнанылар.

**Ҡурай баттл, тимәк, ярыш? Әллә был ярыштан бигерәк яңы концерт формаһымы?**

- Был яңы тамаша төрө һәм ул тамашасының күңеленә хуш килер, тип ышанабыҙ. Әлбиттә, йырсының йәки музыканттың оҫталығын баһалау ул икенсе нәмә, беҙҙең үндәй маҡсат юҡ һәм булманы ла. Уйлап ҡараһаң, һәр концерт үҙенә күрә шулай уҡ ярыш бит ул. Йырсылар сәхнәгә сығып, үҙҙәренең һәләтен күрһәтә, бының өсөн ул үҙенең һәләтен даими үҫтерә, камиллаша. Шуға ла был тамашаны баттл тип атаныҡ. Театрлаштырылған концерт буласаҡ ул, музыкаль ринг формаһында барасаҡ. Ҡурайсылар үҙ-ара төрлө жанрҙарҙа "ярышасаҡ". Ҡурайҙа көйҙө традицион башҡарыу менән бер рәттән, заманса хиттар ҙа буласаҡ. Тамашасы быға тиклем ишетеп өйрәнмәгән композициялар ҙа көтәлә. Бөтөн серҙе асып бөтөп булмай, ҡыҙыҡ тамаша булмаҡсы, мең тапҡыр ишеткәнсе, бер тапҡыр барып күреү яҡшыраҡ.

**Тамашасы бындай сараларҙың дауамын көтә аламы?**

- Ҡурай моңона арналған концерттар һәр ваҡыт уңышлы үтә, ҡыҙыҡһыныу бар. Шундай аҫыл гәүһәрҙәребеҙ - халыҡ ижады бар. Ҡурайсыларыбыҙ ҙа күп, шөкөр. Был концертта Рәсүл Ҡарабулатов, Ишморат Илбәков, Рушан Биктимеров, Илшат Ишморатов, Марсель Сәйетов, Илнур Хәйруллин, Марат Йәнозаҡов, Илмир Ҡоҙабаев ҡатнаша. Режиссер булараҡ, ҡурайсылар менән эшләү тәжрибәмдән файҙаланып, тәҡдим менән сыҡтым уларға. Улар, тәү сиратта, үҙ эшенең оҫталары, юғары кимәлдәге профессионалдар. Шуға өҫтәп, улар ошондай яңылыҡтарҙан, эксперименттарҙан ҡурҡмай. Шуға ла бындай концерттарҙың дауамы булыуы бик ихтимал.

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

ИҒТИБАР: АКЦИЯ!

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы

**"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына килгән хаттарҙы барлауҙы дауам итәбеҙ. Һеҙ ҙә башҡорт әҙәбиәтендә һәр быуын кешеһенең иғтибарына лайыҡ әҫәрҙәрҙе/китаптарҙы тәҡдим итеүҙән туҡтамағыҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар!**

**74. Шәриф Бикҡол "Шиғырҙар. Поэмалар" китабы.** "Шағир Шәриф Бикҡол ижады менән һәр быуын кешеһе таныш булырға тейеш, тип иҫәпләйем. Сәнки уның шиғырҙары йыр кеүек, күңел ҡылдарын сиртерлек лирика менән һуғарылған. Шулай уҡ шағир ижады илһөйәрлек, заман ауырлыҡтарына бирешмәҫлек көслө рух, үҙе йәшәгән осорҙоң иң ҡырҡыу проблемаларына ла бағышланған. Юҡҡа ғына Шәриф Бикҡол тураһында яугир шағир, шағир-гражданин, йырсы шағир, балалар яҙыусыһы тип әйтмәйҙәр. Уның йыйынтыҡтарын уҡығанда шағирҙың йөрәгендәге моң ишетелгәндәй, шунда уҡ уйланҙырған һәм тормошсан шиғырҙары ла байтаҡ. Шуға күрә, кешелә лирика һәм шиғриәт донъяһына һөйөү тәрбиәләү маҡсатында тәҡдим ителә торған китаптар рәтендә торған Шәриф Бикҡолдоң "Шиғырҙар. Поэмалар" йыйынтығы "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы исемлегендә мотлаҡ булырға тейештер", - тип яҙа Айгөл Ишбулдина.

**75. Тамара Ғәниева "Ғүмер кисеүҙәре" китабы.** "Тамара Ғәниеваның был китабы 2015 йылда баҫылып сыҡҡан. Күләмле йыйынтыҡҡа шағирәнең һуңғы йылдарҙа яҙылған әҫәрҙәре тупланған. Автор яҡты кисерештәр, тойғолар, рухиәт, бәҡыйлыҡ, фанилыҡ кеүек фәлсәфәле төшөнсәләргә мөрәжәғәт итә. Ил, ер, тел, халыҡ язмышы ла шағирәнең ижадында сағылыш таба. Тамара Ғәниеваның ижады рухиәткә һыуһаған кешеләр өсөн табыш буласаҡ", - тип яҙа Гүзәл Ғәлимова.

**76. Әсхәл Әхмәт-Хужа "Донъя шундай матур!" йыйынтығы.** "Әсхәл Әхмәт-Хужаның шиғырҙар йыйынтығын да "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы исемлегенә индерергә булыр.

*"Шағир данына һәр кем дә риза,*
*Шағир булмайҙар, яҙып ғариза",* - тигән юлдары иҫкә төшә. "Донъя шундай матур!" тип аталған йыйынтығына Әсхәл Әхмәт-Хужа робағиҙарға тартым ҡыҫҡа шиғырҙарын индергән. Тос мәғәнәле, ҡыҫҡа шиғырҙарҙың хәҙерге "ҡабалан" заманда уҡыусы аңына тиҙ барып етеүе, иҫтә ҡалыуы бик ҡиммәт", - тип яҙа Тамара Искәндәриә "Бәйләнештә"ге сәхифәһендә.

**"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына ҡушылығыҙ, үҙегеҙ уҡыған башҡорт китаптары/әҫәрҙәре араһынан иң-индәрен һайлап, шулар тураһында редакциябыҙға төбәп хаттар яҙығыҙ. Йәки "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите төркөмөндә махсус булдырылған "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы" тип аталған фекер алышыу битендә "#башкитап" хештегы ҡуйып, үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ!**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БЕР КЕШЕГӘ ҠАРАҒАНДА,

## бер төркөм кешене алдауы еңелерәк

Бөтә кешеләр ҙә күп төрлө эш эшләй ала... Тик әгәр ул эшкә хәҙер уҡ тотонорға тура килмәһә.

**(Роберт Бенчли).**

Әгәр ҙә ҡатының шаяртыуына көлә икән, был ике нәмәне аңлата ала: йә шаяртыуың ҡыҙыҡ, йә ҡатының шәп.

**(Тристан Бернар).**

Күп кешеләр өсөн тәҙәлеү - ул етешһеҙлектәрен алмаштырыу ғына.

**(Вольтер).**

Хәҙер бөтә нәмә лә элеккесә түгел. Минең хәтерем - айырыуса.

**(Эшли Бриллиант).**

Ғүмер шулай ҡоролған: ҡайһы берҙә ныҡ яратҡан кешеләрҙең ерләнеүендә һәм бик тә күрә алмаған кешеләрҙең юбилейҙарында булырға тура килә.

**(Веслав Брудзиньский).**

Әгәр ҙә икәү асыуҙа айырылышһа, тимәк, уларҙың мөнәсәбәттәре ныҡ көслө булған.

**(Поль Валери).**

Йөҙләгән таныш булмаған кешеләр менән ҡаты етәкселек иткән ир кеше йыш ҡына, өйгә һуң ҡайтып инеү менән, аяҡкейемен тауыш-тынһыҙ сисеп үҙырға тырыша.

**(Финли Питер Данн).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше үлгән. Ғүмерендә бик күп яуызлыҡтар башҡарғанға күрә, ул Тамуҡ ҡапҡаһы янына эләккән. Унда уны Фәрештә ҡаршы алған һәм шулай тигән:**

**- Ожмахҡа эләгеү өсөн һинә үҙ ғүмереңдә эшләгән бер генә изгелегеңде иҫкә төшөрөү ҙә еткән. Яҡшы ғына уйлап ал.**

**Кеше бер ваҡыт урмандан китеп барғанын, үрмәксене күреп, уны тапамаҫҡа тырышып, иплә кенә үтеүен иҫенә төшөргән. Фәрештәнең битендә йылмайыу күренгән һәм шундуҡ күктән Ожмахҡа алып китер үрмәксе ауы төшкән. Уның эргәһендә торған ҡалған гонаһлылар ҙа теге кеше артынан менә башлаған. Ләкин кеше, быны күреп, үрмәксе ауы йыртылыр тип ҡурҡып, ҡалғандарҙы ҡыуа, йыға башлаған. Шул ваҡыт ау, ысынлап та, йыртылып, ул кире Тамуҡҡа эләккән.**

**- Ҡалай ҡыҙғаныс! - тигән Фәрештә. - Үҙең өсөн генә борсолоуың ғүмереңдәге берҙән-бер башҡарылған изгелегеңде лә яманлыҡҡа әйләндерҙе".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
Гөлфиә ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт:
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зөйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Өфө ҡалаһы,
Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru
kiskeufa@mail.ru

«Печатник» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

Телефондар:

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 12 октябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673

Тиражы - 4677
Заказ - 2089/10